ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

11-17 февраль (шаҡай)
2023
№5 (1047)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Төркиә фажиғәһе**



2

**Аҡ тирәк - күк тирәк,**

**йәки Беҙҙең уйындар онотолормо?**



6,11

**Ир-егеттең йәшен һорамайҙар,**

**ә эшләгән эшен һанайҙар...**



8-9

**Күңелдәргә...**

**кот һәм бәрәкәт күндырҙылар**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* Яңы 2023 йылда ла *"Киске Өфө"* менән бергә ҡалыуығыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылырға өлгөрмәй йә онотоп ҡалыусылар булһа, әйтә күрегеҙ: улар *"Киске Өфө"*гә (ПР905 индекс) *17 февралгә* тиклем яҙылып, марттан алдыра башлай ала. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - *532 һум 40 тин* тора. Бергә булайыҡ!**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАШҠОРТОСТАН ТАРИХЫН...

## һәр бала өйрәнһен!



**Былтыр Рәсәй Президенты Владимир Путин мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдарын әҙерләргә ҡушҡайны.**

"Үкенескә, һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә тыуған яҡты өйрәнеү предметы программанан төшөрөп ҡалдырылды һәм бының менән белем-тәрбиә биреү эшенең мөһим бер өлөшөнә ғәфү иткеһеҙ битарафлыҡ күрһәтелде. Ә бит Рәсәй үҙенең төбәктәре менән көслө, тибеҙ. Һәм, ысынлап та, Рәсәй илендә элек-электән 200-ҙән ашыу милләт вәкилдәре һыйышып, тыныс йәшәй. Уларҙың һәр береһенә үҙ йола-традициялары, тел һәм рухи-мәҙәни -тарихи хазиналар күп төрлөлөгө хас һәм былар бөтәһе лә ватаныбыҙҙың уртаҡ ҡиммәттәре иҫәпләнә. Шулай булас, һәр милләт халҡы тыуған телен, тарихын өйрәнергә, рухи-мәҙәни хазиналарын һаҡларға бурыслы. Ә былар бит мәктәптәрҙә өйрәнелергә тейеш. Шуға күрә лә ил Президенты Владимир Путиндың мәктәптәрҙә тыуған яҡ тарихын уҡытыуға берҙәм ҡараш булдырыу мәсьәләһен әҙерләргә ҡушыуы - бөгөнгө талап", - тип сығыш яһаны беҙҙең гәзит биттәрендә лә тарих фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһының ағза-мөхбире, Башҡортостан тарихы буйынса ике бүлектән торған дәреслектәр (2004, 2006 йылдар) авторы Айбулат Аҡманов.

Әйткәндәй, республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Башҡортостан тарихы"н уҡытыу буйынса концепция һәм яҡынса дөйөм белем биреү программаһын әҙерләүгә конкурс иғлан ителгән. Унда айырым авторҙар ҙа, 2-5 кешенән торған авторҙар коллективы ла ҡатнашырға мөмкин. Конкурста ҡатнашыуға ғаризалар 20 февралгә тиклем ҡабул ителә. Документтарҙы registoriyarb@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк (Өфө, Минһажев урамы, 120, 213-сө бүлмә). Конкурс ике этапта уҙғарыла. Беренсе этап ағымдағы йылдың 17 мартына тиклем дауам итә (Башҡортостан тарихын уҡытыу концепцияһы проекттарын һайлап алыуҙы үҙ эсенә ала). Икенсе этап 2023 йылдың 10 апреленә тиклем бара. Ул Башҡортостан тарихын уҡытыуҙың яҡынса белем биреү программаһын әҙерләүҙе күҙ уңында тота.

Шулай итеп, белем биреү учреждениеларында уҡыусыларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү маҡсатында башланғыс кластарҙан алып тарихҡа ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләй башларға кәрәк. Тыуған яҡ тарихын уҡытыуҙы тергеҙеү, шулай итеп, мөһим, төп фәндәрҙең береһенә әйләнергә тейеш. Икенсенән, тарих дәреслектәренә талаптар ҙа ҡәтғи ҡуйыла. "Башҡортостан тарихы" уҡыу ҡулланмаларын да, һуңғы йылдарҙағы мәғлүмәттәрҙе лә өҫтәп, тулыландырып, яңынан баҫтырып сығарырға кәрәк.

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# УРАН ҠАЙҘА КҮБЕРӘК,

## беҙҙәме, әллә Байкал күлендәме?




"Башҡортостандың баш ҡалаһында крандан аҡҡан һыуҙа уран Байкал күле һыуындағыға ҡарағанда күпкә әҙ. Был хаҡтағы мәғлүмәт "Тау институты яҙмалары" (Записки Горного института) фәнни журналында баҫылып сыҡты, - тип белдерҙе геолог, В.И. Вернадский исемендәге дәүләт геология музейы директоры урынбаҫары Исхаҡ Фәрхетдинов. - 2016-2021 йылдарҙа беҙ Өфө һәм Өфө районынан 70 һыу өлгөһө алып, Томск политехник университетының ядро тикшеренеүҙәр реакторында эсәр һыуҙың юшҡынын тикшерҙек. Уларҙың һөҙөмтәләре буйынса Өфөнөң үҙәкләштерелгән һыу каналы аша йорттарға килгән һыуҙың юшҡынында, Байкал һыуының юшҡыны менән сағыштырғанда, уран 3 тапҡырға әҙерәк тәшкил иткәнлеге асыҡланды. Өфө һыуында уран күләме 1,44 мг/кг булһа, Байкал һыуында - 4,51. Ни өсөн Байкал һыуы менән сағыштырабыҙ, сөнки ул күпселек химик элементтар ҡатнашмаһы буйынса эталон итеп һанала".

Исхаҡ Фәрхетдинов билдәләүенсә, Өфө һыуында урандың әҙ булыуы ҡала биләмәһенең геологик төҙөлөшө үҙенсәлектәре менән аңлатыла. Баш ҡала һәм уның эргә-тирәһендәге ауылдарҙың күпселек өлөшө гипс һәм эзбиз киң таралған зонала урынлашҡан, ә был тау тоҡомдарында уран элементы әҙ күләмдә була. Тикшереүҙәр шуны ла асыҡлаған: Өфөнөң үҙәкләштерелгән каналы аша килгән һыуҙа уран тупланышы шәхси ҡоҙоҡ һәм скважиналарҙағыға ҡарағанда әҙерәк. Канал аша килгән һыуҙа ул 1,4 мг/кг, ҡоҙоҡтарҙа - 4,0 мг/кг. "Күрһәткестәрҙең төрлөлөгө "Уфаводоканал"дың һыуҙы фильтр аша үткәреүенә һәм һыуҙың төрлө урындан алынғанлығына бәйле, күрәһең, - ти ғалим. - Урандың һыуҙағы тупланышы 30 мг/кг булғанда ул хәүефле тип һанала, тимәк, Өфөнөң үҙәк каналы аша килгән һыуҙа уран һаулыҡ өсөн зарарһыҙ миҡдарҙа".

Шулай итеп, уран - радиоактив элемент булыу менән бер рәттән, көслө ағыулы металл, шуға күрә эскән һыуыбыҙҙа уның әҙ кимәлдә булыуы, ни тиһәң дә, ҡыуаныслы хәл.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ӨФӨБӨҘ СИФАТЛЫ ҮҘГӘРӘ

**Өфөгә, республиканың баш ҡалаһы булараҡ, төбәк етәкселеге тарафынан иғтибар ҙур. Шулай уҡ ҡала хакимиәте лә үҙ эшен урын-еренә еткереп эшләй, тип әйтергә була. Һәр хәлдә илдәге башҡа республикаларҙың баш ҡалаларынан ҡайтыш еребеҙ юҡ. Шулай ҙа һәр саҡ тағы ла яҡшыраҡ булырға ынтылыуҙан туҡтарға ярамай. Ә бының өсөн ҡалалағы һәр ойошма, шәхси эшҡыуарҙар Өфөбөҙҙө тағы ла күркәмләндереү, яҡшы шарттар булдырыу өсөн үҙ тырышлығын һалырға бурыслы.**

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

*✓ Ауыл ерендә үҙ баҡсаңда һәм кәртәңдә йәшелсә-емеш, мал-тыуар үрсетеп тә хәлләнеп китергә була. Хәҙер техника ла күп, тырышлыҡ һалған ир-егеткә был эште атҡарып сығыу бер ни тормай. Тик ялҡаулығыңды ғына еңергә кәрәк.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛҠЫБЫҘҒА ЯРҘАМ ИТЕРЛЕК...

## малыбыҙ ҙа булһын

***Миңлехан ҒӘЙНЕТДИНОВ, эшҡыуар, Белорет районы:*** Беҙҙең халыҡ элек-электән эшсән, тырыш, уҡымышлы булған. Әле лә ошо эшлеклелекте иҫкә төшөрөп, бәләкәй генә булһа ла үҙ эшебеҙҙе асып, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күреп өйрәнергә ваҡыт етте. Ҡаныбыҙҙағы йүнселлекте уятырға, иманыбыҙға ҡайтырға кәрәк, шул саҡта тормош һынауҙарын бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙып, еңел генә үтә алырбыҙ. Ә инде эште ниҙән башларға, тигәндә, кәңәш шул: күңелеңә ятҡан һәм ҡулыңдан килгән бәләкәй генә берәй шөғөлгә тотон. Мәҫәлән, ауыл ерендә үҙ баҡсаңда һәм кәртәңдә йәшелсә-емеш, мал-тыуар үрсетеп тә хәлләнеп китергә була. Хәҙер техника ла күп, тырышлыҡ һалған ир-егеткә был эште атҡарып сығыу бер ни тормай. Тик ялҡаулығыңды ғына еңергә кәрәк.

Ауылда эш юҡлыҡҡа ялҡауҙар ғына зарлана бит ул: уларҙың ҡапыл ғына, тота килеп күп итеп аҡса эшләгеләре килә. Бер ниндәй көс түкмәй, тырышып эшләмәй тороп, бер кем дә ҡулыңа аҡса килеп тоттормай шул. Хатта ҡайҙалыр ялланып эшләһәң дә, үҙеңдең нимәгә һәләтле икәнеңде раҫламай тороп, эш хаҡыңды арттыра һалмаҫтар. Шуға, үҙ эшеңде лә, шөкөр итеп, бәләкәйҙән башларға, һуңынан яйлап үҫешеүҙе күҙалларға кәрәк. Беҙ ҙә ҙурҙан башламаныҡ, ҡатыным менән тәүҙә бәләкәй генә кибет асҡайныҡ.

Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә ниәтләгән кешеләрҙең төп хатаһын ана шул тиҙ арала күп килем алырға теләүендә күрәм мин. Килеп сыҡмаһа, күңелдәре һүрелә, дәрт-дарманы ҡалмай һәм ҡул һелтәп тә ҡуя шунан. Ә кешеләрҙә был еңел байыуға ынтылышты утыҙ йыллап телевизор аша тәрбиәләнеләр: бер ҡайҙа ла эшләгәне күренмәһә лә, мул тормошта типтереп донъя көтөп, рәхәт йәшәгән кешеләр ундағы тапшырыуҙарҙың төп геройына әйләнде. Телевизорҙа хеҙмәт кешеһен, ауыл хужалығы эшсәнен күрһәтеү, уларҙы элекке кеүек байрамдар һәм уңыштары менән ҡотлау ҙа онотолдо. Бөтә каналдарҙа ла йыр-бейеү, фестивалдәр. Был турала күп уйланған бар һәм йәштәрҙе үҙебеҙ, ололар, яҡшы өлгө күрһәтеп кенә бындай кире йоғонтонан арындыра алабыҙҙыр, тим. Иң беренсе шул: ир-ат үҙ еребеҙҙә төпләнеп, үҙ ғаиләһе эргәһендә булған осраҡта ғына балалары эшкә өйрәнеп, матур тәрбиә алып үҫәсәк. Юғиһә, ситтә аҡса эшләп йөрөп тә, тапҡанының ҡәҙерен белмәгәндәр күп, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Уларҙың тормоштоң бәрәкәтен күрмәүе бик тә борсой. Быға беҙ, атай-әсәйҙәр, үҙебеҙ ҙә ғәйепле ҡайсаҡ: балаларҙы артыҡ шаштырып үҫтерәбеҙ, үлгәнсе уларҙы елкәбеҙҙән төшөрмәй бәпләйбеҙ.

Ғаилә, балалар тураһында һүҙ сыҡҡас, ир-егет, атай абруйы тураһында ла әйтмәй булдыра алмайым. Бөгөн ғаилә өсөн бар яуаплылыҡты, бөтә бурыстарҙы ҡатын-ҡыҙ үҙ иңенә йөкмәгән, ә ир-егеттең бәҫе төшөп, нәҫел дауам иттереүсе генә булып ҡалған. Ҡатын ирен ашата, магазинға ла үҙе йөрөй, иренә нимә кейергә, ниндәй машинала йөрөргә, ниндәй өй һатып алырға, уны нисек төҙөргә йәки йыһазларға, балаларға ниндәй тәрбиә бирергә - барыһын да үҙе хәл итә. Ирҙәр "Ҡатыным риза булырмы икән?" тип кенә тора. Ниндәй генә мәсьәлә хәл ителмәһен - бура һатып алыумы, өй урыны алыумы - бар йомош-фәлән артынан ҡатын-ҡыҙ йөрөй. Ир-егеттәрҙә яуаплылыҡ, тәүәккәллек юҡлыҡтанмы был? Ә бит шул мөнәсәбәттәрҙе балалар күреп үҫә. Бына ошолар хаҡында ла уйлайыҡ, абруйыбыҙҙы күтәрергә, иманыбыҙға ҡайтырға, балаларыбыҙға үрнәк булырға тырышып йәшәйек һәм кәрәк саҡта үҙ халҡыбыҙға, туған телебеҙгә ярҙам ҡулы һуҙа алырлыҡ эшебеҙ, малыбыҙ булһын, тип теләйем.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

КӨНАУАЗ

# ТӨРКИӘ ФАЖИҒӘҺЕ



**6 февралдә Төркиәнең көньяҡ-көнсығышындағы көслө ер тетрәү бөтә Ер шарын дер һелкеткәндәй булды. Бындай 7,7 балл ҡеүәтле һәләкәт унда 1939 йылдан алып иң көслөһө булып сыҡты, уның һөҙөмтәһендә 8 февралгә 5 434 кеше һәләк булған, был һан сәғәтләп арта бара. Рәсәйҙең Новости агентлығы мәғлүмәттәре һәләк булыусылар һанын 7 меңдән ашты, тип хәбәр итә. 40 меңдән ашыу кеше һәр төрлө йәрәхәттәр алған.**

Емереклектәр аҫтында ҡалғандарҙы сығарыу һәм эҙләүҙәр дауам итә әле. Төркиәнең көньяғындағы Хатай төбәгендә иҫән ҡалған кешеләр һөйләүенсә, емереклектәр аҫтында ҡалған кешеләрҙең ярҙам һорап ялбарған тауыштары ишетелә, ләкин ҡотҡарыусылар бында килеп етә һәм өлгөрә алмай. 8 февралдә Төркиәнең үҙәк өлөшөндә 2,5 - тән алып 4,6 балға тиклем ҡабатлап тетрәүҙәр теркәлгән, бындай хәүеф илдең башҡа төбәктәрендә лә күҙәтелеүе мөмкин, ти сейсмологтар. Төркиә президенты Эрдоган әйтеүенсә, был ер тетрәүҙән теге йәки был дәрәжәлә зыян күргән кешеләр һаны 13 миллионға барып баҫа. Бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тиҙәр. Был стихия шаңдауы күрше Сирияға ла ныҡ ҡына зыян килтергән, унда һуңғы мәғлүмәттәр буйынса 1,5 мең кеше һәләк булған һәм 3,5 мең кеше яраланған. Ер һелкенеүҙәре Ливандың баш ҡалаһы Бейрутта, хатта Грузия, Әзербайжан менән Дағстанда ла һиҙелгән.

"Ниңә был хәлде алдан иҫкәртеп булмаған?" тигән һорау тыуа. Емереклектәрҙән ҡасып булмағанда ла, һис юғында, кешеләрҙе хәүефһеҙ төбәктәргә күсереү сараһы күрелер ине бит! "Известия" сайты хәбәр итеүенсә, ошо йылдың ғинуарында Рәсәй Фәндәр академияһының Ер тетрәүҙәрҙе күҙаллау теорияһы һәм математик геофизика институты ғалимдары әлеге һәләкәттең тап үҙәген аныҡ күрһәтеп, алдан әйткән булған һәм хатта магнитуданың 8 балға етәсәген дә күҙаллаған, ләкин быны ишетеүсе булмаған, сөнки бөгөнгө шарттарҙа илдәр властары менән фән белгестәре араһында бәйләнештең етешмәүе ҡамасаулай, тип иҫәпләй эксперттар.

Эйе, бөгөнгө сәйәси-иҡтисади шарттарҙа илдәр араһында бәйләнештәрҙең өҙөлөүе йүнлегә килтермәй, әлбиттә, ул ана ниндәй бәләләрҙе киҫәтеүгә ҡамасаулай! Ғалимдар аңлатыуынса, был һәләкәт Төркиә менән Греция биләмәләре буйлап үтеүсе Төньяҡ-Анатолий ярығы арҡаһында килеп сыҡҡан. Бындай төбәктәр сейсмологик йәһәттән бик хәүефле иҫәпләнә һәм бындай урында 30 йыл һайын ниндәйҙер кимәлдә тетрәнеүҙәр ҡабатланып тора. Нисек кенә булмаһын, был тетрәү уның эҙемтәләре хаҡында ла, сәбәптәре хаҡында ла бик күп имеш-мимеш һәм фараздар килтереп тыуҙырҙы. Ҡайһы берәүҙәр тарафынан, бигерәк тә Төркиәнең социаль селтәрҙәрендә, быны АҠШ-тың "йәшертен тектоник (сейсмологик) ҡоралы" һөҙөмтәһе тигән бәхәстәр ҡуйыртылды, сөнки, тип иҫәпләй улар, Америка һәр ваҡыт артыҡ үҙаллы сәйәсәт алып барыусы Төркиә президентының "тәртибе" менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерә килде һәм шуның өсөн уны "аҡылға ултыртып" алырға теләгәндер, йәнәһе...

Ер тетрәү сәбәбен әҙ ҡеүәтле ядро бомбаһы шартлатыуҙан булыуы ихтимал, тип фаразлаусылар ҙа бар. Ни тиһәң дә, был стихия мәлендә ошо төбәктәге мөһим инфраструктура (порттар, нефть терминалдары) зыян күргән. Һәр хәлдә, быйыл май айында буласаҡ президент һайлауҙары алдынан һәләкәт арҡаһында Төркиәнең һәм айырыуса уның президенты Эрдогандың ошондай хәле Америка өсөн ҡулай, тигән белдереүҙәр ҙә бар. Ул тиклемен кем белһен, әммә сәйәсәт - бысраҡ эш, тигәнде һәр кем белә. Ахыр сиктә, уның фажиғәле эҙемтәләре барыбер халыҡ елкәһенә төшә икәнен дә белеп торалар.

Шуныһы бер аҙ күңелде йыуата: Төркиә өсөн ошо ауыр көндәрҙә сәйәсәт ығы-зығыһынан бер аҙ арынып, күп илдәр уға ярҙам ҡулы һуҙа, ҡотҡарыусылар, медицина хеҙмәте бригадалары, инженерҙар, янғын һүндереүселәр, төҙөүселәр отрядтары ебәрә. Һәм, әлбиттә, Рәсәй иң тәүгеләрҙән булып Төркиә менән Сирияға ҡотҡарыусылар төркөмөнөң өсөнсө эшелонын ебәрҙе, бынан тыш, байтаҡ гуманитар ярҙам оҙатылды. Ярҙам тәҡдим итеүселәр күп: Евросоюз илдәре менән бер рәттә АҠШ та бар. Бәлә берләштерә, тигәндәй, бындай берләшеү өсөн мотлаҡ фажиғә кәрәк булдымы икән? Әҙәм балалары ғүмерҙәренең, шулай уҡ илдәр һәм ҡитғаларҙың мәңгелек түгеллеге, ерҙәге кешелек цивилизацияһының теләһә ҡайһы минутта юҡҡа сығыу ихтималлығы хаҡында уйланырға мәжбүр итмәҫме был илдәр хакимдарын? Юғиһә бит, яңылыҡтар таҫмаһынан береһенән-береһе хәүефлерәк хәбәрҙәр килеүен дауам итә.

Әйткәндәй, Төркиәләге ер тетрәү айҡанлы журналистар биргән һорауға Өфө ғалимы, геология-минералогия фәндәре кандидаты Владимир Барышников Башҡортостанда яҡындағы осорҙа бындай хәлдең булыуы мөмкин түгел, сөнки республика тыныс төбәктә урынлашҡан, тип белдерә. Әлбиттә, һиҙелер-һиҙелмәҫ тетрәүҙәр булып алған хәлдә лә, ул хәүеф менән янамай һәм тиҙ тынысланa. Ә бына Өфө ҡалаһы өсөн 3-4 балл кимәлендәге тетрәнеүҙәр ҙә йорттарҙың һәм биналарҙың емерелеүенә килтереүе ихтимал, сөнки ҡала эсендә һаман булһа тығыҙ торлаҡ төҙөлөшө туҡталмай, һәм улар күп ҡатлы итеп төҙөлә. Ә бит баш ҡала тау тоҡомдарында барлыҡҡа килгән бушлыҡ өҫтөндә ултыра. Был хаҡта күп тапҡырҙар яҙылып та сыҡты, ләкин мөмкин тиклем бейек йорттар төҙөп, күберәк килем алырға теләүсе ҡомһоҙ төҙөлөш хужалары был хаҡта ишетергә теләмәй...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороусылар арта, тип белдерҙеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. Оператив мәғлүмәттәр буйынса, уҙған тәүлектә 229 сирле асыҡланған. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 350 меңдән ашыу коронавирус осрағы теркәлгән. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 157 пациент стационарҙа дауалана. Уларҙың 132-һе - 65 йәштән өлкән. Ә 1,7 мең сирле амбулатор шарттарҙа дауалана. Республикала коронавирус һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләү кимәле юғары булып ҡала.

✓6 мартта Өфө аэропортынан Белорустың баш ҡалаһы Минскиға тәүге самолет оса, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. "Башҡортостан менән Беларусь араһында тығыҙ, партнерлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаштырылды, - тине ул. - Беҙ сауҙа, сәнәғәт, мәҙәниәт, туризм өлкәһендә ныҡлы бәйләнештәр булдырҙыҡ. Уларҙы артабан да үҫтерергә теләйбеҙ. Июнь айында Өфөлә ике ил төбәктәренең форумы быға тағы ла бер етди этәргес булыр тип көтәбеҙ". Рейстар аҙнаһына бер тапҡыр, дүшәмбе көнөндә башҡарыла. Юлдағы ваҡыт - өс сәғәт.

✓Башҡортостандың 25 ирекмәндән торған эҙләү-ҡотҡарыу командаһы урындағы халыҡҡа ер тетрәү эҙемтәләрен бөтөрөүҙә булышлыҡ итеү өсөн Төркиәгә юлланды. Хәбәр ителеүенсә, ирекмәндәр емереклектәр аҫтында ҡалған кешеләрҙе эҙләү өсөн махсус өйрәтелгән этте командировкаға алған. Торин ҡушаматлы эт бер нисә тапҡыр ҡотҡарыу операцияларында ҡатнашҡан. Тиҙҙән Башҡортостандан тағы 80-гә яҡын ҡотҡарыусы Төркиәгә юллана, тип билдәләнеләр республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ер тетрәү эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ярҙам күрһәтеү өсөн Төркиәгә осҡан ҡотҡарыусылар тураһында яҙмаһы менән уртаҡлашты. Республика етәксеһе билдәләүенсә, ирекмәндәрҙең күбеһе - профессиональ ҡотҡарыусылар. "Ошондай осраҡтарҙа нисек эш итергә белгән ҡотҡарыусылар, отпуск алып, зыян күреүселәргә ярҙамға ашыҡты. Эшләгеҙ, туғандар!", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

## ӨС ДӘЛИЛ: АБВ



**Йылайыр районының Юлдыбай ауылы "Айыҡ ауыл" бәйгеһенә сыҡты. Хуп! Ауыл активистары, атап әйткәндә, ауыл хакимиәте вәкилдәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар, ағинәйҙәр осрашыуға саҡырҙы. Әйтергә кәрәк, сараға эскелек кеүек кире сифаттан ҡотолоусыларҙың да, шулай уҡ ошо юлға аяҡ баҫырға теләүселәрҙең дә килеүе көтөлмәгәнсә булды. Тағы ла шуныһы: ошондай теләктәре булыусылар осрашыу барған бүлмәнең ишек төбөндә тапанып, инергә ҡыйманы. Кемгә нисектер, миңә был хәл оҡшаны. Сөнки улар ояла белде, шул уҡ ваҡытта сара барған бинаны ташлап та сығып китмәне. Гүйә, ошо йоғонтонан ҡотола торған сараның әҙер булыуын көтөп торҙо.**

**Төрлө һорауҙарға яуап бирҙем, үҙемдең бынан 25 йыл элек нисек итеп эскелектән арыныуым, ниндәй ҡыйынлыҡтар аша үтеүем хаҡында һөйләнем. Осрашыу барышында Юлдыбай ауыл хакимиәтенең эштәр идарасыһы Миләүшә Исәндәүләтованың эскелектең сәбәптәренә бәйле төҙөгән анкетаһы дөйөм ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Унда төп өс сәбәп килтерелә. Комментарий яҙыусы берәү, мәҫәлән, "кеше эшһеҙлектән эсә" тигән фекер әйтә. Әммә бөтә ил эскән совет осорон иҫкә төшөргәндә, был сәбәптең бер яҡлы ғына икәнлеге аңлашыла. Юлдыбайҙарҙың социаль селтәрҙә ойоштorған анкета алыуын мин "Өс дәлил: АБВ" концепцияһында ла ҡараным, бик ҡыҙыҡлы күҙәллауҙар килеп сыҡты.**

# ЭСКЕЛЕК...

## өйгә инһә лә, ҡаныбыҙға инмәне

**А Генетик йоғонто сәбәбе.** Анкетала 21,25 процент тауыш биреүсе эскелектең нәҫелдән, йәғни ҡандан тапшырылыуын сәбәп итеп таный. Әлбиттә, бала, үҫмер өсөн иң тәүге оҡшарға тырышыу объекты - ул атаһы менән әсәһе. Комментарий яҙыусы Айгөл Айытҡолова был йәһәттән халыҡ мәҡәлдәрен бик урынлы килтерә: "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр", "Алма ағасынан алыҫ төшмәй", "Ананан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа".

Шул уҡ ваҡытта "эскесенең балаһы эскесе була" тигән яҙылмаған ҡағиҙә һәр осраҡ өсөн дә ҡулайлы икән? Юҡтыр, тием. Ни өсөн тигәндә, күп кенә балалар эскән ата-әсәһенән ғибрәт алып, спиртлы эсемлектәрҙе ғүмере буйына ауыҙына ла алмай. Әлбиттә, был осраҡта уларҙың ата-әсәһенең эскелеккә бирелеүе файҙаға ғына тип әйтә алмайбыҙ, шулай ҙа "ғибрәт" фактын танырға тура килә барыбер ҙә.

"Генетик йоғонто" тигәндә Әхмәтзәки Вәлиди халҡыбыҙҙың эскелектән бөтөнләй азат булыуы хаҡында "Хәтирәләр"ендә асыҡ миҫал килтереп үтә. Башҡорт ир-аттары тәүге тапҡыр спиртлы эсемлекте Бөйөк Ватан һуғышында "наркомдың йөҙ грамы" рәүешендә ауыҙ итә. Бында ла уларҙың барыһы ла эскелеккә бирелгән тип әйтә лә алмайбыҙ. Башҡорт ауылына ла эскелек фашизмды юҡ иткән ҡаһарман атай-олатайҙарыбыҙҙың ят ғәҙәте булып эйәреп ҡайта. Алтмышынсы-етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа илебеҙҙә сәскә атҡан эскелектең башында ла шул ят ғәҙәттең таралыуы ята. Әммә эскелек халҡыбыҙҙың милли фажиғәһенә әүерелә алманы. Эсеүселәр бар, әммә улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Хәҙер ауылдарҙа үткән туйҙарҙа, мәжлестәрҙә эсерлек кеше таба алмай, хужалар һыйҙарын тотоп урамға сыға.

Әлбиттә, беҙҙең халыҡта үткән быуаттың икенсе яртыһында эскелек таралыуҙа "генетик йоғонто сәбәбе" бар барлыҡҡа, әммә ул төп сәбәпкә инмәйҙер, тием. Әгәр ҙә ул, ысынлап та, ҡанға күскән сиребеҙ булһа, хәҙерге көндә унан ҡотола алмаҫ инек. Айырым кешеләрҙең генә был йоғонтонан ҡотола алмауын "халыҡ эсә" тип әйтеп булмай. Эскелек беҙҙең ҡанға инмәне. Аңдағын йыйып булһа ла, ҡандағын, бысаҡ менән ҡырып иҙән йыуған һымаҡ, йыуып булмай. "Мин эсеүемде ташланым" тигән яҙмаларымда был хаҡта "Башҡортостан эсмәй" тигән бүлектә яҙып үттем.

**Б Мөхит йоғонтоһо сәбәбе.** Анкетала мөхиттең эскелек таралыуына булышлыҡ итеүен 51 процентҡа ашыу тауыш биреүсе таный. Бик етди һандар. Был сәбәпкә килгәндә, Руслан Биккининдың комментарийы ҡыҙыҡлы: "Бер ҡыҫҡа һүҙ менән генә яуап биреп булмаған һорау. Шулай ҙа "кешене уратып алған мөхит" тип ҡуйҙым, сөнки шунан башланалыр. Ниндәй генә депрессия булмаһын, кешенең, әгәр аралашҡан, эргәлә булған кешеләр эсмәһә, бала саҡтан эскелекте генә күреп үҫмәгән бала булмаһа, уның депрессияны араҡы менән дауаларға башына ла килмәҫ ине". Әйтергә кәрәк, "мөхит" сәбәбе тәүге "генетик" сәбәп менән ныҡ бәйле. Сөнки кешенең шәхес булараҡ формалашҡан тәүге мөхите, коллективы - ата-әсәһе, ғаиләһе, ата йорто. Әммә кеше ҡасандыр ата йортонан китә һәм тормош менән йөҙгә-йөҙ осраша. Мөхит проблемаһы тап шул саҡта башлана ла инде.

Аралашҡан мөхиттең йоғонтоһона бер миҫал. Әрмелә барлыҡ һалдаттар ҙа тәмәке тарта. Хәрби хеҙмәткә саҡырылғанда ротаның яртыһы тиерлек тартмаһа, присяга ҡабул итеүгә тәмәкенктәрҙең нисбәте 99 процентты тәшкил итә. Беҙҙең ротала, мәҫәлән, Владимир Кривко атлы белорус егете генә тәмәке-сабаҡынан азат булды. Күрәһең, булмышы ҡабул итмәне. Бынан сығып, шундай һығымта яһарға мөмкиндер: йәмғиәттә йәшәп, унан азат булып булмай.

Фәҡәт уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдарында ғына илебеҙ граждандары "яҡты киләсәк" тигән утопиянан төңөлөп, күптәр тап шул заманда мөхит идеологияһынан азат булып, һәҙәмтәлә эскелектән дә ҡотола алды. Тап шул йылдарҙа мин эскелектән ҡотолғанда үҙәренең мөхитенән мине "юғалтыусы" элекке шешәләштәрем быны ауыр кисерҙе...

**В Депрессияға бирелеү сәбәбе.** Тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙың 12,5 проценты ошоно сәбәп итеп күрә. Иң тәүҙә депрессия төшөнсәһенә аңлатма биреп ҡарайыҡ. Депрессиянан тыш стресс төшөнсәһе лә бар. Кеше стресс кисергәндә ваҡытлыса күңел төшөнкөлөгөнә бирелә, оҙаҡҡа һуҙылған, хроник төҫ алған стресс депрессияға әүерелә. Стрестың кеше өсөн файҙалы яҡтары ла бар, сөнки ул энергияның артыуына булышлыҡ итә, йәғни кеше был хәле менән идара итә ала.

Әгәр ҙә стресты беҙ ваҡытлыса күҙәтелгән ауырыу тип аңлаһаҡ, депрессияны хроник ауырыуға, йәғни сиргә тиңләргә мөмкин булыр ине. Депрессия кешенең организмын ҡаҡшата, нервылар ҡуҙғыуына килтерә, көстө кәметә. Был осраҡта белгестәрҙең кәңәше талап ителә. Әммә күптәр бындай саҡта ярҙамды спиртлы эсемлектән эҙләй башлай. Эйе, эскән саҡта ҡайғылар, депрессияға килтергән сәбәптәр онотола, дингеҙ тубыҡтан була. Әммә иртәгәһенә бахмур синдромы башланған саҡта депрессия, киреһенсә, тәрәнәйә генә бара.

Күп осраҡта эсеү стресс хәлендәге кешене депрессияға килтереүсе сара ла булыуы бар. Был осраҡта бәләкәй генә ялған һылтау ҙа (хатта кемдеңдер әйткән ҡырын һүҙен күтәрә алмау, кемгәлер үсегеү һ.б.) кешене рюмкаға үрелергә мәжбүр итә, әммә иртәгәһенә ул кеше депрессия ҡосаҡлап уяна.

Ә үҙемә килгәндә, хәҙерге хәлемдә мин депрессия юҡ, бары тик Хоҙай Тәғәләгә ышанмау ғына бар, тип иҫәпләйем. Эйе, Хаҡ Тәғәлә беҙгә ауырлыҡтарҙы һынау өсөн ебәрә һәм был һынауҙарҙы һынау итеп ҡабул итә алмаусылар тәүҙә стресҡа, шунан депрессияға дусар була. Шул ғына.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## БАШ ҠАЛАМ



# ӨФӨБӨҘ СИФАТЛЫ ҮҘГӘРӘ

**(Башы 1-се биттә).**

Ҡалала күп төрлө спорт үҙәктәре эшләй. Мәҫәлән, шул уҡ олоһо ла, кесеһе лә ябырылып йөрөгән "Динамо" спорт-һауыҡтырыу үҙәген алайыҡ. Эш яҡшы ойошторолған, һәр нәмә тәртиптә һәм үҙ урынында. Ләкин килеүселәрҙең машинаһын ҡуйыр урын тапмауы ғына уның эшмәкәрлегенә тап өҫтәй. Ә, бәлки, ундағы шлагбауымды алып ҡуйыу хәлде яҡшыртыр, сөнки был осраҡта әллә күпме машина ҡуйыу урыны барлыҡҡа килер ине? Шулай уҡ ҡайһы бер ойошмалар алдында түшәлгән плитә ҡышын бик тайғалаҡҡа әйләнә. Һәм, күп осраҡта, был хаҡта иҫкәрткән иғлан да булмай. Ошо йәһәттән дә тейешле эштәр атҡарылыр, тип өмөтләнәм.

Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ял итеү шарттарын яҡшыртыуҙарын күреү ҡыуаныс. Мәҫәлән, Черниковка биҫтәһендәге "Беренсе май" паркы күҙгә күренеп үҙгәрҙе: оҙаҡ йылдар ҡоро торған фонтандан һыуҙар урғыла, балалар өсөн майҙансыҡтар һәр яҡтан уйланылған, спорт яратыусылар өсөн дә шарттар булдырылған. Парктың хатта үҙ амфитеатры бар. Беҙ, ошо биҫтәлә йәшәүселәр, был үҙгәрештәргә һөйөнөп бөтә алмайбыҙ.

Студент ҡыҙымдың Өфөләге иң яратҡан урыны - тотош бер кварталды биләп торған "Арт-квадрат". Ысынлап та, бында тәмле итеп ашап алырға ла була, төрлө магазиндар күп, концерт һәм спектаклдәр йыш була, ғөмүмән алғанда, "Арт-квадрат" бөтәһенең дә күңеленә хуш килгән урын. Юҡҡамы ни, өфөләр һәр ҡунаҡты нәҡ ошо урынға алып килергә тырыша. Шулай уҡ ҡала буйлап сәйәхәт иткәндәрҙә лә мотлаҡ был урынды күрһәтергә алып киләләр.

Беҙҙең Өфө үҙгәрә, был шикһеҙ. Ләкин ул ҡабаланмай, йәйләп ҡына үҙгәрә. Баш ҡалала ниндәйҙер ҙур үҙгәреш булһын өсөн Өфөлә күләмле сара үтергә тейештер. Мәҫәлән, ШОС һәм БРИКС саммиттары өсөн әҙерлек барышында Өфө иҫ киткес үҙгәрҙе. Һәм бына баш ҡаланың 450 йыллығына ҡарата ла байтаҡ эштәр башҡарыла. Шуға күрә Өфөнөң тиҙ үҙгәреүен көтөргә ярамай, минеңсә - бында барыһы ла һәлмәк кенә, әммә юғары кимәлдә үҙгәрә. Ошо үҙенсәлегебеҙ менән дә беҙ, өфөләр, бәлки, күптәрҙән айырылабыҙҙыр әле. Һәр эштә лә тиҙлек түгел, ә сифат тәүге урында тора икәнен онотмайынса ғына үҙгәрештәр кисереп йәшәп атабыҙ.

**Илдус ӘХМӘТЙӘНОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Төркиә Президенты Эрдоған илдең көньяҡ-көнсығышында ер тетрәүгә бәйле 12 февралгә тиклем матәм көнө иғлан итте. Әлеге ваҡытта Төркиәлә булған Рәсәй туристары өсөн 6 февралдә ике ҡыҙыу линия асылды. Юллама буйынса Төркиәгә килгән рәсәйҙәргә ер тетрәү сәбәпле көтөлмәгән хәл килеп тыуған осраҡта 7 (499) 678-12-03 телефонына шылтыратырға кәрәк. Стихияға бәйле бәләгә тарыған үҙаллы сәйәхәт итеүселәр өсөн 7 (495) 695-45-45 телефоны буйынса ҡыҙыу элемтә эшләй.

✓2023 йылда Башҡортостан властары федераль үҙәктән яҡынса 50 миллион һумға 18 зарядлау станцияһы төҙөләсәк субсидияларға йыйына. Был хаҡта республика премьер-министры Андрей Назаров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. Башҡортостанда 2023 йылдың башында 400-ҙән ашыу электромобиль теркәлгән. Улар өсөн 21 зарядлау станцияһы эшләй. Станцияларҙың 16-һы - Өфөлә, берәүһе - Булгаковта, икәүһе - Нефтекамала, шулай уҡ Бишбүләк һәм Шишмә райондарында урынлашҡан.

✓Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов 5 февралдә үҙенең телеграм-каналында йәш яҡташыбыҙҙың сноуборд буйынса Рәсәй беренселегендә еңеүе хаҡында хәбәр итте. "Амалия Габдюшева Абҙаҡта сноуборд буйынса Рәсәй беренселегендә параллель слаломгигант, параллель слалом дисциплинаһында урын алды. Амалияны, уның тренерҙары Наталья Кизинаны һәм Дмитрий Кизинды еңеүҙәре менән ҡотлайым", - тип яҙҙы ведомство башлығы. Ярыштар 7 февралгә тиклем бара.

✓Башҡортостанда депутаттар үҙ корпусынан Йәштәр палатаһы ағзалары исемлеген раҫланы. Бойороҡҡа ярашлы, Дәүләт Йыйылышынан вәкил - Эдуард Сәйетбатталов. Башҡортостанда республика Дәүләт Йыйылышы ҡарамағындағы VII саҡырылыш Йәштәр йәмғәт палатаһының составы билдәләнде. Уға сәйәси партияларҙың, йәмғәт ойошмаларының һәм юғары уҡыу йорттарының профилле ойгандарының 15 вәкиле инде.

✓Раубичиҙа (Беларусь) үткән Берҙәмлек кубогының биШенсе этабында Башҡортостан биатлонсыһы Эдуард Латипов 10 саҡрымлыҡ спринт ярышында тағы бер алтын миҙал алды. Бынан алдараҡ "Башинформ" Раубичиҙа биатлон буйынса Берҙәмлек кубогының дүртенсе этабында Эдуард Латиповтың әҙәрлеклэү ярышында (12,5 саҡрым) "алтын" алыуы тураһында хәбәр иткәйне.

ҠЫҪҠАСА

# ӘСӘЙҘӘР БҮЛӘКЛӘНӘ

✓ **Башҡортостанда биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 60-тан ашыу ҡатын-ҡыҙға "Әсәлек даны" миҙалы тапшырыла.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйған. Бүләкләнеүселәр араһында республиканың 30 районынан һәм биш ҡалаһынан: Октябрьскийҙан, Нефтекаманан, Сибайҙан, Стәрлетамаҡтан һәм Өфөнән күп балалы әсәләр бар. Хәбәр ителеүенсә, миҙал 1998 йылда булдырылған. Ошо ваҡыт эсендә уға һигеҙ меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ лайыҡ булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә 50 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү билдәләнгән. Быға тиклем уның күләме 17 241 һум ине.

✓ **Башҡортостан Башлығы үҙенең бойороғо менән Өфөлә донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусы төҙөлөшөн контролдә тотоу өсөн эшсе төркөм ойоштороҙо.** Уны Радий Хәбиров үҙе етәкләй, уның урынбаҫарҙары итеп Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров һәм республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин тәғәйенләнде. Эшсе төркөмгә кампус булдырыу мәсьәләләре буйынса төбәк штабы ағзалары, концессионер - "Кампус" компанияһы һәм проектлаусы вәкилдәре инде. "Башинформ" кампус составына студенттар, уҡытыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн 4,4 мең урынлыҡ торлаҡ модулдәре, IQ-парк, аудитория-лаборатория блоғы һәм геном үҙәге, сауҙа һәм дөйөм туҡланыу өсөн бинАлар, шулай уҡ спорт-рекреацион зоналар һәм күмәк мәҙәни саралар майҙансыҡтары индереләсәген хәбәр иткәйне.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы тоҡомло ҡошсолоҡто һәм малсылыҡты үҫтереүгә субсидиялар биреү өсөн ғаризалар ҡабул итә башланы.** Субсидияның ставкаһы - шартлы мал башына 3,5 мең һум. Аҡса малдарҙы аҫрау өсөн бүленә. "Республикала индустриаль һөт фермаларын күбәйтеү пландарын иҫәпкә алып, беҙгә юғары продуктлы малдарҙы арттырырға кәрәк. Башҡортостанда 81 тоҡомсолоҡ ойошмаһы эшләй. Дәүләт ярҙамы ошондай хужалыҡтарҙы артабан үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш", - тине Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Хәбәр ителгәнсә, 2022 йылда республикала фермерҙарға һәм шәхси эшҡыуарҙарға тоҡомло малсылыҡ менән шөғөлләнергә рөхсәт биргән закон ҡабул ителде.

✓ **Башҡортостандан популяр блогер Рөстәм Нәбиев Көньяҡ Американың иң бейек түбәһе Аконкагуаны (6 962 метр) яулаған. Был хаҡта ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.** "22 ғинуарҙа киске сәғәт 9-сы 36 минутта - мин, Рөстәм Нәбиев, ҡулдарым менән Көньяҡ Американың иң юғары нөктәһенә күтәрелдем. Туғыҙ көн, Иоанн Чечнев менән бергә. Өсөнсө лагерҙан тау түбәһенә менеү һәм кире төшөү 25 сәғәт дауам итте. 25 сәғәт буйына йоҡоһоҙ, ашһыҙ, бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә, маҡсатыма табан юлда. Дәртләндереп торғанығыҙ өсөн һәммәгеҙгә лә рәхмәт! Беҙ быны эшләнек! Быларҙың барыһы ла енеү менән тамамланыуына мин шатмын. Ҡалғанын һуңынан һөйләрмен. Хәҙер күнелемдә бушлыҡ. Үҙемдең хәлемде аңламайым, күҙ йәштәре, хис-тойғолар урғылып сығып килә. Һеҙ быны ни тиклем ауыр булғанын күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ. Һүҙ менән әйтеп аңлата алмаҫлыҡ ауыр", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты блогер.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕРЕНСЕ ТАПҠЫР...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 7 февралдә баш ҡала Грек-рим көрәше буйынса Рәсәй чемпионатын асыу тантанаһында ҡатнашты. Был сара Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә һәм республикала беренсе тапҡыр уҙғарыла. Унда илдең 40 төбәгенән 320 иң көслө спортсы ҡатнаша.**

Турнир Сеулда үткән Олимпия уйындарының 35 йыллығына бағышлана. Ул ваҡытта СССР-ҙың йыйылма командаһы көрәшселәре грек-рим һәм ирекле көрәштә һигеҙ - алтын, дүрт - көмөш һәм өс бронза миҙал яулап, беренсе урын ала.

- Чемпионат үткәреү - беҙҙең өсөн ҙур ғорурлыҡ. Был ысын спорт байрамы, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Тренерҙарыбыҙға оло рәхмәт белдерәм. Беҙҙә Советтар Союзының һәм Рәсәй Федерацияһының данын даими яҡлаған бөйөк спортсылар ҡунаҡта. Бөгөн егеттәребеҙ Тыуған илде яҡлап, батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Ошондай еңел булмаған шарттарҙа ла беҙ спорт сараларын уҙғарыуҙы һәм атлеттарҙы әҙерләүҙе туҡтатмайбыҙ.

Башҡортостан Башлығы Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, республиканың Спорт көрәше федерацияһының почетлы вице-президенты Венер Ғәйнуллинға - "Башҡортостан Республикаһы алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Борис Понятовҡа Салауат Юлаев ордены тапшырҙы. 2021 йылда донъя беренселеге еңеүселәре Адлан Амриев менән Сәйед-Хөсәйен Бакаев - фатир, уларҙың тренерҙары Валерий Коробов, Рәмил Сираев, Геннадий Сырцов автомобиль алыуға сертификаттарға лайыҡ булды. Һуңынан абруйлы ҡунаҡтар спортсыларҙың ярымфинал алышын ҡараны. Традицион призДарҙан тыш, ярыш еңеүселәре һәм призерҙары "Рәсәйҙең спорт мастеры" нормативын тапшырған булып та һаналасаҡ.

# ТЫУҒАН КӨНӨН - УНҺЫҘ



**7 февралдә республиканың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 89 йәш тулыр ине. Уның тыуған көнөндә Өфөнөң мосолмандар зыяратында республика Башлығы Радий Хәбиров, башҡа рәсми кешеләр, республиканың беренсе етәксеһенең хәләл ефете Луиза Ғәлим ҡыҙы Рәхимова һәм туғандары Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың ҡәберенә сәскәләр һалды.**

Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе-мөфтөйө Айнур Биргәлин мәрхүмдең рухына бағышлап доға ҡылды. Радий Хәбиров Башҡортостандың Беренсе Президентының тормош иптәше Луиза Ғәлим ҡыҙы менән аралашҡанда Мортаза Рәхимовтың хәтерен мәңгеләштереү буйынса указ проекты тураһында әйтте.

"Документта күп саралар ҡаралған, беҙ һеҙгә указдың проектын тапшырырбыҙ, шулай уҡ һеҙҙең менән кәңәшләшербеҙ һәм Өфөлә ҡуйырға телләгән һәйкәлдең эскизын күрһәтербеҙ. Уның ҡәбер ташының ниндәй булырға тейешлеген бергәләп хәл итербеҙ. Өфөнөң яңы урамдарының береһенә Мортаза Ғөбәйҙулла улының исемен бирәбеҙ. Уның хаҡында иҫтәлек беҙҙең йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

"Мортаза Ғөбәйҙулла улының 89 йәшенә бер айҙан да аҙыраҡ ваҡыт ҡалғайны. Яңы йылда уның янына килгәндә тыуған көнөн байрам итербеҙ, 90 йәшен дә билдәләрбеҙ, тип өмөтләнгәйнек, әммә яҙмыш үҙенекен итә икән. Указдың проекты әҙер, бөгөн уны Мортаза Ғөбәйҙулла улының хәләл ефетенә тапшырам, сөнки туғандары һәм яҡындары ҡарарға тейеш.

Беҙ Башҡортостан дәүләт хеҙмәте академияһын Мортаза Рәхимов исемендәге Башҡортостан дәүләт хеҙмәте академияһы итеп үҙгәртергә тәҡдим итәбеҙ, был символик мәғәнәгә эйә, сөнки ул шул ваҡыттағы йәш республиканың идара итеү системаһын булдырған, Дәүләт Йыйылышының ижтимағи-сәйәси үҙәгендә мөһим ҡарар - суверенитет тураһында декларация ҡабул иткән һәм президент антын биргән. Һәйкәлде тап ошо урында ҡуйырға уйлайбыҙ. Был ҙур указ, киләһе дүшәмбелә беҙ уны баҫтырып сығарырбыҙ.

Беҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улын онотмаҫбыҙ, Башҡортостан халҡына хеҙмәт иткәне өсөн беҙ уға мәңге рәхмәтлебеҙ", - тине республика Башлығы Радий Хәбиров.

Луиза Ғәлим ҡыҙы Башҡортостан Башлығына ошо ҡайғылы көндәрҙә үҙенә күрһәткән иғтибары һәм ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ЕР МӘСЬӘЛӘҺЕ - ИҢ МӨҺИМЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты. Унда 2022 йылға йомғаҡтар яһалды һәм 2023 йылға бурыстар билдәләнде.**

- Республика былтырғы ҡатмарлы йылды лайыҡлы үткәрҙе. 2022 йылда республиканың дөйөм бюджеты 14,2 процентҡа артты. Министрлыҡ бюджетты 13,5 млрд һумға тулыландырырға булышлыҡ итте, был 2021 йыл менән сағыштырғанда, яҡынса 8,3 млрд һумға күберәк, был бик яҡшы һөҙөмтә, - тине Радий Фәрит улы сығышында.

Башҡортостан Башлығы үҙенең Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға мөрәжәғәтнамәһендә ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә инвентаризация үткәреү һәм ҡулланылмаған һөрөнтө ерҙәрҙе әйләнешкә индереү бурысын ҡуйыуын телгә алып, быны өсөн төрлө саралар күреү мөһимлеген дә билдәләне. Республикала әлеге ваҡытта ҡулланылмаған ерҙең күләме - 165 мең гектар тирәһе. Мөлкәт мөнәсәбәттәре үҫешенең мөһим этабы булып урындағы үҙидара органдарының дәүләт ҡарамағында булмаған ерҙәр менән идара итеү вәкәләттәрен республикаға тапшырыу тураһындағы закон тора. "Тормош күрһәтеүенсә, был ҡарар дөрөҫ булған. Элек был ерҙәр файҙалы ҡулланылмай ине, былтыр ошо ерҙәрҙе арендаға биреү һәм һатыуҙан 4,2 млрд һум килем алдыҡ. Был эште дауам итергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

Шулай уҡ 2022 йылда республикала бөтөн ер участкаларына ла кадастр баһаһы биреү тамамланған. Республика Башлығы дәүләт активтары менән дөрөҫ ҡулланыуҙы, цифрлаштырылған хеҙмәттәрҙең үҫешен, шулай уҡ ер участкаларын торлаҡ төҙөлөшө һәм эре инвестпроекттарға тиҙ хосусилаштырыуҙы билдәләне.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда 2023 йылдың декабрендә биатлон буйынса Берҙәмлек кубогы ярыштарының уҙыуы ихтимал. "Өфөлә Ҡышҡы спорт төрҙәре көнөн һәм биатлон буйынса Рәсәй беренселеген уңышлы үткәреү Башҡортостанға 2023 йылдың декабрендә Рәсәй һәм Беларусь биатлонсылары араһында биатлон буйынса Берҙәмлек кубогын уҙғарыуға дәғүә итергә мөмкинлек бирә. Бөгөн Рәсәйҙә ошондай ярыштар Европа кимәленә тиңләштерелә", - тип мөрәжәғәт итте республиканың спорт министры Руслан Хәбибов Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа.

✓Өфөлә Республика балалар клиник дауаханаһы пациенттары өсөн шахмат класы асылды. Балаларға кәрәкле шахмат инвентарын һәм уҡыу әҙәбиәтен социаль проекты тормошҡа ашырыусы "Толпар" спорт клубы директоры, Евразия халыҡтары ассамблеяһының Башҡортостандағы вәкиллеге ағзаһы Әмир Даукаев бүләк иткән. Проект Башҡортостан Спорт министрлығының 100 йыллығына арналған, тип билдәләне ул.

✓Utair авиакомпанияһының Өфөнән Силәбегә тура даими рейстары асылды. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 1 февралдән төүге пассажирҙар Өфө аэропортынан Уралдың сәнәғәт үҙәгенә - Силәбе ҡалаһына осто. Рейстар аҙнаһына ике тапҡыр: шаршамбы һәм йома көндәрендә башҡарыла. 70 пассажирға иҫәпләнгән ATR-72 самолетында юлға 1 сәғәт 20 минут ваҡыт китә.

✓Башҡортостан самбосылары Ҡазанда уҙған самбо буйынса Волга буйы федераль округы беренселегендә 9 миҙал яуланы. Турнирҙа 16 йәшкә тиклемгә 500 егет һәм ҡыҙ көс һынашты. Артём Гусев, Риана Солтанова - алтын, Арсен Ильясов, Камилә Ильясова һәм Алеся Шәрипова - көмөш, Кирилл Кириллов, Арина Щукина, Анастасия Белаш һәм Аделина Хәйруллина бронза миҙалдарға лайыҡ булды. Хәҙер улар Рәсәй беренселегендә республика намыҫын яҡларға тейеш.

✓Республикала "Һөт кухняһы"ның таратыу пункттарында, балалар өсөн һөт ризыҡтарынан тыш, үҙҙәре етештергән печенье һатып алырға мөмкин. Уны Белоретта сығара башланылар. "Дәүләт теркәүе тураһында таныҡлыҡ был төмләкәсте балаларға 6 айҙан уҡ бирә башларға мөмкин икәнлеген раҫлай. Печенье ике төрлө. Береһе - кальций, икенсеһе тимер менән байытылған", - тип хәбәр иттеләр БР Башлығы Хакимиәтенән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Спорт яратыусыларға хәбәр: 41-се тапҡыр ойошторолған "Рәсәй саңғы юлы" быйыл 11 февралдә үтәсәк. Унда теләгән кеше ҡатнаша ала, әммә бер ниндәй тыйыу булмауы тураһында медицина белешмәһе булыуы мотлаҡ.*



*ҠАЛА СОВЕТЫНДА*

# БАРЫҺЫ ЛА - ХАЛЫҠ ӨСӨН



**9 февралдә бишенсе саҡырылыш ҡала советының 23-сө саҡырылыш ултырышы үтте. Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиевтың "Өфө ҡала округы хакимиәтенең 2022 йылғы эшмәкәрлеге, социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтары һәм 2023 йылға төп бурыстар" тип аталған отчет сығышы көн тәртибенең төп мәсьәләһе булып торҙо.**

Өфө - Башҡортостан Республикаһының үҫеш двигателе. 2020 (2021) йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу уның илдең эре ҡалаларының береһе булыуын тағы ла раҫланы, сөнки халыҡ һаны 1 миллион 175 мең кешегә еткән. Ындай үҫеш баш ҡалалағы тормоштоң ылыҡтырғыс булыуын, барыһы ла халыҡтың уңайлы тормошо өсөн эшләнеүен раҫлай.

Мәҫәлән, 2022 йылдың 9 айы йомғаҡтары буйынса халҡы миллиондан ашыу булған ҡалалар араһында Өфө ситкә сығарылған продукция күләме буйынса - 1-се, халыҡтың миграция үҫеше буйынса - 2-се (Краснодарҙан ҡала), торлаҡ төҙөлөшө һәм йәмәғәт тукланыуы әйләнеше буйынса 4-се урын биләй. "Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургты иҫәпкә алмағанда, миллионлы ҡалалар араһында дөйөм статистик күрһәткестәр буйынса Өфө икенсе урынды биләй. Был һөҙөмтәне яҡшыртырға мөмкин, ҡаланы төрлө яҡлап үҫтереү буйынса комплексы программалар әҙерләнгән", - тине Ратмир Рәфил улы.

Шулай уҡ Өфөнөң Рәсәйҙең "Йәшел ҡалаһы" тигән исемен дә нығытырға кәрәк. Был йәһәттән былтыр барлығы 19 мең төп ағас ултыртылған, 41 аллеяға нигеҙ һалынған.

Заман менән бер ҡатарҙан атлап, ҡала менән идара итеүгә цифрлы сервистар индереү ҙә мөһим бурыс булып тора. Был граждандарға ҡала хеҙмәттәренә тиҙ арала мөрәжәғәт итеү, хеҙмәттәргә уларҙы тиҙ арала хәл итеү мөмкинлеген бирә. Бының шулай икәнен Рәсәйҙең аҡыллы ҡалалары рейтингында Өфөнөң 4-се урын биләүе лә дәлилләй.

Ҡала алдында торған тәү сираттағы бурыс - ул социаль объекттар төҙөү. Бөгөн баш ҡалала барлығы 6300 урынлыҡ 4 мәктәп төҙөлә һәм реконструкцияланa. Тағы ла 3675 урынлыҡ 3 мәктәп төҙөү тураһында килешеү төҙөлгән.

2022 йылда Өфөлә 1 миллион 170 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән, был ҡала тарихында, шул иҫәптән совет осоронда абсолют рекорд булды. 2021 йылдағы рекордтан 2 мең квадрат метрға күберәк. Пандемияға тиклемге 2019 йыл менән сағыштырғанда, төҙөлөш тармағы күрһәткестәре 60 процентҡа артҡан. Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, киләһе ун йыллыҡта Өфө 3 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү кимәлендә сығырға тейеш. Республикала ҡайһы берҙә йылдар буйына төҙөлөшкә рөхсәт алырға мәжбүр булған төҙөүселәр өсөн административ кәртәләрҙе ябайлаштырыу ҙа төҙөлөш тармағын әүҙемләштереүгә булышлыҡ итәсәк. Алдағы 20 йылда Өфөлә төп иғтибар Затон, Дим биҫтәләре, Миловка, Романовка һәм "Башҡортостан сәскәләре" ҡасабалары ингән "Көнбайыш дуғаһы"н үҫтереүгә йүнәлтелә. Был биләмәләрҙә 6,8 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү планлаштырыла, ә уларҙың халҡы 226 мең кешегә артыр тип көтөлә. Затонда - 80 мең кеше өсөн 2,6 миллион квадрат метр, Дим биҫтәһендә - 63 мең кеше өсөн 1,9 миллион квадрат метр, Миловкала һәм Романовкала 70 мең кеше өсөн 2,1 миллион квадрат метр торлаҡты сафҡа индереү, "Башҡортостан сәскәләре" ҡасабаһында 13 мең кеше өсөн 400 мең квадрат метр торлаҡ төҙөү күҙаллана.

Өфө ҡалғаһына нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына әҙерлек буйынса ла ҙур эшмәкәрлек алып барыла. "Ул федераль әһәмиәткә эйә ваҡиға буласаҡ. Ваҡыт бик аҙ ҡала, беҙ финиш һыҙығына сығабыҙ. Юбилейға әҙерлектә иң мөһиме - байрамдан һуң халыҡҡа ҡалған мираҫ. Ҡалала эшләнгән эштәрҙең барыһы ла халыҡ өсөн. Һәм барлыҡ был үҙгәрештәрҙең һөҙөмтәһе - халыҡтың йәшәү сифатын күтәреү буласаҡ", - тине ҡала хакимиәте башлығы.

Өфө үҙенең алдынғы спорт үҙәге булыуын да раҫлай. Былтыр муниципаль мәктәптәрҙең 346 спортсыһы спорт мастерлығына кандидат булған, 19 кешегә спорт мастеры исеме бирелгән, 4 кеше халыҡ-ара класлы спорт мастеры исемен алған. ГТО нормативын тапшырыу буйынса 2021 йылғы күрһәткес ике тапҡырға артҡан.

**Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тағы бер объект - Ирекле көрәш һәм грэпплинг үҙәге менән танышты. Башҡортостандың Спорт көрәше вице-президенты, ирекле көрәш буйынса республика йыйылма командаһы тренеры Алексей Бятиков ике ай ярым эсендә буш торған бинала шәхси инвесторҙар иҫәбенә инженер коммуникациялары һәм ҡорамалдар яңыртылыуы тураһында һөйләне. Республиканың Спорт министрлығы социаль заказ буйынса 12 миллион һумлыҡ ҡорамал һәм көрәш келәмдәре һатып алған. Билдәләнеүенсә, 14 келәмдә бер үк ваҡытта 100 бала шөғөлләнә аласаҡ. Улар менән бушлай 8 тренер эшләйәсәк. Буласаҡ Олимпия чемпиондарын әҙерләү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған. Республика Башлығы сисенеп-кейенеү бүлмәләрен, тренажер һәм көрәш залдарын ҡараны, Өфөлә үткән Рәсәй чемпионатына килгән, йәштәр өсөн оҫталыҡ дәрестәре күрһәтергә әҙерләнгән ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар - ирекле һәм грек-рим көрәше буйынса Олимпия чемпиондары менән аралашты.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# САҢҒЫ ЮЛЫ КӨТӘ!



**Көндәр һиҙелеп яҙға тартһа ла, ҡар таҙартыу мәсьәләһе хакимиәттең оператив кәңәшмәһендә төп мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала, сөнки февраль үҙ көсөн күрһәтә башламаған, яҙғы аҡман-тоҡман алда әле. Ә урамдар таҙартылмаһа, һуңынан был эш икеләтә ауырға төшөүе ихтимал.**

Мәғлүм булыуынса, Өфө территорияһында тәүлек буйына урамдарҙа 500 берәмек техника һәм 550 юл эшсеһе эшләй. Үҙған аҙнала барлығы 26 мең тонна ҡар сығарылған, бигерәк тә юлдарҙы һәм йәмәғәт транспорты туҡталыштарын таҙартыуға ныҡ иғтибар бирелә. Йорт ихаталарын таҙартыуға 175 берәмек техника һәм 920 хеҙмәткәр йәлеп ителгән. Көн һайын йорттарҙың ҡыйыҡ ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыла. Был маҡсатта 70 бригада, 4 автогидроҡүтәргес эшләй.

Шулай уҡ кәңәшмәлә юлдарҙың торошо буйынса ла мәғлүмәт тыңланды. Былтыр баш ҡаланың 44 километр юлы нормативҡа яраҡлаштырылған, 7,7 километр яңы юл төҙөлгән, 5 километр юл яңыртылған. Быйыл иһә 15 юл участкаһын (14 километр) ремонтлау ҡарала.

Рәсәй федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса 4-се район-ара инспекцияһы начальнигы Гүзәл Вәхитова йыл башынан граждандар һәм предприятие-ойошмалар өсөн индерелгән Берҙәм һалым иҫәбе институты эшмәкәрлеге менән таныштырҙы. Был система һалым түләүҙәрен ябайлаштырып ҡына ҡалмай, ә бурыс барлыҡҡа килеүгә һәм артыҡ түләүгә юл ҡуймай. Һалым түләүсе бюджеты менән иҫәп-хисап торошон һәр саҡ белеп тораса҅к, йәғни бында һәр нәмә асыҡ, уңайлы һәм ябай буласаҡ. Һәр һалым түләүсегә Федераль ҡаҙнала Берҙәм һалым иҫәбе асыла һәм түләнгән аҡса шунда күсерелә. Әлеге ваҡытта был хеҙмәт менән предприятие-ойошмалар уңышлы файҙалана.

Өфөлә коронавирус инфекцияһын йоҡтороу осраҡтары арта. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина хәбәр итте. Әле Өфөлә 100 мең кешегә 10 743 ауырыу осрағы тура килә. Тәүлек эсендә 63 сирле теркәлгән. Үҙған аҙна менән сағыштырғанда ауырыуҙар 1,7 процентҡа күберәк, тип билдәләне Галина Пермина. Шулай уҡ ОРВИ менән сирләүҙең артыуы күҙәтелә. Киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм кизеү менән ауырыусыларҙың 43,5 проценты - балалар. Галина Пермина шәхси гигиена һәм торлаҡ гигиенаһы тураһында онотмаҫҡа саҡырҙы. Халыҡҡа битлек кейеп йөрөргә, социаль араүыҡты һаҡларға, сир билдәләре саҡ ҡына беленеү менән табиптарға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ә спорт яратыусыларға инде һөйөнөслө хәбәр: 41-се тапҡыр ойошторолған "Рәсәй саңғы юлы" быйыл 11 февралдә үтәсәк. Ул Башҡортостанда республиканың спорт министрлығы ойоштороуҙы - 100 һәм Өфө ҡалғаһына нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына арнала. Унда теләгән кеше ҡатнаша ала, әммә бер ниндәй тыйыу булмауы тураһында медицина белешмәһе булыуы мотлаҡ. Еңеүселәр һәм призерҙар Өфө ҡала хакимиәтенең Физик культура һәм спорт идаралығының юбилей логотибы төшөрөлгән кубоктары, миҙалдары, маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнә. Шулай уҡ "Рәсәй саңғы юлы" символикаһы төшөрөлгән иҫтәлекле баш кейеме дә аласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йөрәктең хәлһеҙлеге

❖ Йөрәктең хәлһеҙлеге (сердечная недостаточность) осрағында 2 кг татлы болгар боросон орлоҡтарынан таҙартып, ярты килограм һарымһаҡты әрсергә һәм ит турағыста ваҡларға. Һауыттарға һалып, капрон ҡапҡастар ябырға һәм һыуыҡлыҡта һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалағын икмәккә ҡушып ашарға. Был әҙерләмә ҡан баҫымын да көйләп, көн дауамында кеше үҙен яҡшы тойоуға булышлыҡ итә.

❖ 1 ҡалаҡ иҙелгән балан емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә һәм 1 сәғәт төнәтергә. Йөрәктең хәлһеҙлеген дауалағанда көнөнә ике тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға. Йылына 4 тапҡыр ошолай һауыҡты яҡшыртып алырға кәңәш ителә.

❖ Йөрәк ауырыуы (миокардит) әҙәмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәктең хәлһеҙлегенән 10-ар грамм меңъяпраҡ, мелисса үләндәре, үгеҙ күҙе (арника горная) сәскәһе, 15-әр грамм дөйә һенере үләне (астрагал шерстистоцветковый) һәм кесерткән япрағы, 20-шәр грамм ерҡәүек үләне (лабазник вязолистный) һәм ҙур юл япраҡтарын алып ҡушырға. Йыйылмаың 2 грамына 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр 50-70 мл эсергә. 1 - 3 ай дауаланырға.

❖ Ревматизмға бәйле барлыҡҡа килгән йөрәк ҡапҡасының физик кәмселеге осрағында йөрәктең хәлһеҙлеген 10 грамм меңъяпраҡ, 20-шәр грамм ҡара мәрүәр (бузина черная) һәм йүкә (липа сердцевидная) сәскәләре, кесерткән япрағы, баҫыу ҡырҡбыуыны сәскәһе, 30 грамм ерҡәүек үләне, 40 грамм ҡайын (береза бородавчатая) япрағы ҡушып эшләнгән төнәтмә менән дауаларға була. Йыйылмаың 1 балғалағына 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көн дауамында ййлап, 2-3 уртлап эсеп бөтөргә.

## Ашҡаҙан көҙәне

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған меңъяпраҡ үләне һәм йүкә сәскәһен (1:1) кискеһен термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп әҙерләргә. Иртәнсәк төнәтмәне һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда сирек стаканлап эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ә икенсе уҡытыусыбыҙ - йып-йылтыр хром итектәр кейгән, төп-төҙ баҫып йөрөгән Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Һағынбаев Яҡуп ағай беҙҙе йыш ҡына ҡырға походҡа алып сыға торғайны.*



*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Хәситә, әмәйҙек, дәүәт

Дәүәткә тағылған әйберҙәрҙең торошо төрлөсә. Мәҫәлән, аҡсаларҙың йылдары йә өлөшләтә генә күренә, йә бөтөнләй танырлыҡ түгел. Был йәһәттән, экспертиза һөҙөмтәләре мөһим сығанаҡ булып тора. Бер нисә йыл элек биҙәнеү әйберендәге 189 элементтың барыһы ла махсуслаштырылған лабораторияла комплексы тикшереү аша үткән. Асыкланыуынса, дөйөм ауырлыҡтың (916 гр) өстән ике өлөшөн көмөш тәшкил итә. Дөрөҫөрәге XVII, XVIII, XIX һәм XX быуат башына ҡараған төрлө номиналдағы көмөш аҡсалар. Күпселеге Рәсәй аҡсалары булһа ла, араларында сит илдә сығарылғандары ла бар. Мәҫәлән, 1902, 1903, 1905 йылдарға ҡараған 1 юань (Ҡытай). Шулай уҡ 1839 йылғы 20 пара (Төркиә). Көмөштән тыш ябай тимерҙән һуғылған көмбәҙҙәр ҙә бар. Дәүәт биҙәлешендә мәрйендәр һирәк осрай, йышыраҡ төрлө төҫтәге сәйлән (бисер) ҡулланылған. Шулай уҡ ҡашлы биҙәүестәрҙең айырым элементтарын да күрергә мөмкин. Йөрәк формаһында эшләнгән һәм ярым ай менән йондоҙ төшөрөлгән ике элемент та иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Өсөнсөһө генә тулыһынса тиерлек ярылып төшкән. Был биҙәүестә яңыртылыу эҙҙәре бөтөнләй юҡ тиһәк тә хата булмаҫ. Ул бөгөнгө көнгәсә үҙенең матурлығын һаҡлап килә.



*Фото авторы Андрей Старостин*

Сергей Иванович билдәләүенсә, хәситәгә тәңкәләрҙән тыш шулай уҡ төрлө бетеүҙәр, доғалыҡтар ҙа тегелгән. Уны үҙен айырым тағып йөрөгәндә ул формаһы һәм материалы йәһәтенән әмәйҙектән айырылмаған, тиерлек. Йыш ҡына хәситәне дәүәттең аҫҡы яғына ҡушып текһәндәр. Әйтергә кәрәк, хәситә көньяҡ диалекттың айырым һөйләштәрендә һәм төньяҡ-көнбайыш диалектта ике мәғәнәне белдерә: 1. доғалыҡ; 2. бетеү.

Шулай итеп, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һул иңбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп түшкә ҡырын һалып кейгән биҙәүестәре лә формаһы, биҙәү тәртибе йәһәтенән бик үҙенсәлекле. Үкенескә күрә, хәҙерге көнгәсә килеп еткән боронғо өлгөләре юҡ иҫәбендә.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"**
**китабынан.**

*ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ*

# АҠ ТИРӘК - КҮК ТИРӘК,

## йәки Беҙҙең уйындар онотолормо?



**Бөгөнгө көндә хаҡлы ялда булған оло кешеләрҙең күптәре үҙҙәренең бала сағында уйнаған уйындарын яҡшы хәтерләйҙер. Элекке уйындарҙың байтаҡ ҡыналары минең дә иҫемдә. Шул ваҡыттарҙа бергә уйнап йөрөгән балалыҡ дуҫтарым да кисәгеләй күҙ алдымда. Бер нисә уйынды беҙгә башланғыс синыф уҡытыусыһы Ильясова Фирҙәүес Абуталип ҡыҙы (Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында йәшәй) өйрәткәйне. Ә иң күбеһен, моғайын, бер-беребеҙҙән өйрәнгәнбеҙҙер. Бала саҡтағы күңелле мәлдәр онотолоҡ түгел шул.**

Ул саҡта беҙҙең бәләкәй ауылыбыҙҙа мәктәбебеҙ дүрт класлы ғына ине. Һәр бер синыфта иң кәмендә һигеҙ-туғыҙар, хатта унан да күберәк уҡыусы (бөгөн, ишетеүемсә, ул мәктәптә - дөйөм уҡыусылар һаны унға ла тулмай). Ике уҡытыусы беҙҙе бүлешеп алып уҡыта торғайны. Оҙон тәнәфескә сыҡҡан арала, мәктәп урамында балаларҙың сыр-сыу килгән шат тауыштары, уларҙың "Аҡ тирәк - күк тирәк"те һамаҡлағандары әле булһа ҡолағымда сыңлай... Уҡытыусы апай беҙҙе ике төркөмгә бүлеп, береһенә үҙе лә ҡушылып ала. Ҡапма-ҡаршы тороп, ҡулға-ҡул тотоношоп, сылбыр яһайбыҙ. Бер яҡта торғандар, ҡулдарын дәррәү алға-артҡа хәрәкәтләндереп, көйләп һамаҡлай:

*Ҡабырғаһы ҡамсылы,*
*Тама торған тамсылы,*
*Аҡ тирәк - күк тирәк,*
*Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?*

Ҡаршы яҡтан: "Фәлән кәрәк!" - тип, бер малайҙың йә ҡыҙҙың исемен ҡысҡыралар. Исеме сыҡҡан бала йән фарман йүгереп килеп, саҡырыусыларҙың сылбырын өҙөргә тейеш. Өҙә алһа, үҙенә "әсир" итеп был сылбырҙан берәүҙе алып китә, ә өҙә алмаһа, үҙе "әсир" булып, шунда ҡала. Шунан ҡаршы яҡ сылбыр йырлай... Енеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә әллә ни юҡ һымаҡ, шуғамылыр, балалар араһында аңлашылмаусылыҡ, бәхәс тә сыҡмай, ҡыйырһытылыу ҙа юҡ. Иң мөһиме - һәр баланың иғтибары берберенһендә. Саф һауала күңел асылып китә. Тәнәфес ваҡыты үтеп, дежур уҡыусы ҡыңғырауҙы зыңғырҙатҡас, сыр-сыу килеп, көлөшөп, көр күңел менән кластарға инеп ултырышабыҙ. Һәммәләребеҙҙең йөҙө алһыуланған, шат. Уҡытыусының һәр һүҙен күңел биреп тыңлайбыҙ. Балалар өсөн тағы ла ҡыҙығыраҡ булһын типмелер, дәрес буйынса ғына түгел, уңайһын тура килтереп, башҡараҡ темаларға ла төшөп китә мөғәллимәбеҙ. Белмәгән һәм күрмәгән нәмәне юҡ унын! Ҡалала уҡып, театрҙарға, төрлө кисәләргә, осрашыуҙарға йөрөгәнен, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Фәриҙә Ҡоҙашева һымаҡ мәшһүр кешеләрҙе, Мостай Кәрим, Сәғит Агиш, Яҡуп Ҡолмойҙарҙы үҙ күҙҙәре менән күргәнен һөйләй. Һәр кемебеҙҙең, үҫкәс, уҡытыусыбыҙ һымаҡ уҡып, "донъя күреп", күп нәмәне белге килә...

Әикенсе уҡытыусыбыҙ - йып-йылтыр хром итектәр кейгән, төп-төҙ баҫып йөрөгән Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Һағынбаев Яҡуп ағай беҙҙе йыш ҡына ҡырға походҡа алып сыға торғайны. Үҙебеҙ менән бер аҙ ҡапҡыларлыҡ икмәк, шаҡмаҡ шәкәр, шешәгә сәй һаһап алабыҙ. Ағайыбыҙ беҙгә тау-таштар араһында һәр төрлө бәйге ойоштора. Йүгереп йә һикереп ярышыу, унан "Шпион-милиция", "Аҡ-ҡыҙыл" уйындарын малайҙар айырыуса яратып уйнай инек. Ҡайны берәҙ уларҙы "атыш" тип кенә атай торғайныҡ." Аҡтар-ҡыҙылдарға бүленешкәндә, әлбиттә, һәр кем "ҡыҙылһармис" булғыһы килә. Шуға күрә ролдәрҙе алмаш-тилмәш алабыҙ. Шулай уҡ, кинофильмдарҙан, фронтовиктарҙан немец фашистарының бик насар кешеләр булыуы хаҡында белгән булараҡ, атыш уйынында бер кемебеҙҙең дә "нимес" булғыбыҙ килмәй. Сөнки ул еңелергә, ә совет һалдаты мотлаҡ еңергә тейеш! Һалдат булырға хыялланмаған бер малай ҙа булмай торғайны. Бер талай уйнағас, Яҡуп ағай беҙгә "Привал!" командаһы бирә. Тоҡсайҙарыбыҙға һалып алып килгән ашамлыҡтарыбыҙҙы тәмләп-тәмләп ашап алабыҙ. Ҡатҡан икмәк һыныгы булһа ла, ғәйәт тәмле тойола. Бер нисә сәғәттән, "Тауҙар һәм үҙәндәр буйлап" ("По долинам и по взгорьям"), "Шайморатов генерал" йә башҡа ниндәйҙер бер йырҙы йырлай-йырлай, ҡайтып китәбеҙ...

Өйгә ҡайтҡас та, дәрестәрҙе әҙерләй һалып, йәнә дуҫтарың янына ашығаһың. Бер нисә малай йыйылышып алғас, "Тағы нимә уйнайбыҙ?" тигән һорау тыуа. Бәхеткә, береһенән-береһе ҡыҙыҡ, мауыҡтырғыс уйындарыбыҙ күп. "Өйрәк-һунарсы", "Бесәй-сысҡан", "Бура һуғыу", "Кәнсир уйыны", "Ҡулһукма", "Йәшенмәк" (гөргөлдәк), "Һәпәләк", "Алтын тау", "Ҡырҡташ" һымаҡ бихисап уйындар беләбеҙ, һайлап ҡына өлгөр!.. Шулар араһында "Байтус" уйынын айырыуса яратып уйнағаныбыҙ иҫемдә ("байтус" - уйындағы "көтөүсе"). Уны тик малайҙар уйыны тип кенә һанайбыҙ. Ҡыҙҙарҙың, әлбиттә, үҙ шөғөлдәре. Беҙ, малайҙар, ҡыҙҙарҙың эшенә ҡыҫылмайбыҙ, ғәҙәттә, уларҙан айырым уйнай торғайныҡ (Белеүсемсә, ҡыҙҙар, башлыса, йорт ихатаһында һәр төрлө сынаяҡ ярсыҡтарын һауыт-һаба итеп, балсыҡтан "бәлеш", башҡа "тәм-том" бешереп, "аш һыу" тирәһендәге шөғөл менән булыша, йә иһә, түңәрәкләп тороп, "Аҡ ҡалас" уйыны уйнай ине). Ә беҙ уҡ-ян менән "ҡоралланған" бер төркөм малай, ауылдан ситкәрәк берәй иркенерәк яланға барып, шунда уйнауҙы хуп күрҙек. Һәммәбеҙҙә талдан яһалған йәйә (беҙ уны "ян" тип атап өйрәттек), унлаған ҡалай башаҡлы уҡ. Уйнағанда буталмаҫ өсөн һәр кемебеҙ уҡтарыбыҙҙы үҙенсә буяп, билдәләп ала. Атҡан уғыбыҙ берәй таҡтаға тейһә, кире ҡаҡлыҡмаҫлыҡ, йәғни, сәнселеп торорлоҡ итеп, башаҡтарҙы иғәү менән үткерләп ала торғайныҡ. Ялан уртаһында берәй йомшағыраҡ сәп табып алабыҙ (ғәҙәттә, кипкән һыйыр тиҙәген һайлайбыҙ). Илле метрҙай араға алыҫая биреп, ана шул мишенгә уҡтарыбыҙҙы сойорготабыҙ. Бәғзе бер оҫта ҡуллыраҡтарҙың (ғәҙәттә, ҙурыраҡ малайҙарҙың) уғы тура сәпкә барып тейә, ә ҡалғандарҙыҡы ситкәрәк сәнселә. Кемдең уғы сәптән иң алыҫ торһа, шул байтус (көтөүсе) була. Хәҙер инде был көтөүсе үҙенең уғын алып, хәленән килгәнсе алыҫҡа атып ебәрә. Ҡалғандарыбыҙ уның артынса тағы уктарыбыҙҙы осорабыҙ (көтөүсенең уғына мөмкин тиклем яҡыныраҡ төшһөн өсөн). Ә инде киләһе этап көтөүсе өсөн иң күңелһеҙелер, сөнки, һәр кемебеҙ үҙебеҙҙең уғыбыҙ төшкән урындан тороп, көтөүсенең ерҙә ҡаҙалып торған уғына тоҫҡап, сиратлап сәпәй башлайбыҙ. Бик күптәребеҙҙеке, әлбиттә, яҙа китә, әммә... Ҡайһы бер мәргәнерәк малайҙар үҙенең үткер башағы менән әлеге көтөүсенең уғын ҡап урталай ярып ҡуя! Сәпкә берәр мәртәбә генә атыу рөхсәт ителә, малайҙар был ҡағиҙәне яҡшы белә. Көтөүсе күпселек осраҡта, һыр бирмәй, әлбиттә, уның запас уктары күп...

**(Дауамы 11-се биттә).**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Әлеге ваҡытта мәйеттәрҙең йә 20-30 см тәрәнлегендәге һай ҡәберҙәрҙә, йә иһә ер өҫтөндә, ташлы нигеҙҙә ерләнгән булыуы билдәле булды. Үлгәндәрҙең бейек булмаған ағас буралар, улаҡтар (колода) эсенә һалыныуы мөмкин булған; һай ҡәберҙәрҙең стеналары буйына вертикаль рәүештә ҡуйылған таш плиталарҙан хасил булған таш ҡаптарға ерләү осраҡтары билдәле. Бәйән ителгән таш ҡурғандар Көньяҡ Уралда Геродот атап киткән аргиппейҙар, аримасптар һәм исседондар, шулай уҡ дайҙар йәшәгән осорҙа ҡоролған. Беҙ алдараҡ дайҙарҙың төбәктәге күсмә халыҡтың төп төркөмөн тәшкил итеүе һәм уларҙың далаларҙа ҙур ер ҡурғандар ҡалдырыуы хаҡындағы фекерҙе нигеҙләп киткәйнек. Таш ҡурғандарҙың исседондарҙыҡы, йә аргиппейҙарҙыҡы, йә иһә аримасптарҙыҡы булыуы мөмкинлеге хаҡында фараз итергә генә ҡала. Күрәһең, әлеге этнонимдарҙың ошо ҡәбилә төркөмдәре вәкилдәренең үҙ атамалары варианттарына яҡын булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға булалыр. Көньяҡ Уралдағы бер йылғаның Исәт атамалы булыуы ошо хаҡта уйланырға мәжбүр итә: тикшереүсе К.В. Сальников фекеренсә, ошо атама иседон этнонимынан килеп сыҡҡан.

Таш ҡурғандарҙы өйрәнеү әлегә башланғыс стадияла ғына, әммә йыйналған материалдар уларҙың Көньяҡ Уралда көтөлмәгәнсә, был яҡтарға ниндәйҙер ҡәүемдәрҙең ҙур яңы бер төркөмөнөң массовый рәүештә күсеп килеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүен асыҡ күрһәтә. Таш ҡурғандарҙы төҙөүселәрҙең сығышын асыҡлау йәһәтенән 1994 йылда сыҡҡан китабыбыҙҙа бәйән ителгән бер фекер үтә ҡыҙыҡлы. Уны күренекле башҡорт төркиәтсеһе Ж.Ғ. Кейекбаев тәҡдим итте: таш ҡурғандарҙың ни рәүешле ҡоролғаны хаҡында мәғлүмәт менән танышҡас, уларҙы "баҫырыҡ", тип атаны (был һүҙ боронғо төрки сығышлы), йәғни таш менән баҫырылған ҡәберҙәр. Үҙенең һығымтаһында ул Көньяҡ Урал таш ҡурғандарының б.э. тиклем VI-III быуаттарҙағы Алтайҙың бөтөн донъяға билдәле булған Пазырык мәҙәниәте ҡурғандары тибына индереп булыуын билдәләне. Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев ошо фекерҙе 1972 йылда уҡ белдерҙе, һәм уны өрәңы археологик тикшереүҙәр материалдары раҫлай. Көньяҡ Уралдағы таш ҡурғандарҙың килеп сығышы эҙҙәрен тикшереүсе йәш археологтар (Өфө ҡалаһынан Н.С. Савельев, Барнаулдан Ю.Ф. Кирюшин, А.А. Тишкин һәм башҡалар), Алтайҙың пазырык тибындағы ҡурғандарын ҡалдырған күсмә ҡәбиләләр ҡомартҡылары менән сағыштырып, уларҙың генетик бәйләнешен асыҡланы.

Ышандырырлыҡ факттар нигеҙендә яһалған ошондай һығымталарҙы инҡар итеп булмай. Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев менән бәйле миҫал лингвистик һәм этнографик материалдарҙың тәү ҡарашта мәғәнәүи ерлек бирерҙәй мәғлүмәте булмаған археологик факттарҙың асылын асыҡлай алыу йәһәтенән файҙалы булыуын күрһәтә.

Ҡурғандарҙың бай материалдары б.э. тиклем VII-II быуаттарҙа Көньяҡ Урал күскенселәренең дини инаныстарының үҙенсәлектәре хаҡында фекер йөрөтөү өсөн ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Айырым алғанда, уларҙы мал аҫраусы ҡәбиләләрҙә зороастр дине варианттарының береһе - маздеизмға ҡараған сағыштырмаса берҙәм дини инаныстар системаһының ахырынаса формалашыуына дәлил итеп ҡарарға була. Б.э. тиклем VII-V быуаттарҙа Урта Азия һәм Иран территорияһында башында Ахура Мазда илаһы торған зороастризм дине формалаша, һәм ул ошо төбәктәге дәүләттәрҙең рәсми диненә әүерелә. Был ошо дини тәғлимәт талаптарының дәүләттең барса кешеләре өсөн мотлаҡ булыуын, ә үтә мөһим тип иҫәпләнгән йолаларҙың уларҙың хакимы етәкселегендә башҡарылыуын аңлата.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ ҺУНАР САҢҒЫҺЫ

**Фотоһүрәттә күрһәтелгән башҡорт һунар саңғыһы Башҡортостан Милли музейы филиалы - Салауат Юлаев музейында ОФ-1039 һаны аҫтында һаҡлана. Мышы тиреһе менән көпләнгән, ҡамуслы (камусные лыжи) һунар саңғыһын музейға 2009 йылда Садиҡов Артем Зәғәфуран улы тапшырған. Унын оҙонлоғо 2 метр 3 сантимер, киңлеге 13 сантиметр.**





Башҡорттарҙа саңғы элекке ваҡыттарҙан билдәле: XVI быуатта башҡорт ырыуҙары һәм ҡәбиләләре вәкилдәренең урыҫ батшаһына саңғыла барыуҙары, Төмәнгә тиклем етеүҙәре тураһында һөйләүсе дәлилдәр бар.

Башҡорт саңғылары ике төрлө булған - ябай ағас саңғылар һәм махсус һунар саңғыһы (ҡалтағай). Саңғылар табанына тире ҡағылған булған. Ҡалтағай, ғәҙәттә, ат, ҡайһы берҙә мышы аяғынан алынған, оҙонлоғо 2 метр тирәһендәй тире менән һуғылған. Унын уртаһына, уны ҡайыш менән аяҡҡа беркеткән урынға, туҙ йәбештергәндәр. Был аяҡ кейеме аҫтына ҡар тулыуҙан һаҡлаған. XVI-XVIII быуаттарҙа, башҡорттарҙың риүәйәттәренә ярашлы, уларҙа ҡондоҙ тиреһе менән һуғылған саңғылар булған. Был рәүешле эшләнгән саңғыла һунарсы тауға менгәндә артҡа таймаған, ә тауҙан төшкәндә, киреһенсә, шәп шыуған. Саңғы эшләү өсөн муйыл ағасы ҡулланылған, ул еңел, һығылмалы һәм ныҡ булған. Шулай уҡ ҡарағайҙан да саңғылар эшләгәндәр.

Ҡалтағайҙың башында, ябай саңғыларҙан айырмалы рәүештә, тишектәр булған. Һунарсы улар аша бау сығарып, тау юлы буйлап барған саҡта, саңғыларын һөйрәгән. Шулай уҡ бер-береһе менән бәйләнгән саңғылар табыш һалып һөйрәтергә ҡулай булған.

Саңғының исемдәре һәм уларҙың конструктив өлөшсәләре башҡорттарҙың Көньяҡ һәм Көнбайыш Себер халыҡтары, төрки һәм уғыр-самодий ҡәбиләләре менән бәйләнештә булыуы тураһында һөйләй. Ләкин башҡорт саңғыларының төҙөлөшөндә һәм уларҙың ҡулланылышында үҙенә генә хас үҙенсәлектәр ҙә булған. Мәҫәлән, тирене саңғыға әсегән ат ҡаны менән йәбештереү, беркетмәләге ҡайыштың иркен шыуып йөрөүе, саңғылар шәп шыуһын өсөн балауыҙ менән майлау һәм башҡалар.

Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында саңғыла йөрөү өсөн махсус юл аяҡ кейеме - башымлы ҡынйыраҡ һәм башымлы сабата - менән ҡулланғандар.

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Гв. кесе лейтенанты Иван Двадненко (Ставрополь крайының Кисловодск ҡалаһынан) командалыҡ иткән 45-миллиметрлыҡ орудиелар батареяһы дошман бронетехникаһына алға барырға мөмкинлек бирмәй, мәргән атып, уларҙың байтағын сафтан сығара. Уны Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим итеү өсөн төҙөлгән документта шундай мәғлүмәттәр бар: "Батарея командирына элегерәк тә дошман атакаларын кире ҡағырға тура килә. Мәҫәлән, Лопатино ауылы янында (Днепрҙың һул ярында) унын батареяһында ике генә орудие ҡала. Ул, яраланған көйөнә, орудие артына үҙе баҫа һәм, мәргән атып, 3 танкыны емертә. Днепр аша сығыу менән унын батареяһы плацдармды киңәйтеүҙә ҙур роль уйнай. Галки ауылы янында ул дошман танкыларының ҙур төркөмө менән алышҡа инеп, уны контрһөжүмдән ваз кисергә мәжбүр итә".

Ошо алыштарҙа шул уҡ батареяның орудие командиры, гв. сержанты Владимир Вишневецкий (Харьков өлкәһенең Купянский районы Новоникольское ауылынан) дошманды күп юғалтыуҙарға дусар итә. 27 сентябрҙә, Днепрҙың уң ярына орудиеһын алып сығыу менән, немец позицияларын утҡа тота, дошмандың 3 ут нөктәһен һәм 20-гә яҡын һалдатын юҡ итә. Вяле һәм Галки ауылдары өсөн барған бәрелештәрҙә немецтарҙың 2 танкыһын һәм үҙйөрөшлө орудиеһын, плацдармда барлығы 4 дошман танкыһын ҡыйрата. Ул да Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Алдараҡ 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадроны командиры, өлкән лейтенант Мөлки Байрамов (Төркмән ССР-ының Марый өлкәһе Мөлөк ауылынан) яугирҙарының ил азатлығы өсөн ҡаһармандарса алышыуы хаҡында яҙылғайны инде. Днепрҙың уң ярындағы яуҙар барышында, Нивки, Вяле, Галки ауылдарын дошмандан азат итеү өсөн барған алыштарҙа унын эскадроны немецтарҙың 400-ҙән ашыу һалдатын һәм офицерын юҡ итә. Советтар Союзы Геройы Мөлки Байрамов һуғыштан иҫән-һау ҡайта, тыуған яғында йәшәй.

СССР-ҙың иң юғары наградаһына - Советтар Союзы Геройы исеменә - тағы ла бер башҡорт егете, Тәтешле районының Үрге Ҡоҙаш ауылында тыуып үҫкән, Чернигов исемендәге 16-сы гв. атлы дивизияһының 60-сы атлы полкында пулемет взводы командиры ярҙамсыһы, гв. өлкән сержанты Әмир Хәйҙәров та лайыҡ була. Ул 28 сентябрҙә һал менән ике пулемет расчетын Вяле ауылы районында Днепрҙың уң ярына алып сыға, тәүге алышта уҡ дошмандың ут нөктәһен, 18 һалдатын сафтан сығара, башҡа подразделениелар йылға аша сыҡҡансы немец һалдаттарына баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәй.

60-сы гв. атлы полкынан һулдараҡ гв. подполковнигы Таһир Кусимовтың 58-се гв. атлы полкы хәрәкәт итә. Дошмандың 6 танкыһы һәм 2 үҙйөрөшлө орудиеһы полк рәттәрен көслө утҡа тота, уларҙың пехотаһы контратакаға күтәрелә. Шул мәлдә ошо полктың 45-миллиметрлы орудиеһы командиры, сержант Хоҙат Булатов (Әлшәй районы Себенле ауылынан) үҙенең артиллерист яуҙаштары менән үҙҙәренең пушкаһын яҡындағы урман ҡырыйында урынлаштырып, маскировкалап ҡуя. Немец танкылары һәм үҙйөрөшлө орудиелары тиҙ арала полк позицияларына яҡынлаша. Беҙҙең яугирҙарыбыҙ алдында ғына ҡырҡып алынған урмандан ҡалған ағас төптәре күп була. Дошмандың бронетехникаһы был төптәрҙе урап үтергә мәжбүр була, шул сәбәптән үҙҙәренең борттарын тап Булатов пушкаһына табан бора. Гв. сержанты шундуҡ пушкаһынан ут аса, икенсе атыуҙан беренсе барған танкының бортын унын снаряды тишеп үтә. Икенсе танк, туҡтап тороп, ут аса, беҙҙең гвардиясылар уны ла яндырып ебәргәс, ҡалғандары артҡа сигенә, дошмандың танк атакаһы тонсоға. Батыр яҡташыбыҙға ошо һәм башҡа алыштарҙа күрһәткән батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Миңә байтаҡ ваҡыт Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән республика буйлап йөрөү бәхете тейҙе. Ул бик эшлекле кеше булды, бер юлы бер нисә районда була һәм беҙ уның артынан өлгөрмәй, йүгереп йөрөп эшләргә мәжбүрбеҙ.*



**Халҡыбыҙҙың менталитеты уның фольклор, яҙыусылар ижадында бик асыҡ сағыла: оҙон-оҙаҡ итеп һөйләп тормай, тура сәпкә тейҙереп кенә баһа бирә лә ҡуя ул. Бөгөнгө геройыбыҙға ла иң аныҡ ҡылыҡһырламаны уның эштәре бирә. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, форсаттан файҙаланып, уның хеҙмәт һәм тормош юлы менән тағы бер танышып алайыҡ. "Заман башҡорто" рубрикаһының ҡунағы - "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы директоры Азамат Рафаэль улы СӘЛИХОВ.**

# ИР-ЕГЕТТЕҢ

## ә эшләгән эшен

**Республика тамашасыларына зәңгәр экрандар аша бик яҡшы таныш булһағыҙ ҙа, моғайын да, күптәрҙе һеҙҙең тамырҙарығыҙ ҡыҙыҡһындыралыр. Башҡорт халҡы, ғәҙәттә, танышҡанда, "Һин кем балаһы?" тиеп һорай...**

- Беҙ ҡустым менән үҙенсәлекле ижад кешеһе һәм финансист ғаиләһендә тыуғанбыҙ. Атайым - Башҡортостандың халыҡ артисы Рафаэль Сәлихов. Ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарынан һуң республиканың театр мәҙәниәтен булдырған, Салауат башҡорт дәүләт драма театрының нигеҙ таштарын һалған быуын вәкиле. Башҡорт театр-художество училищеһын тамамлағандан һуң Ауырғазы колхоз-совхоз театрына эшкә ебәрелә, һуңынан Салауат ҡалаһына йүнәлтелә. Әсәйем сығышы менән Өфө ҡыҙы, профессиональ финансист-иҡтисадсы. Яҙмыш уларҙы Баймаҡ районында осраштырып, сәстәрен-сәскә бәйләй. Үкенескә күрә, атайым беҙҙе иртәрәк ташлап китте.

Бала сағым театрҙа үтте, тиергә лә мөмкин, шуға, тәрбиәүи йәһәттән атайымдың роле ҙур булды. Бик күп артист балалары кеүек, мин дә шаршау артында, тамаша залында, декорация цехында үҫтем, ҡайһы берҙә бәләкәй генә эпизодик ролдәр ҙә башҡарҙым. Атайым мине үҙе менән гастролдәргә лә алып сыға торғайны. Ул ваҡытта театр труппалары бик әүҙем булды, бер сығып китһәләр, айҙар буйы гастролдән ҡайтып инмәйҙәр, хатта иң төпкөл ауылдарға барып етәләр ине, сөнки халыҡтың ихтыяжы ла, һорауы ла ҙур булған бит: тамаша залдары туп-тулы була, аяҡ баҫырлыҡ та урын ҡалмай торғайны. Һәр ауылда таныштар барлыҡҡа килә, улар икенсе тапҡыр килеүҙе көтөп тора. Моғайын, ошо мөхит минең буласаҡ һөнәремә нигеҙ һалғандыр.

Журналистика менән мәктәп эскәмйәһенән үк ҡыҙыҡһындым. Ул замандарҙа белем усаҡтарында стена гәзиттәре сығарыла торғайны. Башҡалар кеүек үк, мин дә унда мәҡәләләр яҙҙым, һуңынан "Пионер" гәзитенең йәш хәбәрсеһе булдым. Яйлап Салауат телевидениеһында ла көсөмдө һынап ҡараным. Мәктәпте тамамлағас, юридик факультетҡа барҙым, әммә күңелем барыбер журналистикаға тартылды. БДУ-ның журналистика факультетына уҡырға индем. Эйе, минең асылым журналистика булғандыр, тием, юҡҡа ғына бәндә бағышлай, Хоҙай алғышлай, тимәйҙәр бит.

Беренсе курста уҡ телевидениела штаттан тыш хәбәрсе булып эшләй башланым. Тәүге тапшырыуҙарым Луиза Фархшатова етәкләгән "Тамыр" студияһында әҙерләнде. Шулай уҡ Өфөнөң "Баш ҡала" тигән муниципаль телевидениеһы ла юл аша ғына ине, унда ла стажировка үттем. Артабан инде ДТРК-ла иртәнге "Сәләм" программаһында эшләй башланым. Студент булараҡ, сюжеттар ғына эшләнем, ә аҙаҡ алып барыусы булып киттем. Һәм ҡапыл тормошомда һынылышлы ваҡиға булды: мине "Хәбәрҙәр" тапшырыуына алдылар. Бына шунда инде ысын һөнәри журналистика мәктәбе башланды, сөнки унда сюжет ҡына төшөрмәйһең, ә көнүҙәк яңылыҡтарҙы яҡтыртаһың.



Шул ваҡытта мине, йәш кенә студентты, Президент пулы журналисы итеп ҡуйҙылар һәм миңә байтаҡ ваҡыт Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән республика буйлап йөрөү бәхете тейҙе. Ул бик эшлекле кеше булды, көнөнә меңәр саҡрым юл үтә, бер юлы бер нисә районда була һәм беҙ, йәштәр, уның артынан өлгөрмәй, йүгереп йөрөп эшләргә мәжбүрбеҙ. Шул заманда минең өлкәнәйеү осором, һөнәри мөхиттә үҙемде асыуым башланғандыр, тием.

**Ағымдағы йыл Педагог һәм остаз йылы тип иғлан ителде. Һәр кешенең был тормошта остазы була. Кемде остазым тип әйтә алаһығыҙ?**

- Остазым берәү генә булманы, улар бик күп. Һәм, тәү сиратта, улар хәбәрҙәрҙең "Башҡортостан" тип аталған форматтағы хәбәрселәре, монтажсылары. Ысын мәғәнәһендә фекерҙәштәр командаһы булды улар. Йәш инем, күп нәмәне белмәй инем - барыһына ла өйрәттеләр. Айтуған Минһажетдинов, Станислав Полянский, Юлай Рамаҙанов, Илдар Хөбөтдинов, Айҙар Мосағитов һәм башҡалар миңә юл күрһәтеүсе булды. "Сәләм"дә эшләгәндә Гөлдәриә Йосопова, Шәүрә Урманцева, Валерий Ермоленко, Нил Дистанов һ.б. ярҙамынан ҡалдырманы. Мин бер ниндәй ҙә ауырлыҡ кисермәнем, һәр кем: операторҙар ҙа, монтажсылар ҙа, хөрмәтле ветерандарыбыҙ - Флүрә Мурзина, Наилә Ғәләүетдинова, Сәлим Хисмәтуллин, Луиза Фархшатова - һәр саҡ ярҙам итергә әҙер генә торҙо. Луиза Фархшатова мине "Тамыр"ға эшкә алды ла, "Һин эшләй алаһың, әйҙә, эшлә", тип, иңемә шундай ҙур яуаплылыҡ йөкмәтте лә ҡуйҙы. Шуға остаз тип күптәрҙе атай алам һәм уларға рәхмәтлемен, сөнки улар пластилиндан тәүҙә уйлай белгән, һуңынан үҙе ниндәйҙер идеялар тәҡдим иткән кеше әүәләне. Мәскәү хәбәрҙәре өсөн сюжеттар эшләй башлағанда Рәсәй ҡалаларынан мәғлүмәт йыйыу бүлеге етәксеһе Андрей Никитиндың ярҙамы ҙур булды. Уның менән төндәр буйы ултырып текст яҙғаныбыҙҙы әле лә иҫләйем. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө Азаматты остаздарым барлыҡҡа килтерҙе.

**Мәскәү өсөн үҙ хәбәрсе булыу осорона ентекләберәк туҡталайыҡ әле, ни тиһәң дә, һәр кемде унда саҡырып тормайҙар. Ни өсөн тап һеҙҙе саҡырҙылар?**

- Бик ҡыҙыҡ килеп сыҡты ул. Тәүҙә стажер булып йөрөнөм, тигәйнем инде, ул саҡта Өфөлә ДТРК-ның хәбәрселәр пункты юҡ ине әле. Шул ваҡытта Баден күле өҫтөндә бөтөн илде генә түгел, донъяны тетрәндергән фажиғә булды. Таңғы 6-ла Мәскәүҙән шылтыраттылар һәм, фажиғә тураһында хәбәр итеп, әллә Беларусь, әллә Башҡортостан самолеты шартлаған, шулай ҙа аэропортҡа барып асыҡла әле, тинеләр. Телеүҙәккә килеп, шунда уҡ аэропортҡа киттек. Юлда икенсе шылтыратыу ҡабул иттем: самолет - Башҡортостандыҡы. Ошо мәлдән алып ике аҙна тирәһе аэропорттан сыҡманыҡ тиергә лә була. Һуңынан Хөкүмәт комиссияһы менән Германияға барып ҡайттыҡ. Үкенескә күрә, журналист һөнәренә шундай - күңелһеҙ ваҡиғаларҙы ла яҡтыртырға тура килә, һәм ошо эш һөҙөмтәһендә мине Мәскәүгә, дөрөҫөрәге, Минскиға, үҙ хәбәрсе булып барырға саҡырҙылар. Мин - студент, ниндәй Минск, ниндәй эш?

Әлбиттә, үҫергә теләгән журналист өсөн шунан да яҡшыһы булырға мөмкин дә түгел, мин баш тарта алмайым, әммә тәүҙә ул ваҡыттағы етәксебеҙ Рәмис Дәүләтбаев менән кәңәшләшергә булдым. Ул шунда уҡ Аҡ йортҡа шылтыратты һәм "Мортаза Ғөбәйҙулла улы һине ебәрмәй", тине. Моғайын, республика етәкселәре Башҡортостанда ла хәбәрселәр пункты булыуын теләгәндер, һәм тәүге Президенттың ДТРК етәкселеге менән берлектә ҡабул иткән ҡарары һөҙөмтәһендә Өфөлә рәсми хәбәрселәр пункты ойошторолдо. Ҡорамалдар менән ярҙам иттеләр, бина, машина бирҙеләр һәм мин тыуған республикамда Мәскәү вәкиле булып эш башланым.

Ауырлыҡтар, мәғәнәләр һәм идеология йәһәтенән генә булғандыр, моғайын, сөнки ул йылдарҙа ул ҡәҙәре һүҙ азатлығы юҡ ине, һәм был дөрөҫ тә, бының дөрөҫлөгөн йылдар үткәс кенә аңлайһың. Мәғлүмәт теманы аныҡ төшөнмәй тороп еткерелергә тейеш түгел халыҡҡа. Шуға күрә, ниндәйҙер сюжеттарҙы эфирға бирер алдынан үҙгәртергә лә тура килде, ни тиһәң дә, беҙҙе тотош ил ҡарай. Федераль эфирҙан республика тураһында насар яңылыҡ күрһәтеп булмай бит инде. Был, әлбиттә, ҡанун түгел, әммә төрлө саҡтар булды. Мәҫәлән, бер инвалидҡа фатир бирмәгәстәр, ошо кире сюжетты эфирға сығарҙыҡ. Һәр хәлдә, сюжет сыҡҡандан һуң ул кеше фатирлы булды, тимәк, беҙҙе бөтөнләй үк сикләмәгәндәр.

Мин үҙем хәл-торошто объектив яҡтыртырға тырыштым. Эйе, заманалар ауыр һәм ул ваҡытта мәғлүмәт майҙанына төрлө көстәр йәлеп ителгәйне. Ситтән, Үҙәктән килгән асыулы, "һөсләтелгән" хәбәрсе суверенитеттар парадынан һуң закон акттары үҙгәртелгән осорҙа ҡоро тәнҡиткә ҡоролған теләһә ниндәй сюжет күрһәтә ала ине. Ә беҙ яңылыҡтарҙы, хәбәрҙәрҙе урындан тапшырҙыҡ, республиканың матурлығына, уның бай төбәк булыуына баҫым яһаныҡ. Бер ваҡытта ла үҙемде көсләп эшләтмәнем, бер хәбәрҙе лә йәшереп ҡалдырманым йәки артыҡ маҡтаманым: нисек бар - шулай тапшырҙым. Моғайын, билдәле бер ауырлыҡ шунда ғына булғандыр, улай тиһәң, журналист ниндәй генә шарттарҙа ла объектив булып ҡалырға тейеш.

*Ә беҙ яңылыҡтарҙы, хәбәрҙәрҙе урындан тапшырҙыҡ, республиканың матурлығына, уның бай төбәк булыуына баҫым яһаныҡ. Бер ваҡытта ла үҙемде көсләп эшләтмәнем, бер хәбәрҙе лә йәшереп ҡалдырманым йәки артыҡ маҡтаманым: нисек бар - шулай тапшырҙым. Моғайын, билдәле бер ауырлыҡ шунда ғына булғандыр, улай тиһәң, журналист ниндәй генә шарттарҙа ла объектив булып ҡалырға тейеш.*

**2015 йылда "Башҡортостан" ДТРК директоры урынын биләнегеҙ. Вазифаға ултырғанда һәр кемдең яңы пландары, уй-ниәттәре күп була. Һеҙҙең дә ҡеүәтле идеяларығыҙ һәм тормошҡа ашырырға теләгән проекттарығыҙ күп булғандыр. Бөгөн уларҙың нисә проценты үтәлде?**

- Мин хөкөмдар түгел, шулай ҙа күбеһен тормошҡа ашырҙыҡ тип уйлайым. Тәүге көндәрҙән үк нимәне үҙгәртергә, нимәне ҡалдырырға икәнен аңланыҡ, яңы идеялар индерҙек, яңы һулыш өрҙөк. Ул ваҡытта, тәү сиратта, бик күп сюжет төшөрөүебеҙ, ә

# ЙӘШЕН ҺОРАМАЙҘАР,

## һанайҙар...

эфир ваҡытының бик аҙ булыуы тураһында фекер алыштыҡ. Шул йылда уҡ Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы генераль директоры урынбаҫары, төбәктәр менән эшләү департаменты етәксеһе Рифат Сабитовҡа эфир ваҡытын арттырыуҙа ярҙам итеүен һорап мөрәжәғәт иттек. Ул ваҡытта Рәсәй-1 каналында инек һәм башҡорт телендә "Хәбәрҙәр" тапшырыуы аҙнаһына өс тапҡыр ғына сыға ине. Мәскәү беҙҙең мөрәжәғәтте ишетте һәм көндәлек эфир ваҡыты бүлде. Бындай ваҡыт ул саҡта бер генә төбәктә лә юҡ ине әле. Беҙ беренсе булдыҡ. Башҡортса тапшырыуҙар артты, радио-телевидениела, "Рәсәй-24" каналында башҡа проекттар барлыҡҡа килде.

2016 йылда шулай уҡ етәкселек ярҙамы менән тәүлек әйләнәһенә эшләгән телевизион канал булдырыуға өлгәштек. Башта ул "Башҡортостан-24" интернет-каналы булды, хәҙер инде барлыҡ мөхиттә һөйләп-күрһәтеп торған, Өфө ҡалаһы өсөн 22-се төймәләге тәүлек әйләнәһенә эшләгән, федераль конкурс еңеүсеһе, ҙур уңышҡа һәм юғары рейтингка эйә канал. Әлбиттә, өлгәшелгәндәр менән генә туҡтап ҡалырға ярамай, сөнки телевидениела көн һайын яңы идеялар тыуып ҡына тора. Планлаштырылғандың 50 проценты үтәлгән, тип ҙур ышаныс менән әйтә алам, әммә алда тағы ла ҙурыраҡ эштәр көтә әле.

**Һеҙ индергән яңылыҡтарҙың береһе - үҙ Медиа-үҙәгегеҙҙе асыу. Ул ниндәйҙер кимәлдә "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына дәғүәселек тә тыуҙыра...**

- Беҙ бөтөнләй ул турала уйламаныҡ, шулай ҙа ниндәйҙер дәғүәселек тыуҙырғанбыҙҙыр, моғайын. Әгәр сәләмәт дәғүәселек булһа, бик яҡшы, ул булырға тейеш, сөнки үҫергә, камиллашырға ярҙам ғына итә.

Телеүҙәк бинаһы 1958 йылда төҙөлгән һәм заманында баш ҡаланың иң ҙур биналарының береһе, Өфө символы булған. Ул заман өсөн был бик ҙур ҡаҙаныш, сөнки элекке СССР-ҙа бындай биналар ни бары өсәү генә ине. Планировкаһы ла дөрөҫ эш шарттары тыуҙырыу йәһәтенән бик яҡшы уйланылған. 1958 йылда бында айырым канал барлыҡҡа килере берәүҙең дә башына ла инеп сыҡмағандыр, әммә оҫта инженер был бинала төшөрөү павильондарын, студиялар, биналар күләмен бик дөрөҫ урынлаштырған. Ә беренсе ҡатта концерт студияһы була торғайны. Совет осоронда барлыҡ музыка, профессиональ яҙмалар ошонда яҙҙырылған. Хатта яҡташыбыҙ Юрий Шевчук та үҙенең тәүге альбомын ошонда яҙҙырған, сөнки бында ғына шарттар һәм профессиональ магнитофондар булған.

Әммә заман башҡа - заң башҡа: ваҡыт үтеү менән ул файҙаланылмай башлай. Бында ла идеяны Мәскәүҙәге етәкселек бирҙе. Уларҙың медиаүҙәктәре бар, шулай уҡ Интерфакс, Риа-Новости, ИТАР-ТАСС кеүектәрҙе миҫал итеп килтерергә мөмкин. Беҙҙең медиаүҙәк барлыҡ телерадиоканалдарыбыҙ менән тоташҡан, йәғни ундағы һөйләшеү тура эфирҙа барлыҡ ресурстарыбыҙ аша тапшырыла. Халыҡ белә, спикерҙар килә һәм билдәле бер темаға көнүҙәк мәғлүмәтте тура эфирҙа тыңларға була.

**Һеҙ әсәйегеҙҙең финансист булыуы тураһында әйтеп үттегеҙ, ә етәксе вазифаһында финанс мәсьәләһен дә яҡшы белергә кәрәк. Директор булараҡ, һеҙ ниндәй етәксе, ниндәй хужа, ниндәй финансист?**

- Ой... Ауыр һорау... Мин яҡшы, йүнсел хужа булырға тырышам, әммә был һәр саҡ ауыр, сөнки телевидение - ул сығымлы тармаҡ. Йәшерен-батырыны юҡ, һәр лампочка ҙур аҡса талап итә. Производствоның һәр элементы сит илдә етештерелгән комплектлаусы частарға бәйле. Уларҙың барыһын да эш торошонда тотор өсөн күп аҡса кәрәк. Бынан тыш, хеҙмәткәрҙәр - профессионалдар үҙ статусына тап килһен өсөн яҡшы эш хаҡы алырға тейеш. Тырышабыҙ инде. Беҙ үҙебеҙ аҡса эшләйбеҙ, республика, Мәскәү ярҙам итә.

Һуңғы йылдарҙа иркен йәшәп булмай, быға пандемия һәм бөгөнгө хәл-ваҡиғалар ҙа сәбәпсе. Әммә тормош дауам итә, тапшырыуҙар эфирға сыға.

**Хәҙер производствоның барлыҡ тармаҡтарында ла сит ил тауарҙарын Ватан етештереүсеһенекенә алыштырыу бара. Һеҙҙең ҡоралмалдар ватылһа, уларҙы, сифатты төшөрмәйенсә, Рәсәйҙекенә алыштырыу мөмкинлеге бармы?**

- Бында ла Мәскәү ярҙам итә, үҙебеҙҙең инженерҙар ҙа бик шәп, нимәнелер алыштыралар ҙа. Әлбиттә, сит ил тауарҙарын алыштырыу - ҡотолғоһоҙ. Беҙ Ютубтың көмөш төймәһе призына эйә инек, унда әллә күпме яҙылыусыбыҙ бар ине. Уны оҙаҡ йылдар дауамында булдырҙыҡ. Ниндәйҙер бер мәлдә, иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ, гугл уны япты ла ҡуйҙы. Әммә беҙ был мәсьәләне тиҙ хәл иттек һәм ДТРК-ның үҙ платформаһы барлыҡҡа килде. Икенсенән, беҙ тиҙ генә Рутюбҡа күстек һәм хәҙер материалдарыбыҙҙы шунда урынлаштырабыҙ.

Камераларҙы икенселәренә алыштырҙыҡ тип әйтә алмайым, сөнки был дөрөҫ булмаҫ ине. Уларҙы, үкенескә күрә, алыштыра алмайбыҙ. Ул Японияның SONY фирмаһы сығарған камералар, беҙ уларҙы һаҡлап, иплəп тотонабыҙ. Һәр саҡ операторҙарға ла, инженерҙарға ла "Күҙ ҡараһындай һаҡлағыҙ", тип кенә торам, сөнки ҡасан яңы ҡорамалдар алырыбыҙ билдәһеҙ. Әммә ҡайһыларын алырға, әлбиттә, Мәскәү ярҙам итә. Мәҫәлән, улар ярҙамы менән заманса яҡтыртыу комплексы алыуға өлгәштек.

**Карьера үҫешенең барлыҡ баҫҡыстарын: стажерҙан директорға тиклем тамашасыларҙың күҙ алдында үттегеҙ. Шулай ҙа ваҡыты-ваҡыты менән хәбәрсе сифатында ла күренәһегеҙ. Бындай сығыштар заказ буйынса эшләнәме, әллә үҙ теләгегеҙ, күңел талабымы?**

- Бында барыһы ла бергә: күңел талабы ла, үҙеңде һынап ҡарау ҙа, Мәскәү етәкселегенең ҡуҙаллауы ла. Икенсе яҡтан, беҙҙең структура хәрби хеҙмәт кеүек бит: етәкселектең бойороғо тикшерелмәй, үтәлә. Әгәр етәксең шылтыратып, үҙең эшләһәң шәп булыр ине, ти икән, был инде ҙур ышаныс сағылышы ла. Шуға ла, әле мин журналист танытмаһын ситкә алып ҡуймағанмын, тием.

**Заманға ярашлы, бөтә донъя цифрлашыуға табан ҙур аҙымдар менән бара. Был яңылыҡтан телевидение ла ситтә ҡалманы - берҙәм цифрлы пакетҡа - мультиплексҡа күсте...**

- Ҡыҫҡаса ғына аңлатҡанда, бөгөн мәғлүмәт таратыу юлдары күп: интернет, юлдаш, кабель, мультиплекс. Мультиплекс Рәсәйҙең һәр гражданына 20 мотлаҡ каналды, шул иҫәптән төбәк тапшырыуҙары ла ингән "Рәсәй-1", "Рәсәй-24" каналдарын бушлай ҡарау, "Рәсәй радиоһы" радиостанцияһын бушлай тыңлау мөмкинлеген бирә. Был ил Президенты Указына ярашлы, 2009 йылда тормошҡа ашырыла башланы, республика 2018 йылда ғына мультиплексҡа инде.

**Хәҙер бар эштәр рейтинг буйынса баһалана, ә һеҙҙең каналдың рейтингы ниндәй?**

- Рәсәй телеканалы 7 йыл рәттән лидер позицияһынан төшмәй. Күптән түгел 2022 йыл йомғаҡтары билдәле булды һәм беҙ тағы ла алда барабыҙ. Һәм был алдынғылыҡты барыһы ла төбәктәрҙәге филиалдарға бәйләй. Мин директор булған осорҙа беҙҙең төбәк "Хәбәрҙәр"е рейтинг буйынса федераль сығарылыштар рейтингынан түбән төшмәне. Бер кемдә лә үпкәләткем килмәй, әммә төбәк "Хәбәрҙәр"ен һәм "Башҡортостан-Хәбәрҙәр"ен республикала башҡа каналдарҙағы яңылыҡтар йәки хәбәрҙәргә ҡарағанда күберәк ҡарайҙар. Шуға маҡтанмай ғына әйтә алам: республикала "Хәбәрҙәр"ҙең рейтингы нығ юғары.

**2014 йылда һеҙ Башҡортостан журналистарынан иң беренсе Донбасҡа командировкаға барып, ундағы хәл-торошто үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп ҡайттығыҙ. Бөгөн ундағы ваҡиғаларға диванда ятып үҙ фекерен белдереүселәргә әйтер һүҙегеҙ ҙә барҙыр, моғайын?**

- 2014 йылда Украинаның Донбасс территорияһында йәшәгән халҡы үҙҙәренең урындағы властҡа кәрәкмәгәнен ныҡлап аңланы. Был, иң тәүҙә, туған телеңдә өйрәнеүҙе тыйыуҙан башланды. Киевта "майҙан" еңгәс, бай, ҡеүәтле сәнәғәт-иҡтисади үҫешкән Донбаста төрлө радикал күренештәр күбәйә, шахталар олигархтар ҡулына күсә башланы. Территорияға ғәскәр индереү түҙемлектең һуңғы сиге булды. Һәм былар барыһы ла үҙ телен, мәҙәниәтен һаҡлап йәшәргә теләгән халыҡтың ихтыярына ҡаршы эшләнде, уларға ҡаршы ҡорал ҡулланыла башланы. Беҙ беренсе тапҡыр уң секторҙың кешеләрҙе урлау күренешенә юлыҡтыҡ. Тыныс тормоштан килеп, ҡапыл кешеләрҙе үлтереүҙәрен үҙ күҙҙәрең менән күреү - ҡурҡыныс, әммә иң ҡурҡынысы - кешеләрҙең ошо хәлгә күнегеүе. Унда 9-сы йыл һуғыш бара, Донбасс халҡы ошо ваҡытта иң яҡшы сифаттарын күрһәтте. Һуғышты беҙ башламаныҡ, беҙ уның Рәсәйгә таралыуына юл ҡуймаҫ өсөн ҡаршы торабыҙ.

Әйткәндәй, 2014 йылда мин унда сығышы менән Башҡортостандан булған бик күп кешене осраттым. Улар төрлө позицияларҙа, шул иҫәптән үҙ ирке менән Донбасты яҡлаусылар сафында ла ине. Беҙ Донбасс халҡын үҙ туғаныбыҙҙай ҡабул итәбеҙ һәм һәр саҡ шулай буласаҡ.

**Унда булған ирекмәндәр махсус хәрби операцияла Башҡортостан ир-егеттәренең күп булыуы һәм, милләтенә ҡарамай, республикаға бәйле йәки "башҡорт" позывнойын алыуы тураһында белдерә. Был нимәгә бәйле - илһөйәрлеккәме, әллә икенсе сәбәбе бармы?**

- Тәү сиратта илһөйәрлек һәм хәрби хәрәкәттәр барышы шарттарында бер-береңде таныу ысулы. Һәр кем үҙенә яҡын, күңел түрендә һаҡлаған атамаһы ала. Ул ғына ла түгел, башҡорт яугирҙары үҙ-ара башҡортса һөйләшеп, дошмандың башын бутай. Башҡа милләттәр ҙә шундай алым ҡуллана. Был тактика йәһәтенән яҡшы алым һәм берҙәм эш итергә ярҙам итә. Һуғышта зирәклек тә бик мөһим.

**Киләсәккә пландарығыҙ?**

- Иң мөһиме, насип булһа, быйыл башҡорт телевидениеһы башланған тарихи студияны асасаҡбыҙ. Киләһе йыл беҙгә 65 йыл тула, уны лайыҡлы ҡаршылар өсөн республика етәкселегенә мөрәжәғәт итергә ниәт бар. Башҡортостан телевидениеһы тарихы тураһында музей булдырыу, китап йәки альбом сығарыу ҙа күҙаллана. Әммә әлегә тәү сиратта матди-техник базаны нығытыу, студияны эшләү һәм уның дизайнын булдырыу маҡсаты тора. Шул уҡ ваҡытта бинаны реконструкциялау ҙа ҡамасауламаҫ ине, ләкин барыһы ла финанс мәсьәләһенә барып тоташа. Үҙебеҙ йәйләп ремонт эшләгән булабыҙ, тик бина тағы 50 йылдан һуң да ныҡлы торһон өсөн етди ремонт кәрәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Дөйөмләштереп әйткәндә, Азамат Рафаэль улы бер аҙ баҫалҡылыҡ күрһәтте, шулай ҙа ул директор булған осорҙа Рәсәй телеканалында башҡорт телендәге тапшырыуҙар нығ артып китеүен билдәләргә кәрәк. Һәр иртәнен "Хәйерле иртә!" тапшырыуы менән башлаған тамашасы уны һәр саҡ шулай булған кеүек ҡабул итә. Башҡорт телендәге "Ватан" интернет-радиоһын 2-3 мең кеше тыңлай. Ололар уны "даңғыр-доңғор" йырҙар, тиһә лә, уның үҙенең аудиторияһы бар. Шулай уҡ телевидениеның 60 йыллығына арнап эшләнгән башҡортса 60 караокены ҡулланып, бөтөн ерҙә башҡортса йырлау мөмкинлеге бар.**

**Пандемия осоронда интернетта уҙғарылған "Алтын бишек", "Уйна, гармун" акциялары бихисап таланттарҙы һәм уларҙы хуплаусыны бергә туплай, уларҙы тағы ҡабатларға кәрәк, тиген фекергә этәрә.**

**Башҡорт телендәге эфир "Башҡортостан-24" каналындағы тапшырыуҙарҙың яртыһын алып тора, унда яңынан-яңы проекттар барлыҡҡа килә, район телевидениеларына үҙ районы тураһындағы тапшырыуҙарын тотош республикаға сығарыу мөмкинлеге бирелгән һ.б. Ҡыҫҡаһы, бөгөн уның йәшен һорамайынса, ошо эшләгән эштәре буйынса ла һығымта яһарға мөмкин: ир-егет!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

✔ *Беҙҙең заманда йүкә телефон шәп эшләй ине. Хәҙер генә ул бер аҙ онотола төштө. Ә беҙҙең заманда ул бәйләнештең иң ышаныслы төрө булды. Ниндәй йүкә телефон тураһында һүҙ бара, тип аптырап ҡуйыусылар булыр.*






Минең Ирек исемле бер таныш ағайым бар. Шәп һунарсы ул. Уның һунар мажараларын тыңлаған һайын, үәт әй, тип баш сайҡап аптырайым. Бер мәл: "Их, уның менән бер тапҡыр булһа ла һунарға сығырға ине", - тип хыяллана башланым. Ысынлап та, ун тапҡыр тыңлағансы, бер тапҡыр күреү күпкә яҡшы ла инде.

Әммә бына ошо ниәтемде апаруҡ ҡына уйымда ғына йөрөтөргә тура килде. Сөнки Ирек ағайҙы теләгән ваҡытта йүгерә һалып барып ҡына күреп булмай. Сәбәп ябай, ул башҡа ауылда йәшәй. Ә ниңә шылтыратманың, тип һорап ҡуйыр берәү. Улайтып булманы шул. Сөнки беҙҙең заманда хәҙерге заман телефондары булманы. Шуға, күпмелер ваҡыт заяға, йәғни, бушҡа үтеп китте. Үҙегеҙ беләһегеҙ, һунарға ҡағылышлы хәбәрҙе кеше аша ебәреп булмай. Мотлаҡ күҙмә-күҙ осрашып, һөйләшеп килешер кәрәк.

Аллаға шөкөр, бер мәл, насип иткәс, район үҙәгендә тап булды Ирек ағай. Баҙарҙа осраштыҡ беҙ уның менән. Мин ҡыуаныстан уны саҡ ҡосаҡлап алманым. Саҡ үҙемде тыйып ҡалдым. Бына ошо мәлдә шуныһы бер аҙ эсте бошора. Сөнки тота һалып үҙ йомошоңдо әйтеп булмай. Әҙерәк гәп һатып торор кәрәк. Йолаһы шулай. Етмәһә, бына ошондайыраҡ һорауҙарға арҡыс-торҡос түгел, ә матур итеп яуап бирергә кәрәк. Эштәр барамы, һаулыҡ ни хәлдә, көндәр нисек тора, ауылда именлекме, тауыҡтар йомортҡа һаламы, нисә оя ҡаҙың бар, картуф сәскә аттымы, айыу малға теймәйме, фәләндең улы ҡайҙа йөрөй, ябыға төшкәнһең, әллә килен менән бер аҙ боларышып алдыңмы, фәлән ҡоҙа бура күтәрҙеме, шул кеше өйөнөң башын яптымы, шул ағай атын һаттымы, фәлән кеше ҡыҙын кейәүгә бирҙеме, никахын кем уҡыны, тигән кеүегерәк шаҡы-шоҡо һорауҙар инде. Әйткәндәй, үҙеңдең хәлеңде күршеңдән һора, тигәндәй, ошо мәлдә ауылдағы күп яңылыҡты үҙең дә белеп ҡалаһың. Бына ошолай апаруҡ ҡына гәп һатып торғандан һуң саҡ үтенесемде еткерә алдым.

- Ирек ағай, берәйҙе мине лә үҙең менән ал әле һунарға.

Һунарсы ағай, тәү күргәндәй, һынамсыл ҡараштары менән миңә текләп ҡатып ҡалды. Апаруҡ торҙо ул. Хатта, әллә ойоп китте, тип уйлап ҡуйҙым. Шул мәл ул телгә килде.

- Тик мыжып йөрөмәйһең.

Шатланып риза булдым.

- Мыжып йөрөргә мин бер бала-саға түгел дә инде.

Һунарсы миңә текләп, тағы бер аҙға тын ҡалды. Нимә әйтер икән был, тип мин уға текәлдем. Ай-бай, был тын ҡалыу тағын апаруҡҡа һуҙылып китте. Әллә торған еренән йоҡлап китте инде был, тип уйлап та өлгөрмәнем, һунарсы ағай ҡапыл телгә килде. Һәм шыбырлап тигәндәй миңә өндәште.

- Борос менән кирбес алырға онотма.

Мин бындай ваҡытта нимә тип әйтһә лә риза инем. Шуға күрә ризалығымды белгертә һалып, яҡшы ат һымаҡ башымды һелкә һалдым.

- Нимә әйтәһең, барыһын да алам, Ирек ағай!

Мәйтәм, бары тик мине генә алһын һунарға. Тағын бер аҙға тынып ҡалдыҡ. Шул мәл һунарсы ағай тирә-яҡҡа ҡарап алды ла һуҡ бармағы менән миңә яҡынайырға ишараланы. Һәм ҡолағыма өс кенә һүҙ шыбырланы.

- Көт. Сәләм ебәрермен.

Үҙем дә аңламаҫтан мин дә тирә-яғыма күҙ ташлап алам. Шунан уның ҡолағына нишләптер шыбырлап ҡына яуап бирәм.

- Ярай.

Нишләп ошолай шыбырлашып торабыҙҙыр инде, белмәҫһең. Әйтерһең дә, йәшертен генә ҡырын эш эшләргә йыйынабыҙ. Ошо уйҙар башымдан үтеп киткән арала һунарсы ағай кеше араһына инеп тә юғала. Мин башымды һелкә-һелкә тороп ҡалам. Күпмелер ваҡыт шулай баш һелкеп торғанмындыр инде, бер саҡ ҡатындың әйткән һүҙҙәре мине айнытып ебәргәндәй була.

- Нимә кеше аптыратып башыңды күгәүен ҡыуған ат һымаҡ тегеләй-былай ҡыйшайтып тораһың. Кешенән оялыр инең...

* * *

Ошо осрашыуҙан һуң аҙнаун көн ваҡыт үтте. Мин, әлбиттә, көтә-көтә көтөк булып бөттөм. Ә Ирек ағайҙан хәбәр-хәтәр юҡ. Әллә оноттомо икән, тип бер аҙ төңөлә төшкәйнем, Аллаға шөкөр, онотмаған икән. Бына бер мәл, насип иткәс, һағындырып ҡына һунарсы ағайымдың сәләме килеп етте. Ошо шәмбе көнө миңә урмандың Уй-Текә тигән ерендә булырға кәрәк икән. Аллаға шөкөр, беләм мин ул урынды. Ауылдан әллә ни алыҫ түгел. Ни бары унун ике саҡрым ғына. Насип итһә, әйткән ваҡытына мотлаҡ буласаҡмын унда.

Бына ошо урында кемдер сәләмдең нисек килеп етеүе тураһында һорай ҡуйыр. Һеҙҙең заманда кеҫә телефоны булмаған да инде, тип әйтер ул. Эйе, ысынлап та, беҙҙең быуын уны белеү генә түгел, хатта уның булыу мөмкинлеген дә белмәй йәшәне. Уның ҡарауы, беҙҙең заманда йүкә телефон шәп эшләй ине. Хәҙер генә ул бер аҙ онотола төштө. Ә беҙҙең заманда ул бәйләнештең иң ышаныслы төрө булды. Ниндәй йүкә телефон тураһында һүҙ бара, тип аптырап ҡуйыусылар булыр. Бына хәҙер мин Ирек ағай менән йүкә телефоны аша нисек бәйләнеш тотҡанды аңлатып китәйем әле. Тәүге "шылтыратыу" бына ошолай була. Иң тәүҙә Ирек ағай миңә тәғәйен сәләмде юлға йыйынған бер ауылдашына әйтә. Ә ул ағай, үҙ сиратында, беҙҙең ауыл аша үтеп киткән мәлдә кемгәлер ошо турала еткерә. Машинаһын туҡтата, ишеген аса һәм тәү осраған кешегә ошолай өндәшә.

- Һаумыһығыҙ. Ауылда именлекме?

Бер аҙ һөйләшеп торғандан һуң, ошолай әйтә:

- Ф.-ға әйтерһең әле. Ирек ҡорҙаш ошо шәмбе Уй-Текәлә була.

Һәм машинаһына ултырып, китеп тә бара. Был ағайҙың ошолай "шылтыратыуына" бер нисек тә үпкәләп булмай. Ысынлап та, ул мине ауыл буйлап эҙләп йөрөй алмай ҙа инде. Иң мөһиме, ул сәләмде еткергән. Һәм унан бурыс төшкән. Ул тыныс күңел менән юлын дауам иткән. Бына ошо кемдер ошо сәләмде тағы кемгәлер әйткән. Уныһы аҙаҡ тағы кемгәлер әйткән. Уныһы, үҙ сиратында, тағы кемгәлер әйткән.

Нимәгә саҡырҙы икән? Быны асыҡлау өсөн күрәҙәсегә барыу кәрәкмәй. Әлбиттә, һунарға! Һунарсы кеше һунарҙан башҡа тағы нимәгә саҡырһын инде. Балыҡҡа саҡырам, тип әйткән хәлдә лә был хәбәргә берәү ҙә ышанмаҫ ине. Ә ниндәй йәнлеккә һунарға баралар? Был һорауҙы хатта биреп тороу ҙа кәрәкмәй. Әлбиттә, айыуға! Атаҡлы һунарсы исемен йөрөткән һунарсы, әҙәм көлдөрөп, ҡуянфәләнгә һунарға саҡырып тормаҫ инде.

Бына ошолай итеп мине ауылдаштар һунарға "оҙатып та" ҡуйҙы. Шуныһы ҡыҙыҡ, ә бит Ирек ағайҙың сәләме әле миңә килеп тә етмәгән. Сөнки мин әле эштә. Мин эштән ҡайтып инеү менән йүкә телефон яңы көс менән эшләй башлай. Миңә Ирек ағайҙың сәләмен тәү башлап ҡатын еткерҙе. Мин өйгә килеп инер-инмәҫтән ул миңә ошолай һөйөнсөләй һалды.

- Ирек ағайың ошо шәмбе һине Уй-Текәлә көтә!

Алдан әйткәнемсә, минең нимәгә барғанымды хәҙер бөтә ауыл белә. Шуға ҡатын, нимәгә бараһың, тип һорап та тормай. Ул миңә бер аҙ ҡарап торғандан һуң көрһөнөп ҡуя.

- Нимә генә тотоп барырһың икән?

Тора биргәс, мине йәлләгән кеше була.

- Ней йүнле мылтығың, ней йүнле һөңгөң, ней йүнле хәнйәрең юҡ.

Йүнле, тигән һүҙен әйтмәһә лә була инде. Сөнки миндә ҡатын әйткән нәмәләрҙең йүнлеһе лә юҡ, йүнһеҙе лә юҡ. Элек-электән һунарға йөрөмәгәс, ҡайҙан булһын инде улар миндә. Ҡатын күҙе менән өй эсен йүгертеп ала. Шунан өҫтәлдә ятҡан бысаҡты ҡулына ала. Уның үтмәҫ йөҙөнә бармаҡтарын тигеҙеп ҡуя.

- Был бысаҡты алып китһәң, икмәкте нимә менән телермен икән.

Тора биргәс, был уйынан кире ҡайта.

- Айыу ҡулыңдан һыпыра тартып алһа, мине тере ҡулһыҙ итәһең.

Шунан ауыҙын баҫып (көлгәнен күрмәй тип уйлай микән) әйтеп ҡуя:

- Утын ярған балтаны тотоп бармаһаң.

Шул мәл мин ҡапылдан эре генә ошолай һүҙ башлайым.

- Ә мин борос менән...

Ярай әле ошо мәл зиһен эшләп китә. Һәм мин шунда уҡ телемде тешләй һалам. Борос һәм кирбес тураһында берәүгә лә әйтергә ярамай. Тәү сиратта ҡатынға. Хатта сер итеп кенә лә әйтергә ярамай. Йүкә телефондың нисек шәп эшләгәнен хәҙер һеҙ ҙә беләһегеҙ бит инде. Әйтеү генә бурыс. Хәҙер тараласаҡ был хәбәр ауылға. Аҙаҡ, көлөп, күҙҙе лә астырмаясаҡтар. Хатта борос ҡушаматы тағылыуы ла бик ихтимал. Әлегә мин борос менән кирбестең нимәгә кәрәк икәнен үҙем дә белмәйем. Ней теге юлы Ирек ағайҙан һорашып ҡалырға баш етмәгән. Ә шулай ҙа күңел әҙерәк нимәлер һиҙеңкерәй. Сөнки минең борос менән кирбес тотоп һунарға барған кешене күргәнем юҡ әле. Әлбиттә, борос һүҙен ишетеү менән ҡатындың ҡолағы ҡарп итеп ҡала. Тегеләй һораша, былай һораша. Ә мин әйтмәйем. Юрый һүҙҙе икенсегә борам. Аҙаҡ, насип итеп айыуҙы алғас, тәмләп һөйләрмен әле. Шуныһы шәп булды. Бая ғына минән көлөп торған ҡатындың йөҙөн болот ҡапланы. Борос тураһында уйлана ул хәҙер.

Икенсе сәләм ут күршенән булды. Ул минең эштән ҡайтыуҙы аңдып йөрөгәнгә оҡшай. Әммә нисектер минең ҡайтҡанды күрмәй ҡалған. Тегеләй булһа, ярты сәғәттән түгел, ә артымса уҡ өйгә килеп инер ине. Бына ул ишекте туҡылдатып, әйҙә, әйҙә, инегеҙ, тигәнде лә көтмәй, ашығып-ярһып килеп тә инде. Башын бер аҙ эйә биреп, кәүҙәһен бер аҙ алға көмөрәйтеп, минең менән ике ҡуллап килеп күреште. Йәнәһе лә, мине ололай. Ә үҙе ыңғайына мыҫҡыл итеп төрттөрөп алырға ла онотмай.

- Һунарсыға сәләм!

Кәүҙәһен турайта биреп, миңә уңыштар теләргә онотмай.

- Һунар ҡомары ташламаһын ине.

Бына ошо кешегә борос менән кирбес тураһында нисек әйтәһең инде! Бер нисек тә әйтеп булмай. Башҡаларға әллә нисәгә төрләндереп, әллә нисәгә тулғандырып һөйләйәсәк. Күрше минең менән бер аҙ һөйләшеп торғандан һуң, әлбиттә, ул Ирек ағайҙың сәләмен еткерә. Әммә былай ғына әйтеп сығып китмәй. Үҙ "кәңәшен" бирә. Былай ғына сығып китһә, исеме юғала ла инде уның. Тәүҙә ул мейес эргәһенә бара һәм уның ҡапҡасын алып, эргәмә килә.

- Килен рөхсәт итһә, бына ошо мейес ҡапҡасын тотоп бар һин һунарға.

Килендән һалдырып хәбәр һөйләгән була бит әле. Ә үҙе минән ни бары ике көнгә оло. Ярай, артабан тыңлайыҡ әле уны.

- Сүкеш кәрәк була инде.

Бер аҙға туҡтап ҡала ул. Әммә мин ныҡ торам. Уны ҡыуандырып, сүкеш нимәгә кәрәк, тип һорамайым. Быны аңлап алған күрше бер аҙ көрһөнөп ҡуя. Һәм һүҙен дауам итә.

- Йүнле сүкеш һиндә юҡтыр инде ул (мыҫҡыл итә үҙенсә). Ярай, ҡайғырма. Миндә бәләкәй генә йәтеш сүкеш бар. Шуны биреп торормон.

Минең ныҡ торғанды, ә шулай ҙа ҡатындың аптыраулы ҡарашын күреп, күрше бер аҙ ҡыуанып ҡуя. Шуны ла белмәйһегеҙме ней, тигән кеүегерәк тын ала. Һәм аңлата башлай.

- Айыу килеп сыҡҡан ыңғайға һин ошо мейес ҡапҡасын ҡалҡан һымаҡ тотоп, уға ташланаһың...

Күрше йәнә бер аҙға тынып ҡала. Минән һаман, йә, шунан, тип әйттерməксе була. Ә мин юрый әйтмәйем. Нишләп мин уны ҡыуандырып һорап торорға тейеш әле. Әммә ҡатын сыҙамай. Һәм һорай ҡуя.

- Йә, шунан?

Күңеле булған күрше тамағын ҡырып ала һәм һүҙен дауам итә.

- Әлбиттә, айыу ҙа һиңә ҡаршы ташланасаҡ. Һәм уның үткер тырнаҡтары ҡапҡас тимерен үтә тишеп килеп сығасаҡ.

Күрше тағы бер аҙға тынып ҡала. Мин тағы өндәшмәйем. Әммә ҡатын тағы сыҙамай. Һәм уны ҡыуандырып тағы һорай.

- Йә, шунан?

Күрше миңә борола төшә.

- Ҡалғаны һинең сослоҡта инде, күрше. Тиҙ генә шул тырнаҡтарҙы бөклəгәнсе һуға алһаң, айыу һинеке.

Беҙ был күренеште күҙ алдына килтереп, бер аҙға тын ҡалабыҙ. Күңеле булған күрше һүҙен дауам итә.

- Хәҙер был айыуҙы быҙау етәкләгән һымаҡ йөрөтөп була. Насип итһә, уны ауылға алып ҡайтып, беҙгә лә күрһәтерһең әле.

Шул мәл ҡатын рәхәтләнеп көлөп ебәрә. Ә мин уларҙы ҡыуандырып көлмәнем. Һәм күршегә ҡаршы ла яуап бирмәнем. Рәхмәттәремде яуҙырып, оҙатып ҡалдым уны. Сүкеш инеп алырға онотма, тип сығып китте ул.

* * *

Икенсе көн эшкә барғас, "дан инде" ҡушаматы алған хужа мине саҡырып алды. Мин килеп инеү менән ауыр көүҙәһен енел генә күтәреп, эргәмә өлтөрәп килеп етте. Ҡушҡуллап һаулыҡ һорашты. Һәм һүҙ башланы.

- Ирмен тигән кеше ағас ултыртһа, малай үҫтерһә, өй һалһа - дан инде. Үҙен ир тип һанаған кеше айыу алһа, бигерәк дан инде. Маладис, ҡустым. Бындай эшкә йөрәгең еткәс, дан инде һиңә.

Уның маҡтауҙарын ошо урында туҡтатып торайыҡ. Ошоларҙы әйтер өсөн саҡырмағаны билдәле бит инде. Шуға һүҙҙең төп өлөшөнә күсәйек.

- Ҡустым, һунар итеүҙең дан ысулы бар. Шуны һиңә өйрәтәйем әле (оло кеше оло кеше инде, көләү-мыҫҡылдың әҫәре лә юҡ). Бының өсөн яҫтыҡ кәрәк. Тышы ҡаты булһа, дан инде. Ошо яҫтыҡҡа ике яҡлап унлап ҡармаҡ тегеп сығаһың. Суртан-йәйенгә тәғәйен эре ҡармаҡ булһа, дан инде. Яҫтыҡты арҡан менән бәйләйһең. Арҡаның ныҡ булһа, дан инде. Айыу килеп сыҡҡан ыңғайға ошо яҫтыҡты уға ташлайһың. Еткерә ташлай алһаң, дан инде. Арҡаның ҡуша ташлап ҡуйма. Уның икенсе осо ҡулыңда булһын. Биленә бәйләп ҡуйһаң, дан инде. Айыу яҫтыҡты бер ҡулы менән эләктереп ала. Һәм ҡармаҡтар уның усына ҡаҙалһа, дан инде. Айыу аңғармаҫтан икенсе ҡулы менән дә яҫтыҡҡа йәбешә. Һәм икенсе ҡулы менән дә ҡармаҡтарға эләкһә, дан инде. Айыу яҫтыҡты ҡосаҡлап йөрөй, ә ҡармаҡтарҙан бер нисек тә ысҡына алмаһа, дан инде.

Ошо хәлдә күҙ алдына килтереп, бер аҙға тын ҡалабыҙ.

- Ҡалған яғы һинең йылғырлыҡта инде, ҡустым. Йүгереп кенә берәй ҡарағайға менеп китә алһаң, дан инде. Ҡарағай башында арҡанды самалап тартып, айыуҙың ике ҡулын өҫкә күтәреп бәйләй алһаң, дан инде.

Ошо хәлдә күҙ алдына килтереп, тағы бер аҙға тын ҡалабыҙ.

- Аҙаҡ айыуҙы ҡытыҡлап алһаң, дан инде. Билен һәм ҡултыҡ аҫтын ҡытыҡлай торғас, уның көлөүҙән йөрәге ярыла...

Рәхмәттәр әйтеп сығып киттем мин "дан инде" хужанан. Аҙаҡ Ирек ағайҙың сәләмен тағы берикөү килеп әйтеп китте. Әлбиттә, әйткән ыңғайға бороло китмәнеләр. Ә ошондай "аҡыллы" кәңәштәрен биргән булдылар.

- Күҙенә ҡарама. Ҡашынды йыйырма. Ирендәреңде ҡымтыма. Асыҡ йөҙ менән тор. Ҡулдарыңды ике яҡҡа йәйеп, ихлас кеше икәнеңде күрһәт. Йылмайырға тырыш. Аллам һаҡлаһын, йүгереп барып күрешеп ҡуйма.

Ошоноң менән сәләмдәр тамам, тип уйлағайным. Яңылышҡанмын икән. Һуңғы сәләм биш йәшлек малайымдан булды. Ул кисен уйнап ҡайтҡас, миңә ошолай өндәште.

- Һин һунарға бараһың, ибет, атай?

Бер аҙ торғас, танауын тартып, өҫтәп ҡуя.

- Айыуға, ибет, атай?

Ҡулын-битен йыуындырған арала малайым һүҙен дауам итә.

- Иһерек бабай менән бараһ, ибет, атай?

Бына быныһын балаға юрый өйрәткәндәр.

- Кәзә тәкәһе тигән ерҙә һеҙҙе айыу көтөп ултыра, ибет, атай?

Мәйтәм, өйрәтеп торған кешеһен күрер кәрәк ине.

* * *

Бына ошолай сәләмдәр килеп бөттө. Хәҙер һунарға әҙерләнә башларға ла була. Әлбиттә, иң тәүҙә ҡатын күрмәгәндә генә рюкзак төбөнә кирбесте йәшереп һалып ҡуйҙым. Ашамлыҡтар йыйнаған мәлдә боросто ла алырға онотманым. Ҡыҫҡаһы, һунарсының әйткән ваҡытында мин урмандың ул әйткән мөйөшөндә баҫып тора инем. Көҙгө көндөң матурлығына һоҡланып, апаруҡ торҙом әле. Шул мәл яҡында ғына берәүҙең тамаҡ ҡырғанына әйләнеп ҡараһам, ауыҙ сите менән көлөмһөрәп Ирек ағай тора.

- Урманда улай торорға ярамай, ҡустым. Һаҡ булырға кәрәк.

Мәйтәм, ысынлап та һаҡ булырға кәрәктер. Һунарсының ҡасан һәм ҡайһы яҡтан килгәнен дә белмәй торсо әле. Бер аҙ һөйләшеп торғандан һуң, Ирек ағай ҡулын алға төбәп, хәбәрен һөйләй башлай.

- Бына ошо тирәлә ике балаһын эйәртеп, бер инә айыу йөрөй. Теге юлы улар Боҙор һырты буйлап үтеп киткәйнеләр. Аҙаҡ Күкрәүек тамағы яғына боролдолар. Ҡаҙанбай яғына сыҡмағандар. Сығырҙар ине, ул яҡта һигеҙ бүренең торған төркөм йөрөй. Инә айыу шуларҙан ҡурҡҡан. Шуға, моғайын, кире ошо яҡҡа тартырҙар. Әгәр беҙ Уй-Текәлә көтөп ултырһаҡ, улар беҙгә туп-тура килеп сығасаҡтар.

Һунарсы һөйләй. Ә мин аптырап тыңлап торам. Ул ун-егерме саҡрым араһыҡта ятҡан хәлә-хүәлде ҡайҙан белә икән? Бына шуға аптырайым. Урман йәнлектәре менән бергә йөрөгән һымаҡ һөйләй ҙә ҡуя бит, әй. Шунан, минән һунарсы сыҡмай, тип ҡул һелтәп ҡуям. Мин бит һарай тирәһендә тегеләй-былай сабып йөрөгән тауыҡтың ғына түгел, ваҡыты менән өй эсендә тегеләй-былай сабып йөрөгән баламдың ҡайҙа икәнен белмәйем. Мине был уйҙарҙан Ирек ағайҙың өндәшкәне арындыра төшә.

- Йә, ҡустым, мин әйткән нәмәләрҙе алып килдеңме?

Мин уларҙы рюкзак эсенән сығарып, Ирек ағайға бирә һалам. Нимә эшләтер икән ул борос менән кирбесте? Был һорау һеҙгә генә түгел, миңә лә ҡыҙыҡ. Шул арала һунарсы кирбесте ағас төпһәненә һала һәм өҫтөнә боросто һибеп сыға. Быларҙы күреп, мин уфтанып ҡуям. Һәм... был нимә булды инде, тигән һорауҙы биреп тормайым. Сөнки уның шаяртҡанын, дөрөҫөрәге, алдағанын һиҙеп торам. Әммә уға ғына белгертмәйем. Иғтибарлы тыңлаған кеше булам. Был һунар ысулын Ирек ағай ошолай аңлата.

- Был ысул күптәргә билдәле түгел. Уны мин яҡын күргән кешеләремә генә өйрәтәм (тимәк, мин шундай аңыштар иҫәбендә). Эш шунда, йәнлек боростоң еҫен алыҫтан һиҙә. Һәм ошо урынды мотлаҡ килеп таба. Ошо урынды тапҡас, ул кирбескә, унан бигерәк, унан аңҡыған әскелтем еҫкә аптырап ҡала. Һәм ҡыҙыҡһынып, уны еҫкәп ҡарай. Шул мәл үҙе лә һиҫмәҫтән башын өҫкә күтәрә биреп тора ла сөскөрөп ебәрә. Һәм шул ыңғайы ошо кирбескә башын яра һуға ла ҡуя!

Бер мәлгә икебеҙ ҙә тын ҡалабыҙ. Үсекмәнем мин Ирек ағайға. Ярай, мәйтәм, булыр әле минең урамда ла байрам. Ирек ағай менән шаярып булмаҫ, әлбиттә. Ней тиһәң дә, минән күпкә оло бит. Ә бына ваҡыты еткәс, берәй йәш кешене мин дә ошолай шаяртып алырмын әле, насип итһә. Уның ҡарауы, уның менән урманды апаруҡ гиҙеп, урманда рәхәтләнеп сәй эсеп, Ирек ағайҙың хәбәрҙәрен тыңлап, ял итеп ҡайттым. Әйткәндәй, Ирек ағайҙың айыуҙар тураһында һөйләгәне минең күҙ алдыма ошолай килеп баҫа.

Инә айыу ике балаһын эйәртеп, был урмандың мөйөшөн апаруҡ гиҙеп сыҡты. Һунарҙары уңышлы ғына булды былай. Боҙор һырты буйлап китеп барған мәлдә берике ҡуянды тотоп тамаҡландылар. Аҙаҡ Күкрәүек тамағы яғына боролдолар. Бында бер боланды апаруҡ эҙәрләкләп барҙылар. Ана тотам, бына етәм, тип барған мәлдәрендә униһы Ҡаҙанбай яғына сығып китте. Шул мәл алдан барған инә айыу туҡтап ҡалды. Бер аҙ артта килгән ике балаһына борсоулы ҡарашын ташланы. Һәм әйтеп ҡуйҙы.

- Анау ялбыр ҡарағайҙан Ҡаҙанбай яғы башлана.

Ике бала айыу алда үҫеп ултырған йыуан ҡарағайға ҡарап, туҡтап ҡалды. Һәм аптырап һорай ҡуйҙылар

- Ҡаҙанбай яғы башланһа, ней булған?

Инә айыуҙың тәне буйлап еңелсә генә дерелдәү үтеп китә.

- Ул яҡҡа сыҡмайыҡ, кире боролайыҡ.

Балалары имән олонона һөйәлә һәм һораулы ҡарашын уға төбәй.

- Ә нишләп?

Инә айыу ҡурҡышынан ҡалтырай башлаған аяҡтарын тыя алмай, сүгәләй төшә һәм ҡалтыранған тауыш менән яуап бирә.

- Унда һигеҙ бүре йөрөй.

Бындай һүҙҙәрҙән һуң бала айыуҙарҙың да йөндәре табандарына төшөп китә. Һәм улар йән-фармана кирегә табан саба. Күпмеләр сабып барғандан һуң инә айыу ошолай тип әйтә.

- Әйҙә, Уй-Текә яғына юл тотайыҡ. Унда элек-электән ҡуян күп булды. Улар бар ерҙә, беҙ ас булмаҫбыҙ.

Уй-Текәгә килеп төшөү менән әскелтем еҫте инә айыу ғына түгел, уның балалары ла һиҙҙе. Йән киҫәктәре кемуҙарҙан еҫ килгән яҡҡа сапты. Инә айыу уларҙы ваҡытында туҡтата алманы. Шул мәл улар сабып киткән яҡта шалт иткән тауыш ишетелде. Һәм урман илау тауышына күмелде. Инә айыу, ҡото осоп, балаҡайҙары яғына йөмөлдө. Ул барып еткәндә бер балаһы маңлайын ыуып илап ултыра ине. Ә икенсеһе ҡурҡышынан ағас башына менеп киткән булып сыҡты. "Башы ҡороғор, Ирэктең генә эше был. Ярай әле кирбесте бейеккә һалырға башы етмәгән. Баламды әрәм итә ине", - тип ҡыуанды инә айыу.

**Был һөйләүсене**
**Әғләм ШӘРИПОВ**
**тыңлап торҙо.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# АҠ ТИРӘК - КҮК ТИРӘК,

## йәки Беҙҙең уйындар онотолормо?



**(Башы 6-сы биттә).**

Иң мөһиме - беҙ барыбыҙ ҙа тигеҙ, йәғни, беҙҙең кемебеҙҙелер айырып баһалаусы юҡ. Дәрестә яҡшы өлгәшкәне өсөн кемдер уҡытыусынан маҡталып, "бишле", икенсеһе "икеле" алһа - бында тигеҙлек һәм иркенлек хөкөм һөрә. Бәғзе берәүҙең уҡыуҙа әллә ни артыҡ күрһәткестәре булмай бит инде, уның ҡарауы, ул мәргәнлектә, йүгереү йә һикереү буйынса беренсе булып сыға. Ә тышта шундай саф һауа! Унда-бында йүгереп, тиргә батаһың, әммә уйын - мауыҡтырғыс, күңелле, өйгә ҡайтҡы ла килмәй. Ошонан да яҡшыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ физик күнекмәнең булыуы мөмкинме! Атай-әсәйҙәр, ашар ваҡыт еткәс, саҡырып ҡайтара. "Дәресеңде әҙерләргә онотманыңмы?" тип еңелсә "иҫкәртеп" тә алалар. Ыш-быш килеп, ярайһы ғына асығып ҡайтып инәһең. Бөгөнгө бәғзе бала-сағалар һымаҡ һайланып ултырыу тигән нәмә төшкә лә инеп сыҡмай. Әсәйҙәр һауытҡа нимә һалып бирһә лә -йыпырабыҙ ғына, малай!

Хәҙерге балаларҙың күптәре бер мәртәбә лә йәйә тартып атып ҡарамағандыр, моғайын. Был хаҡта уларға һөйләүсе лә һирәктер. Белеүебеҙсә, бөгөн һәр уҡыусы баланың шөғөлө "һыйпафон" һыйпау. Беҙҙең саҡта ул нәмә түгел, хатта бөтә ауылға бер телефон да булманы. "Тилфун", "тилвизур" тигән нәмәләрҙе ишетә генә беләбеҙ йә киноларҙа ғына күрергә тура килә. Уны ла булһа аҙнаһына бер тапҡыр күрше Аҡморон ауылынан Ғәлимйән, йә Булат ағай клубыбыҙға алып килеп күрһәтә. Ҡайһы бер малайҙар йәйге каникулда ҡалала йәшәгән туғандарында булып ҡайтҡас, шунда күргән телевизор хаҡында әллә кем булып һөйләй. Беҙ, ауыҙ һыуыбыҙ ҡойолоп, "настаяшный" телевизорҙы күргән малайҙы ышаныр-ышанмаҫтай тыңлайбыҙ.

Сәғәттәр буйы өйҙә диванда, һәр береһе айырым бер мөйөштә "кошорайып" телефон ҡарап ултырған бөгөнгө балаларға ошо хаҡта һөйләһәң, хатта ышанғылары ла килмәгәне һиҙелә. Элекке уйындар бөтөнләйгә онотолор һымаҡ та булып китә. Шулай ҙа өмөттө өҙөү ярамай, минеңсә. "Бөгөнгө балалар" тигәндәй, шул уйындарҙы үҙемдең ейәнсәрҙәрем менән уйнағаным бар. Ышанаһығыҙмы, улар күңел биреп, мауығып уйнайҙар. "Картатай, әйҙә һәпәләк уйнайыҡ", "Йәшенмәк уйнағым килә", тип, бәғзе ваҡыт оло кешене хатта йығып алып баралар. Айырыуса: "Бер бабай юлға сыҡҡан, уның тәгәрмәсе боҙолған, тәгәрмәсен йүнәтергә нисә сөй кәрәк булған?" - тип һанауҙарға ярата кескәйҙәр. Унан, йә диван артына йә шкаф эсенә инеп, йә булмаһа, ванна, туалетҡа йәшенәһен. Үҙҙәре лә мөкиббән китеп уйнай, әлеге "һыйпафондарын" күпмелер ваҡытҡа онотоп торалар. Балаларға мәктәптә лә ана шундай уйындар уйнатыу форсаты юҡмы икән, тимәксемен.

Ә бына бөгөнгө көндә ҡайһы бер мәктәптәрҙә "кадет" класстары асыуҙарын ныҡ оҡшатам. Минең бала сағымдағы иң ҙур хыялым ул! Беҙҙән алдараҡ, илленсе йылдарҙа уҡыған балаларҙың мәктәп формаһына ҡыҙыға торғайным. Батша Рәсәйе гимназияларындағы һымаҡ кокардалы фуражка, еҙ төймәле гимнастерка кейеп, билдәрен йылтырап торған еҙ пряжкалы ҡайыш менән быуып йөрөгән ағайҙарыбыҙға күҙем ҡыҙа ине. Әммә беҙ мәктәпкә барыуға ул форманы, ни өсөндөр, бөтөрҙөләр. Күкһел төҫтәге костюмға алыштырҙылар. Ә бер иш мәктәп формаһы балаларҙы бер аҙ тәртипләндереүгә һиҙелә бит! Икенсенән, уларҙың бай йә ярлы балаһы икәнлеге лә күренмәй, өсөнсөнән, егеттәр, ҡыҙҙар үҙҙәрен бер аҙ "хәрби" һымаҡыраҡ итеп тоя башлай. Уҡытыусылар ҙа балаларға (айырыуса, малайҙарға) берәй иҫкәрмә әйткән саҡта: "Һеҙ - буласаҡ һалдаттар, ил һаҡсылары..." тигән һүҙҙәрен йыш ҡына ҡыҫтырып ебәреүе лә ҙур тәрбиәүи роль уйнай. Ошолар хаҡындағы һүҙемде ҡолаҡ ситенә булһа ла элһен ине беҙҙең уҡытыусылар, тип һүҙ ҡуҙғатҡайным инде...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘҮЕФ ТОЙҒОҺО

## сиргә килтерә

■ Йүгереү менән артыҡ күп шөғөлләнеүҙең психика өсөн зыяны бар, ти белгестәр. Билдәле булыуынса, физик күнекмәләр физик һәм психик сәләмәтлек өсөн файҙалы. Башлыса кеше ниндәйҙер күнелһеҙ хәлдәрҙе онотоу өсөн, йәғни, проблемаларҙан ҡасып ҡотолоу өсөн йүгерә башлай. Ысынлап та ошо рәүешле стресҡа килтереүсе уйҙарҙан һәм хистәрҙән арынырға мөмкин. Бындай эскапизмды ғалимдар икегә: ыңғай тойғолар эҙләүгә йүнәлтелгән һәм проблемаларҙан ҡасырға мөмкинлек биргән төркөмдәргә бүлә. Һынауҙарҙа 227 йүгерек ҡатнашҡан, асыҡланыуынса, ошо рәүешле проблемаларын хәл итергә күнегеп китеүҙең ике төркөм өсөн зыянлы булыуы асыҡланған, кеше башҡа төрлө юл менән ыңғай тойғолар кисерә алмай башлаған.

■ Ҡәһүә зыянлы эсемлек тигәндә уның составындағы кофеин һәм уның ҡеүәтлыусы тәьҫирен күҙ уңында тоталар. Әммә ҡәһүәләге кофеин 0,6-0,7 процент ҡына, ул хатта ҡара һәм йәшел сәйҙә лә күберәк. Кофеин аҙ күләмдә файҙалы ла. Ул баш ауыртыуын баҫа, йөрәк эшмәкәрлеген көйләй, эшкә һәләтлелекте арттыра, яман шеш хәүефен түбәнәйтә. Косметологтар ҙа ҡәһүәне ярата, сөнки ул тиренең һығылмалылығын һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Шуға ла ҡәһүә яратһағыҙ, унан баш тартмағыҙ, ә сәләмәтлегегеҙ өсөн ҡулайлы дозаны билдәләгеҙ ҙә, рәхәтләнеп эсегеҙ.

■ Рәсәй табиптары билдәләүенсә, хәҙерге медицина әүҙем көрәшһә лә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре арта ғына. 40 йәштән йәшерәк пациенттар ҙа йылдан-йыл күбәйә. Быrange сәбәптәре күп, әммә ҡан тамырҙары атеросклерозына килтереүсе ғәҙәттәргә бәйле. Уларҙың беренсеһе - тәмәке тартыу. Хатта үҙе тартмайынса, йыш ҡына тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булыусылар ҙа атеросклероздан зыян күрә. Шул уҡ ваҡытта, был насар ғәҙәттән баш тартыу инфаркт һәм инсульт хәүефен 30 процентҡа түбәнәйтә. Икенсе ғәҙәт - бөгөнгө заманда кешенең төрлө мәғлүмәттән азат була алмауы менән бәйле. Беҙҙе уратып алған мәғлүмәттең гел генә ыңғай булмауы ла бар, беҙ үҙебеҙ, яҡындарыбыҙ, сериалдар геройҙары, ил, планетаның киләсәге һ.б өсөн гел борсолоп йәшәйбеҙ. Былар иһә йәйләп хроник стресҡа килтерә. Тәүтормош кешеләре стресты хәүеф менән көрәшеүҙә ҡулланған, адреналин ҡырағай йәнлектәрҙән ҡасып ҡотолорға, дошмандарҙы еңергә ярҙам иткән. Бөгөн адреналин тышҡа сыҡмай, ә үҙенең тәьҫирен организмға, эскә йүнәлтә - ҡан баҫымын күтәрә, атеросклероз хәүефен арттыра. Ашарға яратыу - сиргә илтеүсе тағы бер сәбәп. Ярай әле матурлап әҙерләп, өҫтәл артына ултырып, йәйләп ашаһағыҙ, ҡурҡыныс булмаҫ та ине. Тик күптәр аяҡ өҫтө ҡапҡылауға күнеккән. Бында инде метаболизм боҙола һәм "насар" холестерин кимәле күтәрелә. Артыҡ күп ашау иһә ҡанда глюкоза һәм һейҙек кислотаһы күбәйеүенә килтерә. Шәкәр диабеты, һимереү - ҡан тамырҙары өсөн хәүефле. Шулай уҡ ялдарҙа йоҡо туйҙырып алыу ғәҙәте лә сиргә илтә. Ял көндәре күп йоҡлайһығыҙ икән, тимәк, аҙна буйы йоҡоғоҙ туймай. Йоҡо туймау ҙа стресс өсөн яуаплы системаны әүҙемләштереп ебәрә.

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!

**Ошо көндәрҙә Асҡын районы үҙәгендә уҙғарылған "Кот һәм бәрәкәт - милли кейем һәм биҙәүестәрҙә" район-ара семинары халҡыбыҙҙың "Кейемен күр ҙә хәлен бел", тигән тапҡыр һүҙҙәрен раҫ ҡылды: был төбәктең ҡатын-ҡыҙҙары зауыҡлы, иманлы, ғәмле, тамырҙарына тоғро һәм хәлле кешеләрҙең варисҭары икән. Район башҡорттары ҡоролтайы, Ҡашҡа ауылы әүҙемселәре һәм "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ойоштороған күркәм сара быны асыҡ сағылдырҙы.**

# КҮҢЕЛДӘРГӘ...

## ҡот һәм бәрәкәт ҡундырҙылар




Асҡын ауылы Мәҙәниәт йортоноң яҙ көндөң сағыу ҡояшынан балҡып торған иркен фойеһы башҡорт милли кейемендәге ҡатын-ҡыҙҙар тауышынан гөр килеп тора: улар күргәҙмәгә алып килгән кейем өлгөләрен, ҡул эштәрен теҙә. Уларға ҡарап, ҡояш нурҙарынан да, иҫ киткес матур әйберҙәрҙән дә күҙҙәр сағыла. Сараның башланыуын белдереп, барыһы ла күргәҙмәнең бер осона йыйыла һәм Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Фәйрүзә Юнысова тантаналы рәүештә оҫтабикәләр менән таныштыра. Тәүгеләрҙән булып Иҫке Ҡаҙансы ауылы ағинәйҙәре һүҙ ала һәм үҙҙәрендә борондан һаҡланған кейем өлгөләрен, әлеге көндә үҙҙәре тегеп кейгән күҙҙән үткәрергә саҡыра. "Был күлдәк һәм кәзәки минең ҡартинәйемдәрҙән ҡалған. Бишенсе быуын булып һаҡлайым, тимәк, тегелгәненә 250 йыл тирәһе, - ти Мәмдүнә Зарипова. - Ҡыҙыл төҫтәге күлдәктең балитәктәре миҙгелдәрҙе, улар араһындағы бөрөп тегелгән һыҙаттары - айҙарҙы, ә бына еңдәрендәге һәм түшендәге бөрмәләр менән бергә иҫәпләгәндә тәүлектә 24 сәғәт барлығын белдерә. Бына шундай тәрән мәғәнә һалып теккән күлдәктәрен беҙҙең ҡыр-танып ырыуы ҡатын-ҡыҙҙары. Күлдәк менән бергә сейә ҡыҙыл төҫтәге кәзәки һаҡлана, уның ситтәре алтын уҡалы. Тимәк, минең ата-бабаларым эшсән, бай йәшәгән башҡорттар булған, шуны белеп ҡыуанам һәм балаларыбыҙға ла һөйләйем..."

Күргәҙмә менән артабан танышыуҙы дауам итеп, Солтанбәк ауылы ағинәйҙәре сығышын тыңлайбыҙ: "Беҙҙең ауылда ла боронғо күлдәктәр һаҡланып ҡалған. Бына был 1910-1920 йылдарҙа тегелгән сейә ҡыҙыл төҫтәге күлдәк һәм сағыу ҡыҙыл алъяпҡыс күрше ауылдан килен булып төшкән Суфия Ғәббәсованыҡы, уны әле киленe Гөлшат һаҡлай. Был күлдәктең балитәктәренә һирәкләтеп-һирәкләтеп тәңкәләр ҙә баҫылған булған, тик һуңыраҡ балалар өҙөп алып бөткән. Балыҡсы ырыуы ҡатын-ҡыҙҙары күлдәктәренең төп үҙенсәлеге шунда: иҙеүҙәре түштә, итәге арттан оҙонораҡ һәм балитәге лә алъяпҡыс ҡапламаған ерҙән генә һалынған. Күргәҙмәгә шулай уҡ Самия Ғиләжеваның 1930-1940 йылдарҙа тегелгән, Хәмдиә Хәлиуллинаның 1950 йылдарҙағы, Нәфисә Лотфуллинаның 1970 йылдарҙағы, Тәғзимә Йүнһүдәк ҡыҙының 1970-1980 йылдарҙағы күлдәк һәм камзулдарын алып килдек. Беҙҙең яҡта күлдәкте алъяпҡысһыҙ кеймәгәндәр һәм уларҙы байрамға, эшкә айырым теккәндәр. Ҡара төҫтәге шыма сигеүле алъяпҡыстарыбыҙ ҙа булған. Бөгөн беҙ, ағинәйҙәр, Суфия Ғәббәсованың кейеменә ҡарап, үҙебеҙгә матур милли кейемдәр тегеп кейҙек", - тип һөйләй ете бала әсәһе, ауылдың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Ләйсән Суфиянова.

Күргәҙмәлә Урмияҙ, Кубияз, Карткисҙәк ауылдары ағинәйҙәренең дә ихлас әҙерләп алып килгән әйберҙәре урын алған. Улар ауылдарындағы һандыҡтарҙан яҡындарының төҫө итеп һаҡланған кейемдәрҙе сығарып, ошондағы өлгөләр буйынса үҙҙәренә милли кейемдәрҙең әллә нисә төрөн тегеп кейгән. Ә иң мөһиме, барыһы ла кейемгә ҡарап ауылдарының тарихын, күршеләренең яҙмышын да, үҙҙәренең тамырҙарын да хәтерҙә тота. "Беҙҙең ауылдаштарҙа һаҡланған иң боронғо күлдәктәрҙең береһе 1911 йылда тыуған Ҡәтифә Тажетдинова исемле әбейҙең әсәһе Мөғәллимәнеке. Ҡәтифә әбей хәҙер Ҡариҙел районына ҡараған Тайкаш ауылында тыуып, беҙҙең яҡҡа килен булып төшкән. Алныу төҫтәге күлдәк тураһында ул: "Әсәйемдең төҫө итеп һаҡлайым, был француз күлдәге", - тип һөйләр булған. Бик сифатлы тауарҙан тегеләнләге күренеп тора, бәлки, Франциянан алып ҡайтылған булғандыр. Күлдәктең иң осонда бер ҡат балитәге лә булған, балалары ҡырҡҡыслап ҡуйған уныһын. Йәшел кәзәкиһе лә һаҡланған. Ә бына был итәктәренә ҡыя шаҡмаҡ һәм түңәрәк формаһында тауарҙан биҙәктәр һалынып, бөрөлгән урындары төймәләр менән биҙәлеп тегелгән ике күлдәк

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ӨЙГӘ ИНГӘНДӘ, СЫҠҠАНДА...

## үҙеңде нисек тоторға?



**Исламда кеше тормошоноң барлыҡ яҡтарын күҙ уңында тотҡан әҙәптәр һәм өйрәтеүҙәр бар. Шәхес булып дөрөҫ үҫешер, кешеләр менән аралашыуҙы яҡшыртыр өсөн кәрәк ул ҡанундар. Һис шикһеҙ, бындай әҙәптәр, өйрәтеүҙәрҙе ҡулланыу кешенең холҡон камиллаштыра, яҡшы һыҙаттарын нығыта, аралашыуҙа ихласыраҡ итә.**

"Әҙәп"те ҡулланыу кешенең үҙ иркендә тип анларға ярамай, уны һис шикһеҙ ҡулланырға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, күп кешеләр иң ябай нәмәләрҙә хата яһай, көнкүрештә күп нәмәгә иғтибар итмәй. Ә был Исламдың камил һәм күркәм булырға тейеш әхлаҡ нормаларына зыян килтерә. Бәйғәмбәребеҙ юлға сығырға торған сәхәбтәргә бына ни тигән: "Тиҙҙән һеҙ үҙ ағайҙарығыҙға килеп етәсәкһегеҙ. Аттарығыҙҙы, йүгәндәрегеҙҙе, кейемдәрегеҙҙе ҡарағыҙ, таҙалыҡ күҙгә ташланып торһон. Сөнки Аллаһ бысраҡ, тәртипһеҙ һәм насарҙы яратмай!"

Шулай итеп, тәү сиратта мосолман кешеһе үҙенең таҙалығы, кейеменең тәртиптә булыуы, теләнең матур, йомшаҡ булыуы менән айырылып торорға тейеш.

● Өйҙән сыҡҡанда ишекте шаулап ябырға ярамай, сөнки был Ислам ҡанундары менән йәшәгән мосолман кешеһенең ипле булыуына ҡаршы килә.

● Өйгә кергәндә һәм сыҡҡанда бөтәһенә лә "Әссәләмәғәләйкүм вә рәхмәтуллаһи вә бәрәкәтү" тип өндәшеү хәйерлерәк. Быны хуп күргән Бәйғәмбәр ҙә Әнәскә шулай тигән: "Улым, үҙ ғаиләңә ингән саҡта барыһын да сәләмлә. Бынан һиңә лә, ғаиләңә лә сауап булыр".

● Әгәр ҙә мосолман кешеһе өйөнә ҡапыл ғына ҡайта икән, ул был турала ниндәйҙер ысул менән өйҙәгеләргә белдерергә тейеш. Был төрлө етешһеҙлектәрҙе эҙләгән йә башҡаларҙы насар хәлгә ҡалдырырға теләгән кешеләр кеүек булмаҫ өсөн эшләнә. Абдуллах б. Ахмад б. Ханбали шулай тип һөйләгән: "Минең атайым мәсеттән ҡайтырға булһа, ҡайтыуы тураһында барыбыҙға ла аяҡ тауыштары ярҙамында йә йүткереп белдерә торғайны". Бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Арағыҙҙан

✓ ***"Көндәлек кейемдәрегеҙҙә лә ошо семтеп һәм ҡайып тегелгән буйҙарҙы ҡулланығыҙ. Был үҙенсәлектәр Рәсәй һәм донъя дизайнерҙарының иғтибарына лайыҡ", - тине Зөлфиә Краснова.***

Миңзада Хәйруллина һәм Фәйхүнә Ҡиямоваларҙыҡы. Алдан япҡыс бәйләп йөрөгәнгә күрә, итәктәре тик арттан ғына биҙәлгән. Бына шундай үҙенсәлекле өлгөләр һаҡлана беҙҙә", - тип һөйләй Ҡарткиҫәк ағинәйе Фәнирә Нәбиуллина.

Ә бына "Айыҡ ауыл - 2022" конкурсының район кимәлендә беренсе урын алып, әле республикала көс һынашырға торған Ҡашҡа ауылының әүҙемдәре үҙҙәренең зауыҡлы ҡул эштәрен алып килгән. Оҫтабикәләр ниҙәр генә эшләмәй: бәйләм бәйләй, сигеүҙең дә төрлө алымдарын ҡулланалар, ҡорама, биҙәүестәр ҙә эшләйҙәр. Унда Фәрзәнә Ильясова, Зәриә Усманова, Эльза Ибраһимова, Мауза Латипова, Тәнзилә Вәлиева, Әнүзә Ғирфанова, Зилә Әфризунова һәм башҡа уңғандарҙың ҡул эштәре күрһәтелде.

Бына шундай бай күргәҙмәне байҡап сыҡҡандан һуң, барыһы ла мәҙәниәт йортоноң тамаша залына үтеп, сараның рәсми өлөшөнә - фекер алышыу һәм белгестәрҙең кәңәш-төңәшен тыңлауға көйләнде. Асҡын районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары Эльза Әхмәтгәрәеваның "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашып, бик матур һөҙөмтәләргә өлгәшкән яҡташтары тураһындағы ҡыҫҡа ғына докладын тыңлағандан һуң, Ҡашҡа ауыл белем биләмәһе башлығы Ринат Ғәләүетдинов һүҙ алды. Ҡашҡала 700-гә яҡын кеше йәшәй, был ҙур ауылдың мәктәбендә йөҙҙән ашыу бала уҡый, клубтарын яңыртыуҙан һуң асырға йыйыналар, ә милли кейемгә арналған семинар улар үткәргән төрлө сараларҙың береһе генә. Сөнки халыҡ үҙенең үткәндәренә киләсәген ялғап, айыҡ, аңлы, сәләмәт тормошта йәшәүҙе өҫтөн күрә. Өфө ҡалаһынан килгән "Тамға" студияһы етәксеһе, энограф һәм дизайнер Зөлфиә Краснова, гәзитебеҙҙең баш мөхәррире, "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, Туймазы районы биләмә-ара клуб системаһы директоры Гөлнар Сабирова һәм уның коллегалары, Асҡын районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Йәриә Ялалтдинова ҡашҡаларҙың һәм төбәк ағинәйҙәренең эшен хуплау һәм маҡтауҙан башҡа һүҙ тапманы. "Мин һеҙгә милли костюмдарҙы тергеҙеү буйынса тәҡдимдәр менән доклад әҙерләп килгәйнем, әммә күргәҙмәне ҡарап сыҡҡас, хайран ҡалдым: һеҙ районығыҙға ғына хас боронғо милли кейемдәрҙе күптән тергеҙеп, уға яңы һулыш өрөп, бөгөн ғорурланып кейеп йөрөйһөгөҙ икән! Күргәҙмәлә лә боронғо ҡомартҡылар - быуындан-быуынға тапшырыла килгән милли кейемдәр күрһәттегеҙ. Уларҙың тарихын, шәжәрәһен дә өйрәнгәнһегеҙ. Һеҙ - афариндар! Был кейемдәрҙең һәр береһе үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ, һоҡланғыс һәм улар ерле халыҡтың матди-мәҙәни мираҫы, донъяға үҙенсәлекле ҡарашының сағылышы. Көндәлек кейемдәрегеҙҙә лә ошо семтеп һәм ҡайып тегелгән буйҙарҙы ҡулланығыҙ. Был үҙенсәлектәр Рәсәй һәм донъя дизайнерҙарының иғтибарына лайыҡ", - тине Зөлфиә Краснова.

Артабан ул төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемдәрен ентекле өйрәнеүсе этнодизайнер булараҡ, үҙенең эҙләнеүҙәре, музейҙарҙағы үрнәктәр тураһында телмәр тотто һәм Асҡын ағинәйҙәренә кәңәштәрен еткерҙе. Зөлфиә Рәшит ҡыҙы һәр кейемдең шәжәрәһенә - уны кемдәр, ҡасан, ҡайҙа кейгән, тегелеш һәм биҙәк үҙенсәлектәренең аңлатмаларын белеүҙе мөһим тип иҫәпләй, шулай уҡ боронғо кейемдәрҙә сифатлы фотосессия ойоштороу һәм төбәк-ара, Рәсәй кимәлендәге конкурстарҙа, күргәҙмәләрҙә ҡатнашыу зарурлығын да телгә алды.

Башҡорт халҡының рухи һәм матди ҡомартҡыларын киләсәк быуындарға еткереү өсөн хәҙерге заманда был эштәр ысынлап та бик кәрәкле шул. Асҡын ауылынан барыһы ла күңелдәренә ҡот һәм бәрәкәт ҡундырып ҡайтҡандыр, моғайын. Ә беҙ был төбәктең ҡатын-ҡыҙҙарына ҡарата ихтирам, һоҡланыу ҙа тойҙоҡ: ҡайҙа әле шулай әнәһенә-өбәһенә тиклем төпсөнөп, үҙ кейемдәрен өйрәнеп, тамырҙарын барлап торалар? Боронғоса берсә ябай, берсә зауыҡлы итеп кейенгән был гүзәл заттар шундай һығымталар ҙа яһатты: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, ни тиклем генә бай булмаһын, арзан ялтырауыҡтар, кәрәкмәгән биҙәктәр, хатта алъяпҡыс нағышына болонда булмаған сәйер төҫлө сәскәне лә сикмәгән - "сама" тигәнде тоя белгән. Асҡын ағинәйҙәре лә әсәйөләсәйҙәренән килгән шул матур сифаттарын тергеҙеп, ғөҙәттәренә индерергә ашҡынып тороуы, ихласлығы менән күңелдәрҙе арбаны. Киләсәктә улар йөрәктәрендәге ошо дәрт менән үҙ төбәктәрендәге башҡорт ир-егеттәре кейемен дә тергеҙеүгә тотонһон ине, тигән уйтеләк тыуҙы. Ә был уйҙы тормошҡа ашырыуҙа әле Туймазыла йәшәп, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли кейемдәрен тергеҙеүсе этнодизайнер Зөлфиә Краснова мотлаҡ ярҙам итәсәк. Ул үҙе лә шуға ышандырҙы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**





кемдер өйҙә оҙаҡ булмаған икән, төн уртаһында ҡайтыуҙың бер мәғәнәһе лә юҡ".

Бар ғаилә ағзалары ла бер бүлмәлә булһа, өйгә инеүсе уларға инеү өсөн рөхсәт һорарға тейеш. Был ҡанун барыһы өсөн дә тигеҙ эшләй: балалар өсөн дә, ололар өсөн дә.

Имам Малик "Муватта" тигән китабында шулай тип яҙа: "Бер Кеше Бәйғәмбәрҙән һорай, ти:

- Әсәйгә инер өсөн рөхсәт һорарға кәрәкме?
- Эйе. Әсәйгә барғанда инергә рөхсәт һора.
- Һуң мин бит уның менән бер өйҙә йәшәйем! - тип аптыраған кеше.
- Рөхсәт һора.
- Мин бит уға ярҙам итәм.
- Рөхсәт һора. Һинең бит уны кәрәкмәгән ҡиәфәттә күргең килмәйҙер?
- Эйе шул.
- Шулай булғас, рөхсәт һорарға кәрәк.

Нафи Ибн Умарҙың өйҙәге тәртибе тураһында шулай һөйләй:

"Ибн Умар үҫкән улдарына айырым бүлмә бирә торған. Улдары аталарының бүлмәһенә бынан ары рөхсәтһеҙ инергә хаҡлы булмағандар".

● Мосолман кешеһе үҙенең туғандарына, дуҫтарына, таныштарына килгәндә, ишеккә шым ғына, ишетелмәҫлек итеп, шаҡырға һәм холҡһоҙҙарға тиңләшмәҫкә тейеш.

Бер ҡатын, Ахмад б. Ханбалиға килеп, ишегенә бигерәк ныҡ итеп шаҡыған. Ахмад б. Ханбали өйөнән сығып, ҡатынға: "Былай итеп мәрхәмәтлекһеҙ килгәндәр генә шаҡый", - тигән.

Сәхәбтәр Бәйғәмбәрҙең ишеген бармаҡ остары менән генә шаҡығандар, ти. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Ысынлап әйткәндә, йомшаҡлыҡ, наҙлылыҡ нимәлә генә күренһә лә, кешене биҙәй, уның юҡлығы бик насарлай".

Ишеккә бер тапҡыр шаҡығас, туҡталып торорға кәрәк. Өйҙәге кеше был ваҡытта эшләгән эштәрен тамамлап өлгөрөргә тейеш (намаҙ уҡыу, тәһәрәт алыу, ашау). Ишеккә өс тапҡыр шаҡығас та хужа асмаһа, тимәк, ҡунаҡ китергә тейеш. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Рөхсәтте өс тапҡыр һорарға кәрәк, рөхсәт итһәләр, ин, итмәһәләр - кире ҡайт".

● Инергә рөхсәт һорағанда тап ишек алдында түгел, унан уңғараҡ йә һулғараҡ торорға кәрәк.

● Ишек шаҡығандан һуң "Кем?" тип һорайҙар икән, "шундай-шундай кешемен" тиеберәк яуапларға түгел, теүәл үҙеңдең исемеңде атарға кәрәк. "Был мин", тиеү ҙә хужаға бер ни ҙә әйтмәҫ. Хужа һине тауышыңдан танып белер тип тә өмөт итергә кәрәкмәй, тауыштар бер төрлө лә була ала.

Бәйғәмбәр "мин" тигән яуапҡа ыңғай ҡарамаған, сөнки бындай яуап бер ни ҙә аңлатмай. Бухари һәм мөслим шундай хәҙисте миҫал итеп һөйләй: "Бер ваҡыт мин Бәйғәмбәрҙең ишеген шаҡыным. "Кем унда?" тип һораны ул. "Мин", тип өндәшкәйнем, яуабым уға оҡшаманы..."

Әгәр ҙә кеше ҡапыл ғына килеп, хужа уны ҡаршылай алмай икән, ҡунаҡ үсекмәһен. Имам Малик әйткәнсә: "Һәр сәбәпте лә аңлатып булмай".

УҢЫШ ҠАҘАН

# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Ҡиммәттәрҙе билдәлә

Аҡса мөнәсәбәттәрендә төрлө нәмәгә акцент яһарға мөмкин. Күп кенә атаәсә үҙе өсөн ошо ҡиммәттәрҙе асыҡламаған өсөн дә мөмкинлектәрҙе юғалта. Мәҫәлән, һәр кем ашау, эсеү һәм йоҡлау өсөн урын булдырыуҙан тыш, тағы ла күберәк килеме булыуын теләй. Әммә беҙ үҙебеҙ өсөн ниндәй ҡиммәттәр өҫтөнөрәк булыуын хәл итергә тейешбеҙ.

Әйтәйек, кемдер, минең өсөн аҡса күп булыуы кәрәк, шул уҡ ваҡытта мин ғәҙеллек тә яҡлы ти икән. Ошо ике ҡиммәттең һеҙҙең өсөн ҡайһыһы мөһимерәк? Ошоно аныҡ билдәләп, килеп тыуған хәлдәрҙә үҙеңдең инанысыңдан тайпылмаҫҡа кәрәк. Юғиһә, бала алдында ҡарар ҡабул итә алмаған кеше булып күренәсәкһегеҙ. Бала еңел ҡарар ҡабул итергә өйрәнергә тейеш. Мотлаҡ шатланып, үҙ-үҙенә ышанып, башҡаса эшләй алмауына инанып. Юғиһә, ул бер ярҙан икенсеһенә бәргеләнеп тик йөрөйәсәк.

Түбәндә бер нисә һорау бирелә, уларға яуап биреп, үҙегеҙ өсөн нимә ҡиммәтерәк икәнен асыҡлай алаһығыҙ. Ә балағыҙ нисек яуап биреүен теләр инегеҙ?

● Ул спидометрындағы һандарҙы үҙгәртеп, автомобиле аҙыраҡ юл үткән тип, уны ҡиммәтерәккә һата алыр ине. Ул быны эшләргә тейешме?

● Бала яҡшы билдә алыр өсөн бар ысулдарға барырға тейешме? Алдарға, хәйләләргә?

● Тәнәфестә ашарға тип алып киткән аҙығын берәҙәккә бирергә тейешме? Үҙенә ашарға башҡа төрлө аҙығы бөтөнләй булмағанда ни эшләргә тейеш? Әллә унан, ни өсөн эшләмәйһең, тип һораһынмы?

● Йәйге каникул ваҡытында башҡаса ысул ҡалмағанда, эшкә урынлашыу өсөн әңгәмә ваҡытында алдаша аламы?

● Балағыҙ өсөн эштән ҡәнәғәтлек алыу беренсе урында булырға тейешме, әллә юғары эш хаҡымы?

● Балағыҙ билдәле фирма тауарҙары һатып алырға, әйтәйек, билдәле дизайнерҙарҙың кейемдәрен кейергә тейешме?

● Ресторанда буш өҫтәлдәр юҡ. Бер нисә ғаилә көтөп тора. Официант яңылышып, бушаған өҫтәлде һеҙгә тәҡдим итә. Үҙ сиратығыҙҙы көтәсәкһегеҙме?

● Балағыҙ эшкә урынлаша алмай икән ти, үҙенә оҡшағанын тапҡансы, оҡшамағанында йөрөп тора аламы? Әллә артабан эҙләргә тейешме?

● Үҙенең түләргә мөмкинлеге бар икән, кредит алырға йәки кредитҡа автомобиль ала аламы?

Бәлки, ҡайһы бер һорауҙар һеҙҙе уйланырға мәжбүр иткәндер. Тимәк, үҙегеҙ өсөн нимә өҫтөнөрәк, яңынан хәл итергә кәрәк. Кире осраҡта, аҡсаға бәйле балағыҙға бер ҡасан да логикаға бирелгән һәм эҙмә-эҙлекле булған тәрбиә бирә алмаясаҡһығыҙ.

**Бодо ШЕФЕР.**



## 13 ФЕВРАЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30 Д/ф "Разговор по душам". К 95-летию Вячеслава Тихонова. [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.20 Д/ф "Разговор по душам". [12+]
11.35 Д/ф "Михаил Задорнов. От первого лица". [16+]
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Шаляпин". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Каменская-4". [12+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Д/ф "Связь времен". [12+]
10.30 Слово Земли. 2.0. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45, 3.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 0.00, 1.15 Новости (на баш. яз).
13.45, 0.30 Бәхетнамә. [12+]
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 "Гора новостей".
15.45 Преград. Net. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 История одного села. [12+]
18.00 "Бай". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
20.30 Полезные новости. [12+]
21.20 Хоккей. ХК "Сочи" - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
1.45 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]

## 14 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Шаляпин". [12+]
23.25, 0.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.10 Д/ф "Сергей Миронов. Свободная трибуна". [12+]
2.30, 3.20 Т/с "Каменская-4". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15, 2.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
17.00 Автограф. [12+]
17.45 "Криминальный спектр". [16+]
18.00 "Елкән". [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
0.45 Спектакль "Моя звезда". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

## 15 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Шаляпин". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Каменская-5". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
10.30 История одного села. [12+]
10.45 Әлләсе... [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.00, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]
14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]
15.00 "МузКәрәҙ". [6+]
15.30 "Гора новостей".
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома.[12+]
17.45 История признания. [12+]
18.20 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
21.00 Специальный репортаж. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
0.45 "Суд матери". [12+]
2.30 Әлләсе... [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

## 16 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1 Башкортостан (Уфа)
5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Шаляпин". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Каменская-5". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Алтын тирмә". [0+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00 Автограф. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 "Сулпылар". [0+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 "Городок АЮЯ". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Финликбез. [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.45 "Криминальный спектр".[16+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
1.15 Спектакль "Семь девушек". [12+]
2.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]

## 17 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. Концерт группы "Руки Вверх!" в Лужниках. [12+]
23.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. Прямой эфир. [0+]
1.20 Х/ф "Как быть хорошей женой". [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Битва сезонов. [12+]
23.55 Улыбка на ночь. [16+]
1.00 Х/ф "Мелодия на два голоса". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.45, 5.00 Үткән гүмер. [12+]
13.15, 17.45 "Курай даны". [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 5.30 Автограф. [12+]
14.25 Хоккей. "Толпар" (Уфа) - "Стальные лисы" (Магнитогорск). МХЛ.
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
19.00, 3.00 "Честно говоря". [12+]
19.45, 23.45, 2.00 История одного села. [12+]
20.00 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Башкорт йыры". [12+]
21.15 История признания. [12+]
23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]
0.00 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [12+]
2.15 "Алтын тирмә". [0+]
4.30 "Бай". [12+]

## 18 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.25, 18.20 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.15 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.05 Х/ф "Нотр-Дам". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Врачиха". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Лети, перышко". [12+]
1.00 Х/ф "Счастье по договору". [12+]
4.25 Х/ф "Кружева". [12+]
6.13 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30, 19.00 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 "Это моя профессия". [12+]
9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Преград. Net. [6+]
11.00 "КультУра". [6+]
11.15 "МузКәрәҙ". [0+]
11.30 Детей много не бывает. [6+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Полезные новости. [12+]
16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.
19.30, 3.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
22.00 Республика LIVE #дома.[12+]
22.30, 0.45 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Концерт Залии Ганиатуллиной. [12+]
1.30 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]
3.15 Автограф. [12+]
4.30 Тормош. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

## 19 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 14.00, 23.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
16.25 Д/с "Век СССР". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]

### РОССИЯ 1
6.15, 2.15 Х/ф "Страховой случай". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Врачиха". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Испанская Голгофа". [16+]
3.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [0+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 "Дорога к храму". [0+]
16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
16.45, 3.15 "Честно говоря". [12+]
17.30 Юбилейный концерт народного артиста РБ Ишмурата Ильбакова. [12+]
19.15 Әлләсе... [6+]
20.00, 2.45 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.30 Территория женского счастья. [12+]
20.45 Д/ф "Связь времен". [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 2.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 "Башкорт йыры". [12+]
23.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]
1.45 Моя планета Башкортостан. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

✓ *Бәхетеңә инселәнгән икән, ризыҡ булһынмы, муллыҡмы, әллә матди берәй байлыҡмы - ул суртан эсендәге алтын йөҙөк рәүешендә лә, лотерея отошо менән дә, башҡа юл менән дә даланлы кешеһен таба.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 13 ФЕВРАЛЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ РАДИО КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**4-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уҙаҡташ. Уйғыр. Алабута. Карл. Уйынсы. Йомортҡа. Ҡояш. Уҡ. Байраҡ. Ожмах. ЭВМ. Пи. Күҙлек. Ниәт. Куб. Аквариум. Ҡорт. Мата. Дала. Рено. Һырт. Алма.

**Вертикаль буйынса:** Йосопова. Комсомолка. Ханов. Алатау. Аждаһа. Эйә. Абушахманов. Умарта. Утрау. Кама. Шарлауыҡ. Бикбулатова. Йоҙроҡ. Нәшер. Ырғаҡ. Кәрт.

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

***1444 һижри йыл.***

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (22) дүшәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 16:47 | 18:15 | 19:45 |
| 14 (23) шишәмбе | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (24) шаршамбы | 7:10 | 8:40 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 16 (25) кесе йома | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 17 (26) йома | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |
| 18 (27) шәмбе | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |
| 19 (28) йәкшәмбе | 7:02 | 8:32 | 13:30 | 16:57 | 18:28 | 19:58 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*ШУЛАЙ ҘА БУЛА*

## НАСИП МАЛ... теш һындырып инер

Насип мал тешеңде һындырып инер, тигән халыҡ, һәм белмәй әйтмәгән. Бәхетеңә инселәнгән икән, ризыҡ булһынмы, муллыҡмы, әллә матди берәй байлыҡмы - ул суртан эсендәге алтын йөҙөк рәүешендә лә, лотерея отошо менән дә, башҡа юл менән дә даланлы кешеһен таба. Ә бына тотош меңәрләгән евроның 22 йәшлек испан ҡатыны Наталия Фрейроның ауыҙына килеп инерен берәү ҙә, хатта ҡыҙыҡай үҙе лә уйына ла килтерә алмағандыр, әлбиттә. Ә эш шулай була: Мурос ҡалаһында йәшәүсе был һылыуҙы егете балыҡ ресторанына киске ашҡа саҡыра һәм уны моллюски (диңгеҙ ҡабырсаҡтары) менән һыйларға була. Ризыҡты ашап ултырғанда Наталияның тешенә ниндәйҙер ҡаты матдә эләгә. Баҡтиһәң, был һирәк осрай торған ҡарағусҡыл ҡыҙыл төҫтәге ҙур ғына ҡабырсаҡ ынйыһы булып сыға. Эксперттар иҫәпләүенсә, диңгеҙ ынйыһының хаҡы кәмендә 4 мең евро тәшкил итеүе ихтимал икән...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 февраль "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 12+
**16 февраль "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**17 февраль "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**18 февраль "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 18.00 12+
**19 февраль "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 февраль "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн. 12.00 6+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 16+
**15 февраль "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн. 11.00 6+
**16 февраль "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+
**17 февраль "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 февраль "Я научилась просто, мудро жить..."** А. Ахматоваға арналған кисә. 6+
**"Время любить"** концерт. 6+
**17 февраль Эстрада-джаз оркестрына - 25 йыл!** 6+
**18 февраль "Музыку слушаем вместе"**. 11.00 0+
**Премьера! "Музыкальный интерактив"** 4-7 йәшлек балалар һәм атай-әсәйҙәре өсөн тамаша. 0+
**"Даланлы булһын ир-егет!"** концерт. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 февраль "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+
**15 февраль "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрамаһы менән М. Ғафури ис. БАДТ гастролдә. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 февраль "Я пою и звуки тают"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**14 февраль "Мир ОТКРЫТиЯ"** концерт. 18.00 6+
**17 февраль "Хушығыҙ, хыялдарым"** (А. Атнабаев), драма. 12+
**18 февраль "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+
**19 февраль "Приключения лентяя в подводном 3Девятом царстве"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**Премьера! "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 18.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**15-16 февраль "Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 13.00, 18.00 12+
**17 февраль "Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 13.00, 19.00 12+

### БР Милли музейы

**13 февраль "Шаляпин Өфөлә"** күргәҙмәһе асыла. 6+
**14 февраль "Алып кил һәм китап алмаш"** акцияһы. 11.00-18.00 12+
**"Бал ҡортонда ҡунаҡта"** тамаша. 15.00 6+
**15 февраль "Книга для всех"** литературная гостиная. 11.00 6+
**"Ватаныма хеҙмәт итәм!"** сара. 12.00 6+
**"Самауырлы ритайым"** сара. 18.00-21.00 12+
**16 февраль "Волонтеры культуры: как увидеть музейное закулисье"** осрашыу. 12+
**17 февраль "Археоkids: йәш археолог курсы".** 15.00 6+
**18 февраль "Малахит ҡумта"** интерактив экскурсия. 14.00 6+
**"Башҡортостаным"** квиз. 15.00 6+

АФАРИН!

# ИҢДӘРЕНДӘ...

## яҡшы өлгө яуаплылығы ята



**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы төшөргән яңы сериалдың исем туйы уҙғарылды. Өфө балалары һәм әсәй-атайҙары Башҡортостан юлдаш телевидениеһында ғинуар айынан алып күрһәтелә башлаған "Уйынсыҡ түгел" сериалы геройҙарын ҡыҙыл келәмдә сәләмләне.**

Яңы сериал өлкәндәр менән балалар мөнәсәбәте хаҡында һәм "бала уйынсыҡ түгел", тигән фекерҙе күтәреп сыға. Унда төрлө ғаиләлә үҫкән, төрлө холоҡло үҫмер балалар етди ҡаршылыҡтарға осрай. Оло эштәрҙе йырып сығыр өсөн өлкәндәрҙең таяныс булыуы кәрәк икәнен аңлайҙар. Бына шундай сюжетлы сериалдың 6-сы серияһын "Родина" кинотеатры залында ҡарау бәхете тейҙе өфөләргә. Кино шунда уҡ йөкмәткеһе, ваҡиғалары менән йәлеп итте. Әйткәндәй, уның концепция авторы - Гөлназ Ҡолһарина, сценарий авторы - Дамир Йосопов, ҡуйыусы режиссер - Гөлсәсәк Игебаева, ҡуйыусы оператор - Шамил Кәримов, продюсер - Гөлшат Ғәлиуллина, ҡораусы режиссер - Дамир Сәлимов, тауыш режиссерҙары - Гөлфинә Латипова һәм Артур Панкратов, режиссер ярҙамсылары - Дилара Сөләймәнова һәм Айҙар Ғәйнетдинов. Сериал өсөн музыканы композитор Айҙар Хәмзин яҙған. Уны Өфө, Ғафури һәм Архангел райондарында төшөргәндәр.

"Уйынсыҡ түгел" сериалында барлығы 50-нән ашыу актер һәм балалар ҡатнашҡан, ә төп ролдәрҙә Урал Усманов, Динислам Абыҙгилдин, Фатима Сынбулатова, Розалия Аҙнаева, БР-ҙың халыҡ артисы Илдар Ғүмәров һәм БР-ҙың атҡаҙанған артисы Зөһрә Шәрәфетдинова уйнаған. "Мин "Тамыр" телеканалына Башҡортостан балаларын ижади яҡтан үҫтерергә тырышыуы өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Был бик бурыслы эш, әммә улар милли мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереүгә күп көс һалып, йылдан-йыл еңеүҙәр яулап эшләп килә. Ошо тамырҙар үҙебеҙҙең телдә һөйләшеп, сәнғәтебеҙҙе, мәҙәниәтте, милләтте алға этәрәләр икән, тимәк, халҡыбыҙҙың киләсәге бар. Сериалдың ижади төркөмөнөң берҙәмлеге, унда эшләгән егет-ҡыҙҙарҙың күңел таҙалығы, ихласлығы арбаны. Улар мине ихласлыҡҡа, күңел матурлығына күмде. Донъяла был ихласлыҡты кисереүҙән дә ҙурыраҡ бәхет юҡтыр", - тине сериалдың исем туйында сығыш яһап Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Ғүмәров.

Байрам кисәһендә сығыш яһаған мәртәбәле ҡунаҡтар, профессиональ актерҙар, кино сәнғәте өлкәһендә билдәле шәхестәр барыһы ла сериалда төшкән балаларҙың актерлыҡ һәләтен, уларҙы төшөргән һөнәрмәндәрҙең үҙ эшенең оҫтаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте. Ә балалар үҙҙәре "Уйынсыҡ түгел" сериалында төшөүҙе оло тәжрибә туплау, мәңгелеккә хәтерҙәрендә ҡалыр мәл тип атаны. Улар өсөн киноға төшөү июнь айынан декабргә тиклем дауам итеүе лә ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған, ваҡыттарын файҙалы һәм күңелле үткәреү генә булған. Бына шундай позитив команданың эшенә баһа биреп тә, киләсәктә уларҙың һөнәри үҫешенә ышаныс белдереп тә, билдәле режиссер Булат Йосопов: "Һеҙ мәҙәниәт менән эшләйһегеҙ. Ә мәҙәниәт - ул кешеләр һәм ҡиммәттәр менән эшләй. Һеҙ киләсәк образын барлыҡҡа килтерәһегеҙ, һеҙгә ҡарап ҡалаларҙа балалар башҡортса һөйләшергә, дуҫ булырға, өлкәндәр менән аралашырға өйрәнер. Һеҙ республикабыҙҙың киләсәге образын барлыҡҡа килтерәһегеҙ. Тимәк, иңдәрегеҙҙә яҡшы үрнәк булыу тигән оло яуаплылыҡ ята. Ошо матур эшегеҙҙе дауам итерһегеҙ, ә республика был юҫыҡта ярҙам итер, тип ышанам", - тине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Уйынсыҡ түгел" сериалының исем туйына килгән барлыҡ балалар, нисә йәш булыуға ҡарамаҫтан, үҙҙәренең яратҡан уйынсыҡтарын тотоп килде һәм күптәре "Тамыр" каналының кескәй журналистарына улар тураһында һөйләп үтте. Тамырҙар төшөргән бер минут тирәһе видеояҙмала күҙҙәре янып торған, асыҡ йөҙлө, телсәр бәләкәстәрҙе күреп, тамаша залындағы һәр кемдең күңеле йомшарып, йөрәге наҙға тулышты: атай-әсәйҙәренең балалары үҫеп буй еткергәс тә күңелдәрендә ихласлыҡ, әҙәп, тыуған иленә һәм теленә, халҡына һөйөү йөрөтһөн тип хәстәрләүе һөйөндөрҙө. Бындай милләттәштәребеҙ һаны тағы ла артһын, тип теләнек.**

**Сәриә ҒӘЛИЕВА.**

МӘҘӘНИ САРАЛАР

# ТУҒАН ТЕЛДӘР ДУҪЛЫҒЫ



**Халыҡ-ара туған телдәр көнөндә Милли әҙәбиәт музейы Башҡортостан Республикаһы халыҡтары дуҫлығы йорто менән берлектә билдәле шағирҙар - Мостай Кәрим, Ғабдулла Туҡай, Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Сыңғыҙ Айтматовтың ижады һәм эшмәкәрлегенә арналған әҙәби осрашыу үткәрә.**

Сара 21 февралдә "Торатау" Конгресс-холында көндөҙгө сәғәт 3-тә башланасаҡ. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рәшит Шәкүр, Ҡәҙим Аралбаев, телсе ғалимә Фирҙәүес Хисаметдинова, милли-мәҙәни үҙәктәр етәкселәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәренең ошо яҙыусыларҙың дуҫлығы, үҙ-ара ижади эшмәкәрлеге, тәржемәләр тураһында һөйләйәсәк, йәкшәмбе мәктәптәре уҡыусылары туған телдәрендә сығыш яһаясаҡ.

Милли әҙәбиәт музейы "Әҙәбиәттә туған тел бөйөклөгө" тип аталған ошо сараһы менән "Әҙәби гөлләмә" тигән фестивалгә старт бирә. Ул дәүләт һәм республика халыҡтарының туған телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм таратыу өсөн шарттар тыуҙырыу буйынса дәүләт сәйәсәте сиктәрендә йыл дауамында барасаҡ. Фестиваль программаһына тел, әҙәби байрамдарға бәйле календарь даталар, шулай уҡ поэзия, яҙыусылыҡҡа бәйле иҫтәлекле, шулай уҡ әһәмиәтле әҙәби даталар инәсәк. Төбәк-ара һәм республика кимәлендә төрлө конкурстар үткәреү ҙә планлаштырылған. "Әҙәби гөлләмә" фестивален ябыу тантанаһы 14 декабргә, Башҡорт теле көнөнә билдәләнгән.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БОҘОЛОШҠАН ДУҪ...

## дошмандан яман

Атанан яҡшы тыуһа - ятып ашар, атанан яман тыуһа - һатып ашар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Асыулы саҡта ниндәйҙер ҡарар ҡабул итеүҙән тыйылып тор.

**(Сенека).**

Был актрисаның карьераһы... режиссер тормошонда уйнаған роленән башланды.

**(Габриэль Гауб).**

Ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәштәрендә йыш ҡына ирҙәрҙең көшөлөгөндәгеләр ирeп юҡҡа сыға.

**(Александр Кумор).**

Әгәр ҙә өләсәй һәм олатай ейән-ейәнсәрҙәре тәрбиәһенә ҡыҫылыуҙы мотлаҡ тип иҫәпләй икән, тимәк, улар үҙ балаларының тәрбиәһендә әллә ни уңышҡа өлгәшмәгән.

**(Роберт Лембке).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер батша өс хеҙмәтсеһен саҡырып ала ла: "Һәр берегеҙ силәк алып, минең баҡсама инегеҙ һәм йәшелсәләремде, емеш-еләктәремде йыйып, силәктәрегеҙгә тултырығыҙ, һуңынан келәт һаҡсыһына тапшырырһығыҙ", - тип әмер бирә. Тегеләр ҡушылғанды үтәргә тип ҙур ғына баҡсаға инеп китәләр. Береһе, үҙенә йөкмәтелгән бурысҡа бик яуаплы ҡарап, баҡсала өлгөргән ниғмәттәр менән силәген лыҡа тултыра. Икенсеһе һауытын яртылаш ҡына тултыра һәм: "Әй, ярамаған тағы!" - тип, силәктең икенсе өлөшөнә тиҙ генә сүп-сар һалып, эшен тамамлай. Өсөнсөһө иһә бөтөнләй ялҡау булып сыға: "Батша барыбер келәткә барып, ҡарап-тикшереп йөрөмәҫ, нимәгә аҙапланып ваҡыт үткәрергә?" - тип, силәген тулыһынса таш һәм сүп-сар менән тултырып, өҫтөн үлән-маҙар менән ҡаплап ҡуя.**

**Бер аҙҙан был хеҙмәтселәр силәктәрен келәт хужаһына тапшыра. Шул саҡта келәт хужаһы быларға батшаның тағы бер әмерен еткерә:**

**- Батшабыҙ һеҙҙе бер айға зинданға ябырға әмер бирҙе. Шул ваҡыт дауамында һеҙ силәктәрегеҙгә йыйған емеш-еләк, йәшелсә менән генә туҡланырға тейеш булаһығыҙ!**

**Батша бойорғанды намыҫ менән башҡарған кеше шунда: "Әлхәмдүлилләһ, ярай әле, тырышып, бер ай туҡланырлыҡ ризыҡ тупланым", - тип ҡыуана.**

**Тоғон яртылаш ҡына тултырғаны: "Их, ниңә батша ҡушҡанды еренә еткереп үтәмәнем икән?" - тип үкенә. Ә өсөнсөһө: "Мин үҙемде астан үлеү яҙаһына дусар иттем бит", - тип, оло ҡайғыға ҡала...**

**...Эйе, Аллаһы Тәғәлә был донъяла һәр кем өлөшөнә ошондай "силәк" тапшырып ҡуя. Ул "силәкте" нимә менән, нисек тултырыу - һәр кемдең үҙ эше..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 182

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.